ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

22-28 июль (майай) 2017

№29 (759)

15 йыл

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡәрҙәштәр менән...
бәйләнештәр ныҒый
4-5



Дөрөҫ юлдан барам:
республикала милли кино сәнғәтен үҫтереү кәрәк!
8-9



Урал тауышы
10-11



Был юлы мәргәндәр...
Учалы ерендә көс һынашты
11,16



ТВ-программа 14

***Әҙәпһеҙҙәр: "Барыһы ла ябай ғына. Мин яҙмыш ҡулында уйынсыҡ булғым килмәй, тормошомдо үҙем ҡорғом килә", - тиер. Һәм хаталаныр. Сөнки тормош менән йәнең тыныс булғанда ғына идара итергә мөмкин. Ә йән тыныслығына тормош беҙгә аҙым һайын ырғытып торған сюрприздарҙы тыныс ҡабул итеп кенә өлгәшергә була.***

***Эндрю Мэтьюз.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Баш ҡалала ғына түгел, башҡа ҡалаларҙа, ауылдарҙа ла урамдарҙы сүпләйҙәр, матурлыҡ өсөн ҡуйылған объекттарҙы ваталар-емерәләр. Ошондай хәлдәргә шаһит булғанда, нимә эшләйһегеҙ?

***Рита АҠБУЛАТОВА, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ уҡытыусыһы:*** Профессор Преображенскийҙың: "Сүпләгән урында бысраҡ түгел, таҙартылмаған урында бысраҡ", - тигән билдәле тезисы һәр кемгә таныштыр. Әммә бөгөнгө ысынбарлыҡ икенсерәк: ҡала урамдарын көнө-төнө һеперһәләр ҙә, төрлө заманса ҡорамалдар менән таҙартып торһалар ҙа, тирә-йүн көндән-көн таҙара бармай, киреһенсә, бысраҡлыҡ арта ғына һымаҡ. Нимә сәбәпсе һуң бындай күренешкә? Минеңсә, халыҡ танауынан йырағыраҡ булған нәмәне автоматик рәүештә: "Был минеке түгел. Минеке булмағас, емерергә лә, ҡырырға ла, сүпләргә лә ярай", - тип өйрәнгән. Был минең йортом, был минең урамым, был минең ҡалам, мин улар өсөн яуаплы, мин уларҙы таҙа, төҙөк тоторға бурыслы, тигән ҡараш булдырмай тороп, тәртип тураһында һүҙ йөрөтөү ҙә урынһыҙ һымаҡ.

Фатирын аҙнаһына 3-4 тапҡыр йыйыштырып, бар йыйған сүбен подъезға сығарып һалырға күнеккән күршем менән әллә нисә йыл көрәшеп ҡараным - файҙаһыҙ. Шул кеше ҡала урамында йөрөгәндә сүп-сар ташлау өсөн махсус урна эҙләп, кәнфит ҡағыҙын, банан ҡабығын кеҫәһенә йә сумкаһына һалып йөрөйҙәр, тип уйлайһы ла түгел.

Күптәр бындай тәртипһеҙлекте күрмәмешкә һалышып үтеп китә, ҡайһы берәүҙәр тел шартлатып аптырауын белдерә, икенселәре иһә, бер һүҙ әйтмәй, үҙе сүпте күтәрә лә урнаға алып барып ташлай. Ысынлап та, нимә эшләргә һуң бындай осраҡта? Тәмәке төпсөгөн ергә ташлаған бер иргә: "Урнаға ярты метр ара, ә һеҙ сүбегеҙҙе ергә ташлайһығыҙ", - тинем. "Бер мин генә шулай итмәйем бит, бер төпсөккә күберәк ни, бер төпсөккә кәмерәк ни..." - булды уның яуабы. Һүтеп һалып әрләргә лә иткәйнем дә: икенсе тапҡыр шулай ҡыланырға булғанда минең йәмһеҙ тауыш менән, сырай һытып, аяҡ тибеп аҡырынғанымды иҫенә төшөрөр ҙә кире ҡылығынан баш тартыр, бәлки, тип... Кеше араһында ҡысҡырып тороу шулай уҡ матур күренеш булмауын, был да тирә-йүнде сүпләү - яман һүҙ менән сүпләү, булырын аңлап, туҡтап ҡалдым.

Минең фекеремсә, бында ҡануниәт аша ғына ниндәйҙер һөҙөмтәгә өлгәшергә булалыр. Ошо ерҙә, ошо ваҡытта һис бер кемдең башында сүп ташлау, йә булмаһа, нимәнелер ватыу теләге, ғөмүмән, тыуа ла алмаһын - шундай ҡаты ҡанун кәрәктер. Сөнки ана һөтө менән һеңмәгәнде башҡаса һеңдереп булмайҙыр, моғайын.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# БАЛА САҠТАН БЕЙЕГӘНДЕҢ...

## баш юғары, һыны тура, йөрәге ярһыу

**Рәсәйҙә Бала саҡтың ун йыллығы үткәрелеүе тураһында иғлан ителгәс, республикабыҙҙа балалар өсөн быға тиклем ойошторола килгән күркәм саралар тағы ла әүҙемләште. Мәҫәлән, йыл да Күгәрсен районының хозур тәбиғәтле Мораҙым тарлауығында уҙғарылған башҡорт бейеүен башҡарыусы балалар араһындағы "Байыҡ" республика телевизион конкурсының гала-концерты быйыл Өфө ҡалаһында үткәрелде. Конкурста бөтәһе ике меңдән ашыу бала ҡатнашҡан, өс йөҙ йәш бейеүсе финалға тиклем үткән.**




*Өфө ҡалаһының "Гүзәл-данс" студияһы бейеүселәре.*

*(Мәҡәләнең дауамы 6-сы биттә).*

12+

УЙЛЫҒА - УЙ

# ҮҘ КӨНӨБӨҘҘӨ...

## үҙебеҙ күрәйек

**Федоровка районы юрматы ырыуы ерҙәрендә урынлашҡан һәм ошо ырыуҙың аҫабаһы булыуыбыҙ менән ғорурланабыҙ, ер-һыуҙарыбыҙҙы күҙ ҡараһылай һаҡларға тырышабыҙ. Шул уҡ ваҡытта ситтәр өсөн был ерҙәрҙең ул тиклем үк ҡәҙерле булмауын, уларҙың беҙҙең ерҙәргә ниндәйҙер килем сығанағы ғына итеп ҡарауын да күрә-белә йөрөйбөҙ.**

Беҙҙең ауылдар элек бөтә республикаға билдәле "Пугачев" исемендәге совхоз ҡарамағында ине. Совхоз тарҡалғас, ауылдар төрлө ҡулдарға тапшырылып, үҙ йүнен үҙе күрә хәҙер. Күп хужалыҡтарҙа бик модалы булған инвесторҙар етәкселек итә. Әлбиттә, халҡыбыҙ заман үҙгәрештәренән баҙап ҡалып, ауылдар, хужалыҡтар яҙмышын үҙ ҡулына алырға ҡыймайыраҡ торған мәлдә, ситтән килеп, ерҙәребеҙҙе эшкәртеп, халыҡҡа эш тә биреп, ниҙер эшләргә тырышып ятҡан ул инвесторҙарға һүҙ әйтеп булмай. Ләкин ошо урында үҙ күҙәтеүҙәремдән сығып, бер генә фекер әйткем килә: ситтәр барыбер ҙә беҙҙең ерҙәргә, беҙҙең был байлыҡҡа йәндәй ҡәҙерле мөнәсәбәт күрһәтмәй. Был ерҙәр, әлбиттә, улар өсөн аҡса сығанағы.

Бер генә миҫал: грузин милләтле етәкселәр ҡулындағы хужалыҡтар йыл да бер үк баҫыуҙа көнбағыш сәсә. Көнбағыш ни тиклем килемле продукция булһа ла, уны бер майҙанда ете йылға бер генә сәсергә кәрәк. Даими рәүештә көнбағыш сәселгән майҙан эшлектән сыға, тупраҡ иҫкерә. Быны институтта уҡымаған атайҙарыбыҙ ҙа яҡшы белгән. Әлеге иптәштәр ҙә белмәй түгелдер, ләкин уларға был мөһим түгел. Ә беҙ, аҫаба башҡорттар, бындай вайымһыҙлыҡҡа барыбер әсенеп ҡарайбыҙ. Әммә әлегә ошо ерҙәребеҙ яҙмышын үҙ ҡулына алыр егеттәребеҙ юҡ, улар ситтә йөрөй, Себер тарафтарында оҙон аҡса һуға.

Әлбиттә, ауылды үҙ иткән, ауылыбыҙҙы йәшәтергә тырышҡан йәш кешеләребеҙ ҙә бар. Беҙҙең Яңы Яуыш ауылы халҡының үҙ тормошон матур итеп ҡорорға тырышыуы күҙәтелә һуңғы йылдарҙа. 2014 йылда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы һәм Башҡортостан Хөкүмәте иғлан иткән "Айыҡ ауыл" конкурсында ҡатнашып, беренсе урын яулағайныҡ. Шул тиклем дәртләнеп киткәйне халыҡ шул саралар барышында, ир-егеттәребеҙ хатта күмәкләшеп айыҡ булырға анттар биреп йөрөгәйне. Әйҙәүселәр булғанда, фарман булғанда беҙҙең халыҡ яҡшы эштәргә берләшергә, ҡушылырға әҙер тора бит ул. Тик матур башланған эштең дауамы булманы. Ни сәбәптәндер, ошо конкурсҡа йомғаҡ яһалманы. Халыҡ үҙен алдаштырылған бала һымаҡ хис итте. Конкурстың шарты буйынса, еңгән ауылға күпмелер аҡса вәғәҙә ителгәйне бит инде. Беҙҙекеләр ул аҡсаға мәҙәниәт йортон ремонтлатырбыҙ йә мәсеткә нигеҙ һалырбыҙ тип өмөтләнгәйне. Нисек кенә булмаһын, ул конкурсты дауам итергә кәрәк. Төп бәләбеҙ бит - эскелек. Айыҡ милләт булһаҡ, үҙ еребеҙҙең яҙмышын сит ҡулдарға биреп тормаҫ инек.

Мин үҙем дә аграр институтын тамамлап ҡайтҡаны бирле үҙ еремдә, үҙ ауылымда эшләйем. Совхоз булған саҡта инженер, унан һуң фермер булып эшләнем. Совхоз тарҡалғас, үҙемдең тыуған ауылым Яңы Яуышта "Маяҡ" хужалығы төҙөп, шунда етәкселек итәм. Фермала һимертеүгә мал аҫырайбыҙ, иген сәсәбеҙ, техникабыҙ етерлек. Һәр хәлдә, хужалыҡ үҙ көнөн үҙе күрә. Тирә-яҡтағы бар хужалыҡтар ситтән килгән етәкселәр ҡулында булғанда, уларға сәсеүен дә, урып йыйыуын да агрохолдингтар килеп башҡарып киткәндә, беҙ барыһын да үҙ көсөбөҙ менән атҡарабыҙ. Быйыл, мәҫәлән, сәсеү өсөн дәүләттән бер ниндәй субсидия фәлән ала алманыҡ, үҙ көсөбөҙ менән сәстек. Замана шулай бит: үҙ көсөңә генә таянырға ҡалды хәҙер.

Әйтергә теләгәнем дә шул ине: ғаиләңде лайыҡлы аҫырайым тиһәң - лайыҡлы ғаилә башлығы бул; ауылыңдың йәшәүен, ер-һыуыңдың именлеген теләһәң - быға үҙең дә булышлыҡ ит; милләтең өсөн көйәһең икән - шулай уҡ уның лайыҡлы улы булырға тырыш. Ата-бабаларыбыҙ ожмахтай еребеҙҙе ҡан түгеп һаҡлап ҡалып, беҙгә тапшырған икән - беҙ уны киләһе быуындарға мөмкин тиклем матур, бөтөн көйө тапшырырға тейешбеҙ. Шулай итәйек.

**Сәғит ДӘҮЛӘТБАЕВ,**
**Федоровка районы "Маяҡ" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт етәксеһе.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Баш ҡалала ғына түгел, башҡа ҡалаларҙа, ауылдарҙа ла урамдарҙы сүпләйҙәр, матурлыҡ өсөн ҡуйылған объекттарҙы ваталар-емерәләр. Ошондай хәлдәргә шаһит булғанда, нимә эшләйһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**



***Шамил КУЧУКОВ, журналист:*** Кәнфит ҡағыҙы, тотонолған билет һәм башҡа ниндәйҙер ҡыйҙы ташлар урын булмаһа, мин уны кеҫәгә һалып ҡуйыуҙы хуп күрәм. Хатта урманда, кеше күрмәгәндә нимәнелер ырғытыу, тәбиғәтте бысратыу - минең өсөн оло яуапһыҙлыҡ һәм әҙәпһеҙлек. Балаларымды ла шуға өйрәткәнмен. Тик торған бағанаға бер кем дә теймәй, тиһәләр ҙә, үкенескә күрә, ҡулдары ҡысыған кешеләр табыла, айырыуса йәштәр, "ҡырын тейәгәндәр" араһында. Әлбиттә, бындай күренешкә битараф ҡала алмайым һәм һәр саҡ ваҡытында, урынында киҫәтеү һүҙе әйтеп барам. Башлыса тыңлайҙар, быға саҡлы берәүҙең дә киҫәткән өсөн ҡул күтәреүгә баҙнат иткәне булманы. Ә ҡырыу-емереүҙе, моғайын, төнөн тормошҡа ашыраларҙыр, сөнки көпә-көндөҙ ундай ҡылыҡтар ҡылған кешене бер тапҡыр ҙа күргәнем булманы. Бары тик мәғлүмәт сығанаҡтары аша ғына ишетеп беләм ундай хәлдәрҙе...

***Земфира ЙӘНТУРИНА, Салауат районы, хеҙмәт ветераны:*** Йәшәгән урыныбыҙ йылғаға төшкән тыҡырыҡ эргәһендә урынлашҡанлыҡтан, ғүмер буйы уны таҙартып йәшәнек. Быға балаларыбыҙ ҙа күнеп бөттө. Элегерәк урамдарҙа һыу колонкалары булмағанда, кешеләр ҡоҙоҡ ҡаҙҙырмағанда, һыуҙы йылғанан ташып эстек. Ул ваҡыттарҙа кешеләр тәртиплерәк инеме икән, әллә ҡарап торғаныбыҙ ошо һыу булғанғамы, тыҡырыҡтарҙы тәртиптә тоторға тырыштылар. Хәҙер замандар үҙгәрҙе - һәр йортта тиерлек һыу, һәр ихатала тиерлек ҡоҙоҡ, тәбиғи сығанаҡ хәҙер һыу инеү, кер сайҡау, көтөү малдары һыулау өсөн генә файҙаланылғанлыҡтан, тыҡырыҡтарҙы таҙартыу бер кемдең дә иҫенә лә төшмәй, уларҙы эргә-тирәлә йәшәүселәр таҙартһа - таҙа була, таҙартмаһа, сүплек ояһына әйләнә. Сөнки алкоголь менән мауығыусылар был урындарҙы, һыу буйҙарын бигерәк ярата, тик арттарынан йыйыштырырға ғына "оноталар". Уларға әйтә торғас, хәҙер ҡайһы берҙәре тотоп төшкән пакетына шешәләрен, башҡа сүп-сарын тултырып, үҙе менән алып китә, бәғзеләрҙең иһә бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сыға.

Һыу буйҙары ғына түгел, урманға инһәң дә улар урыны-урыны менән сүплек ояһына әйләнеп бара. Был бер беҙҙең генә районда түгел, тотош ил буйынса күҙәтелгән күренеш, тип әйтергә мөмкин. Совет осорон яманлаһалар ҙа, ул йылдарҙа халыҡ урманды ла, башҡа милекте лә, ер өҫтө һәм ер аҫты байлыҡтарын да үҙенеке тип ҡабул итте һәм уларға һаҡсыл ҡарашта булды. Атай-әсәйҙәр ҙә балаларына матур өлгө күрһәтеп, тәбиғәткә ял итергә сыҡҡан ерҙә бер сүп ҡалдырманы. Урамда балаларҙың ҡулынан төшөп киткән ризыҡты ҡәҙерләп алып, йә кеше аяғы баҫмаҫтай ергә һалып китерҙәр, йә үҙҙәре менән алырҙар ине. Хәҙер иһә бала ҡулынан төшөп киткән ризыҡ шул ерҙә ятып ҡала, тапала, тәләфләнә. Ата-әсәләрҙең быға иҫе лә китмәй. Баланы әрләп йәки әйтеп тәрбиәләмәйҙәр, ул ата-әсәһенең ҡылығына ҡарап тәрбиәләнә, тип юҡҡа әйтмәйҙәр. Инәйем дә кәңәш һорап килгән, йәки балаларына зарланған кешеләргә: "Балаңа тәүфиҡ һорарҙан алда, тәүҙә үҙеңә һора", - ти торғайны. Бөгөнгө заманда был бигерәк тә актуаль һәм кемделер әрләп кенә аҡылға ултыртып, ғаиләлә алмаған тәрбиәне биреп булмай, аңлағанына матур өлгө күрһәтеү үҙе үк ҙур тәрбиә ул.

**Зәйтүнә НИҒМӘТЙӘНОВА**
**әҙерләне.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

## АТАЙҘАР БҮРЕ КЕҮЕК



Ни өсөн атайҙар донъялыҡтан киткәндә яндарында балаларының булыуын теләмәй икән? Был һорауға яуапты бүреләрҙең тормошон өйрәнгәндә таптым. Ҡартайып хәлһеҙләнгән бүреләр өйөрҙән ситкә китеп йән бирә.

Атайым үлем түшәгенә яҡҡас, уның янына әллә нисә тапҡыр ҡайттым. Һәр ваҡытта ла ул минең тиҙерәк Өфөгә кире китеүемде теләне. Талап итте. Атайҙар бүре кеүек. Тоҡомон дауам итеүселәр алдында бахыр булып күренгеһе килмәй. Йән мең михнәтле тәндән иреккә осорға ынтылғанда, уны ебәрмәҫкә тырышып тыпырсынған тән меҫкен булып күренә шул...

## ЭҘЛӘРГӘ ЯРАМАЙ



Ни өсөндөр эҙләгәнебеҙҙе таба алмаһаҡ, быны өсөн яҙмышыбыҙҙы, башҡаларҙы әрләйбеҙ, хатта мине яратмай, тип Хоҙайға ла дәғүә белдерәбеҙ. Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, эҙләгәнеңде Хоҙай үҙе юлға сығарып ҡуя. Быйың өсөн Уға тоғро булырға һәм эҙләнеүҙән туҡталырға ғына кәрәктер. Ныҡышмал эҙләнгән саҡта иһә, күңелгә икеләнеүҙәр инеп ултыра һәм кеше Хоҙай юлына сығарғанды күрмәй, башҡаға ылығыуы бар. Әллә мин яңылыш уйлайыммы?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов етәкселегендә республика делегацияһы Ҡырғыҙстанда булды, улар бында "Алтай цивилизацияһы һәм алтай телдәре ғаиләһенең ҡәрҙәш халыҡтары" халыҡ-ара форумында ҡатнашты. Форум барышында беҙҙең ғилми хеҙмәткәрҙәр тарафынан ҡырғыҙ халҡының башҡорт теленә тәржемәләнгән "Манас" эпосы менән таныштырыу сараһы үтте.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Экология һәм махсус һаҡланған тәбиғәт биләмәләре йылына арналған "I BIKE UFA" халыҡ-ара велосипед фестивалендә ҡатнашты. Республика етәксеһе велоуҙышта ҡатнашыусылар менән бергә Ленин исемендәге майҙандан Конгресс-холға тиклемге араны велосипедта үтте. Спорт байрамы Өфөлә етенсе тапҡыр үткәрелде. Велоуҙыштың дистанцияһы 10 саҡрым тәшкил итте.

✓Башҡортостан хөкүмәте премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов 26 августа Өфөлә "Һөт иле" Бөтә Рәсәй фестивален уҙғарыу тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. "Һөт иле" Бөтә Рәсәй фестивале Өфөлә 2011 йылдан алып уҙғарыла. Әлеге көндә ул Рәсәйҙә һөткә һәм һөт продукцияһына арналған иң ҙур байрам. Фестивалдең маҡсаты - һөт һәм һөт аҙыҡ-түлеген ҡулланыуҙы арттырыу, дөрөҫ туҡланыуҙы һәм сәләмәт йәшәү рәүешен пропагандалау.

✓29-30 июлдә Баймаҡ районының Граф күле буйында Башҡорт йәштәре йыйыны үтә. Форумды ойоштороусылар - Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы ярҙамында Баймаҡ районы хакимиәте һәм Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты. Сарала ҡатнашыусылар өсөн шәжәрә, "Урал бөркөтө" конкурстары, интеллектуаль уйындар ойошторола. Еңеүгә бөгөндән үк юл ярырға мөмкин: Ҡоролтайҙың социаль селтәрҙәге төркөмөндә "Шағир.ру", "Мин башҡорт кейемендә!" фотоконкурсы һәм "Башҡортостан - йөрәгемдә" кеүек интернет-конкурстар башланды.

✓Ағымдағы йылдың ғинуарынан майға тиклем Башҡортостанда 10894 пар никахын рәсмиләштергән, тип хәбәр итә республиканың Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты. Уҙған йыл менән сағыштырғанда никахтар һаны 10 процентҡа артҡан (+1043). Алты ай эсендә 7599 ғаилә тарҡалған, был күрһәткес тә былтырғыһынан 34-кә күберәк.

✓ *Совет власы осоронда, кеше бөтә нәмәнең хужаһы, тигән фекергә таянып йәшәнек. Унан һуң инде бөтә нәмәгә ҡулланыусылар күҙлегенән сығып баҡтыҡ, әле лә шулай бөгөнгө көн менән генә йәшәүҙе дауам итәбеҙ.*



*УЯН, УЙЛАН...*

# ИЛ ӨҪТӨНӘ КИЛГӘН БӘЛӘГӘ ҠАРШЫ...

## ил менән бергәләп көрәшәйек!



**Был юлы ҡәләмгә тотонорға яҡташыбыҙ, шағирә, Ш. Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Тәнзилә Дәүләтбирҙинаның социаль селтәрҙәге адресыма яҙған бер хәбәре сәбәп булды. Хатта шундай юлдар бар: "Беҙҙең ауылда - Иҫке Монасипта бер ҡасан да эскесе исеме сыҡмаған бер нисә кеше йәшләй мәрхүм булды. Байрамда күңел асҡандан һуң һауыға алмағандар. Емертеп донъя көтөп ятҡан кешеләр улар. Бәлки, һатыуға ағыулы араҡы эләккәндер, бәлки, шундай самопал менән ағыуланғандарҙыр, тип борсолам. Был хафалы хәл нисек береһен дә һағайтмай икән? Бүтән ауылдарҙа шулай ҡапыл үлеүселәр тойолмаймы икән?"**

...Тағы ниндәй генә һүҙҙәр табырға һуң был афәт тураһында йәнгә үтерлек итеп яҙыр өсөн? Ҡырыла бит халыҡ, ҡырыла. Халҡыбыҙҙың күпме аҫыл улҡыҙҙары шул ағыу арҡаһында мәлһеҙ яҡты донъя менән хушлаша. Бөгәзәләр аҡса эшләүҙең еңелысулына йәбешеп - ҡырҙан осһоҙ хаҡҡа сифатһыҙ араҡы алып ҡайта ла һата. Әйтәйек, 5 йыл буйы өйөнән йыраҡта белем эстәп, яңы эш башлаған уҡытыусының эш хаҡы 10 мең һум тирәһендә тирбәлә, ул был аҡсаны алыр өсөн көн һайын тандан эшкә йөрөй, өйгә ҡайтҡас, дәфтәр тикшерә, иртәгәге көнгә әҙерләнә. Ә теге хәмер һатып аҡса эшләүсе был 10 меңде бер көндә табып, теттереп кенә йәшәй - тандан донъяңды көтә һалып эшкә лә бараһы түгел, кискә лә эш эйәреп ҡайтмай. Бөтә эше - ауылдаштарын ағыулау, сиргә һабыштырыу, хатта үлтереү, ғаиләләрҙә ыҙғыш сығарыу.

Быны әле лә эшкә юлланғанда бер йорттан теҙелешеп ир-аттар сығып, йәнәшәләге өйгә эйәртенешеп, әллә ниндәй эш ҡырырға йыйынғандай дәртле баҫып инеп барғандарын күреп ҡалдым да, эргәмдәге кешенән, бер-бер хәл булғанмы әллә, тип ҡыҙыҡһынмай түҙмәнем: "Был йортта ҡаҙаҡ араҡыһын ҡойоп һаталар, ә теге ирҙәр ингән өй - притон", - шулай булды ҡыҫҡа яуап. Баҡһаң, ҡырҙан бер яртыһын 70 һум иҫәбенән алып, халыҡҡа 150 һум менән һатып ятҡан замана "эшҡыуары" йәшәй икән был йортта. Хәйер, ундай йорттар бихисап хәҙер.

Шундай "ҡаҙаҡ араҡыһы" эсеп йөрөгән иренең, өс көн ҡарауыллап, өйҙән сығармаһалар ҙа айныға алмай, һаман иҫерек килеш булыуын да аптырап һөйләгәйне бер танышым. Хатта бер шундай атай ишаратының балалары хаҡында ла белмәүе хайран итте. "Ҡатын, беҙҙең малай мәктәптә ҡалай оҙаҡлай ул", - тигән ул бер айныҡҡан арала. Ә "малай" күптән инде юғары уҡыу йорто студенты. Балаһының мәктәп тамамлағанын да, хатта уҡырға ингәнен дә белмәгән атай ишараты. Икенсе бер атай улын армияға оҙатырға ла ҡайтып инмәгән, притондарҙа йөрөп ҡалған. Улы бер йыл хеҙмәт итеп ҡайтҡас, аһ-аһ, мин запойҙан да сығып өлгөрмәнем, малай армияла ла йөрөп ҡайтҡан, тип ыржайған. Йәнә бер атай ишараты ҡыҙы юғары уҡыу йортонда уҡып, сессияһы тамамланып, каникулға ҡайтҡас, танымай, "Һаумы, балдыҙ" тип ҡаршы алған. Ә артабанғы хәл бөтөнләй башҡа һыймаҫлыҡ һымаҡ. Иренең эскенән башы сыҡмағас, ҡатыны айырыла. Байтаҡ ҡына айырым йәшәйҙәр. Һәйбәт кенә кеше тәҡдим яһағас, ҡатын бәхетен икенсегә һынап ҡарамаҡ булып, ризалыҡ бирә. Никах көнөн билдәләйҙәр. Был хаҡта элекке ир ишараты ҡайҙандыр белеп ҡала һәм никах уҡылған көндө теге йортҡа килә. Ҡатынын ҡыҙғанып, яңы ирен дөмбәҫләргә, тип уйлайһығыҙмы? Юҡ шул. Улай булһа, әҙ генә булһа ла ихтирам тигән нәмә уяныр ине. Ҡайҙан эсергә табырға белмәй йөрөгән ир ишараты теге иргә ҡатынын бер яртыға һатырға ниәт итә... Тәү ҡарашҡа көлкө һымаҡ күренһә лә был хәлдәр, бер ҙә генә көлкө килмәй, илағы килә...

1985-1986 йылдарҙағы алкоголгә ҡаршы компания алкоголь һатыуҙы 51 процентҡа, реаль ҡулланыуҙы 27 процентҡа кәметә. 2007 йылда спирт һатыу кеше башына йылына 10 литр була. Шуның 80 проценты һыра, 13 проценты - араҡы һәм ликер изделиелары. 2009 йылда йән башына спирт ҡулланыу 18 литрға барып етә. Был Рәсәйҙә йәшәгән һәр кеше йылына 90 шешә араҡы эскән тигән һүҙ. Иғтибар итегеҙ - һәр кеше, эскеселәр генә түгел. Ә шул һандар эсенән эсмәгән кешеләр һанын алып ташлаһаҡ, хәл бөтөнләй ҡот осҡос төҫ ала. Был эскелек ниндәй генә аҫыл заттарҙың башына етмәне инде, күпме талантлыларҙы "ашаны".

Белгестәр алкоголизмдың Рәсәйҙә эпидемия төҫөн алыуын билдәләй. 2003 йылдан башлап илдә йән башына алкоголь ҡулланыу кимәле тик артыу өҫтөндә. Бүтән илдәр араһында Рәсәй был йәһәттән лидерҙар иҫәбендә. 2014 йылда, мәҫәлән, алкоголь ҡулланыу, төбәгенә ҡарап, йән башына 16 литрҙан 30 литрға тиклем тирбәлгән. Ә бында бит илдәге бөтә халыҡ - яңы тыуғанынан алып 100 йәштәгеһенә тиклемгеһе алынған. Даими эсеүселәр иҫәбенә күпме тура килеүен яҡынса самаларға була. Йәнә шуныһы: был рәсми статистикала һалым органдарында теркәлгән, лицензия менән сауҙа иткән һатыу нөктәләре аша үткән алкоголь тураһында ғына һүҙ бара. Быға йәнә көмөшкә, итәк аҫтынан һатылған фанфуриктар, одеколондар, техник спирттар, йәнә теге ҡойоп һата торған араҡыларҙы өҫтәһәң, йығылып китмәле һандар килеп сығыр ине.

(Дауамы 13-сө биттә).

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*



**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**

# ТӘБИҒӘТ ТУРАҺЫНДА ХӘСТӘРЛЕК...

## йәшәү рәүешебеҙгә әйләнһен!

***Филүс ЯХИН, БР Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министры урынбаҫары:*** Экология өлкәһендә иң мөһим берәмек - ул кеше. Нәҡ кешенең мәҙәнилеге, тәрбиәлелеге, тәртипле булыуынан тирә-яҡ мөхиткә мөнәсәбәте барлыҡҡа килә. Әгәр ҙә мәҙәнилек булмаһа, дәүләт тарафынан ниндәй генә яҡшы законлар ҡабул ителмәһен, саралар үткәрелмәһен, һөҙөмтәһе булмаясаҡ. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш булдырыу өсөн бала саҡтан экологик мәҙәнилек тәрбиәләргә кәрәк. Халыҡтың мәҙәни кимәле түбән булғанлыҡтан, кешеләр бер-береһенә генә түгел, тирә-яҡ мөхиткә ҡарата ла насар мөнәсәбәттә. Кешеләккә байлыҡ итеп бирелгән тәбиғәт өсөн яуаплылыҡ тоймаусылар мөхитте бысратып, зыян килтерә.

Халыҡтың был мөнәсәбәте һуңғы ике быуат эсендә илдәге үҙгәрештәр, сәйәси ваҡиғалар менән дә бәйле. Совет власы осоронда, кеше бөтә нәмәнең хужаһы, тигән фекергә таянып йәшәнек. Унан һуң инде бөтә нәмәгә ҡулланыусылар күҙлегенән сығып баҡтыҡ, әле лә шулай бөгөнгө көн менән генә йәшәүҙе дауам итәбеҙ. Әйтергә кәрәк, ҙур заводтар, сәнәғәт предприятиелары үҙ эшмәкәрлеге менән тәбиғәткә килтергән зыянға ҡарағанда, тирә-яҡ мөхиткә һаҡһыҙ ҡараштa булған айырым кешенең зыяны күберәк. Сөнки ҙур ойошмаларға яуаплылыҡ һалынған, хәүефһеҙлек йәһәтенән хәстәрлек күреү мотлаҡ итеп ҡаралған. Хөкүмәт уларҙы контролдә тота ала, ләкин һәр кешене ҡарауыллап тора алмай.

Шуға күрә, һәр кем үҙе аңлы рәүештә тәбиғәт тураһында хәстәрлек күреүҙе тормош ҡағиҙәһе итеп белергә тейеш. Эшебеҙ, әйткән һүҙебеҙ өсөн яуаплылыҡ тойорға өйрәнәйек. Милләттәштәрҙе мәҙәниле булырға, күңел сафлығын һаҡларға өндәйем. Үрҙә әйткәнемсә, мәҙәниле кеше һәр нәмәгә иғтибарлы, ихтирамлы мөнәсәбәттә булыр. Саф күңелле кеше әхлаҡһыҙлыҡ, яман уйҙарҙан азат булыр һәм үҙе лә яҡын-тирәләгеләргә зыян итеүҙән тартыныр. Күңеле таҙа кешенең уй-ниәттәре лә, ҡылған эштәре лә изге ниәттән яралыусан, был беҙҙең тыуған төбәгебеҙ мәнфәғәте, халҡыбыҙҙың киләсәге өсөн бик әһәмиәтле. Ҡулланыусы рәүешендә бөтә нәмәне таләфләп, ҡәҙерһеҙләп йәшәүҙән туҡтайыҡ һәм шуның менән бергә тыуған илгә, тәбиғәткә, бер-беребеҙгә ҡарата ла иғтибарлыраҡ булырға өйрәнәйек.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Миҙгел башынан Башҡортостанда белгестәргә 8878 кеше талпан ҡаҙалыуға зарланып мөрәжәғәт иткән. Был мәғлүмәттәр уртаса күп йыллыҡ күрһәткестәргә тап килә, тип хәбәр итталәр төбәктең Һаулыҡ һаҡлау министрлығында. Талпандан һаҡланыуҙың иң яҡшы ысулы - прививкалар, тип иҫкә төшөрә эпидемиологтар.

✓Республикала ҡулланыусылар кәрзинендә булған күпселек азыҡ-түлек арзанайҙы. Башҡортостанстат мәғлүмәттәре буйынса, бер аҙна эсендә айырыуса кәбеҫтә, картуф, алма арзанайған. Бер аҙнала осһоҙланған азыҡ-түлек исемлегендә һөт, икмәк һәм булка изделиелары, йомортҡа, сәй, тауыҡ, көнбағыш майы һәм аҡ май, тоҙ, туңдырылған балыҡ, һарыҡ, һыйыр, суска ите һәм дөгө бар. Хаҡтары күтәрелгән аҙыҡ-түлек исемлегенә башлы һуған, кишер, вермишель, он, ҡарабойҙай, сыр, шәкәр һәм тары ярмаһы инә.

✓"Өфө ҡалаһының экологик картаһы" интерактив сервисының эшмәкәрлеге сиктәрендә Рәсәй һәм Трамвай урамдары киҫелешендәге урман паркы зонаһында экологик акция үтте. Ҡаланың таҙалығына битараф булмаған волонтерҙар, предприятиелар һәм ойошмалар вәкилдәре сәғәт 10-да Рәсәй урамы, 1 адресы буйынса урынлашҡан йорт эргәһендә йыйылды. Шулай уҡ экологик картаға теләгән һәр кем рөхсәт ителмәгән сүп-сар түгеү урыны тураһында мәғлүмәт ҡалдыра алды.

✓Башҡортостан Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының халыҡ мәшғүллеге мәғлүмәт порталында эш хаҡы 30 мең һумдан ашыуыраҡ булған яңы вакансиялар баҫылған. Эске эштәр министрлығының Бөрйән районындағы бүлексәһенә тәфтиш төркөмө начальнигы урынбаҫары кәрәк. "Спецтехнологии" предприятиеһы Өфө районының Горново ауылында эшләү өсөн офис-менеджер эҙләй, техник белемле һәм эш тәжрибәһе булыу шарт. Ҡушала эшләү өсөн "Кроношпан" предприятиеһына инженер-программист талап ителә.

✓15 августа Өфөлә "Башҡортостан Республикаһы Кубогы" шайбалы хоккей буйынса миҙгел алды турниры старт ала. "Өфө-Арена" боҙонда дүрт команда: "Салауат Юлаев" (Өфө), "Адмирал" (Владивосток), "Нефтехимик" (Нижнекамск) һәм "Лада" (Тольятти) уйнай.

**"Башинформ"дан.**

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# НИҢӘ ЮЛДАР...
## ҡат-ҡат йүнәтелә?



**Өфө ҡала округы хакимиәтенә килгән хаттарҙың береһендә Транспорт урамында йәшәүсе бер ҡатын юлдарҙы ҡабаттан ремонтлауға зарлана. Автор раҫлауынса, бында ай эсендә юлды - икенсе, ә һуңғы өс ай эсендә өсөнсө тапҡыр ремонтлайҙар икән. "Юлдарҙы беҙҙә күҙ буяу өсөн генә ремонтлайҙар кеүек, был хәлде туктатыу өсөн тағы ҡайҙа мөрәжәғәт итергә мөмкин?" - тигән һорау ҡуя ул. Ә башҡа граждандар юлдар ремонтлауҙы йәй башҡарылған төп эштәрҙең береһе булараҡ ҡабул итәме икән? Ошо һорау менән стажлы водитель, ҡасандыр үҙе лә юл төҙөү мастеры булып эшләгән Байыш ХӘЙҘӘРОВҡа мөрәжәғәт иттек.**

**➔ Рәсәйҙең төп проблемаһы - юлдар һәм ахмаҡтар, тиҙәр. Был әйтемдең исеме есеменә тура киләме?**

- Ысынлап та, Рәсәйҙең, тимәк, ил составындағы барлыҡ субъекттарҙың төп проблемаһының береһе булып юлдар тора, уны һәр автоһәүәҫкәр әйтеп бирер. Сөнки юл аҙабы ысын мәғәнәһендә гүр ғазабына әйләнә. Юлдарҙы ремонтлау осоро тығындарға сәбәпсе була. Хәйер, беҙҙә тығындар йыл әйләнәһенә бөтмәй, тиерлек. Шуға ла аҡыллы баштар һаман да халыҡты төрлө уйҙырмалар менән һыйлап, алдаштырып, ахмаҡтар сүрәтендә ҡалдыра килә. Быныһы инде айырым бер ҙур тема.

**➔ Юлдарҙы бер тапҡыр һәм ныклы, сифатлы итеп эшләү йәки ремонтлау өсөн нимә кәрәк?**

- Юлдарҙың шундай хәл-торошон тәбиғәт шарттарына ғына ауҙарып ҡалдырһаҡ, хата булыр ине, моғайын. Беҙҙә бит юл төҙөлөшө өсөн бөтөн унайлыҡтар ҙа, шарттар ҙа бар, юл полотналарын күтәртер өсөн дә сифатлы таштар, атап әйткәндә, ҡиммәтле таштар етерлек, тик беҙ уны тейешенсә ҡуллана ғына белмәйбеҙ, күрәһең. Икенсе яҡтан, юлдарҙы сифатлы итеп төҙөү технологияны ла тейешенсә үтәлмәй һымаҡ. Быларҙың барыһы ла хәҙерге ваҡытта аҡса мәсьәләһен төп проблема итеп алыуҙың бер сәбәбелер ул. СССР заманы менән сағыштырғанда, транспорт төрөнөң иҫәп-хисабы юҡ, улар юл һалымы түләй. Элекке ваҡытта юлдарҙы тейешле кимәлдә тотоу өсөн был һалымдар еткән, хәҙер иһә бәләкәй генә ремонтҡа ла етмәй тиҙәр, шул сәбәпле, ямау өҫтөнә ямау һалына. Ә минеңсә юл һалымынан бюджетҡа ингән аҡсаға юлдарға алтын ялатырға булыр ине һымаҡ.

**➔ Юл-транспорт фажиғәләренең сәбәбе водителгә генә бәйлеме, әллә уның ҙур өлөшө юл эшләүселәр намыҫындамы?**

- Төп сәбәптәрҙең береһе - руль артында ултырыусы автомобилен артыҡ ҡыуалауы, юл ҡағиҙәләрен теүәл үтәмәүе. Шулай уҡ, юлдарҙың торошо ла бик насар, ниндәй генә трассаны алып ҡараһаҡ та, алда ниндәй сюрприз көткәнен белеү ҙә белмәй. Улар ҙур соҡорҙар, йырындар, эре таштар һ.б. булыуы мөмкин. Юл-транспорт фажиғәһенең күпселек өлөшө юл төҙөүселәрҙең ғәйебенә лә бәйле, сөнки сеймалға экономия яһауҙары көн кеүек асыҡ, тимәк, ремонт эштәре технологияға ярашлы башҡарылмай, ә күҙ буяу өсөн генә эшләнә.

**Земфира ХӘБИРОВА**
**яҙып алды.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҠӘРҘӘШТӘР МЕНӘН...
## бәйләнештәр ныҒыЙ



**12 - 14 июлдә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов етәкселегендәге делегация Бойондороҡһоҙ дәүләттәр берләшмәләре баш ҡалалары һәм эре ҡалалары Халыҡ-ара ассамблеяһының XXV сессияһы сиктәрендә Ҡаҙағстан Республикаһының баш ҡалаһында - Астанала рәсми сәфәрҙә булды.**

Сәфәр барышында Өфө делегацияһы Астананың төҙөкләндереү һәм торлаҡ төҙөлөшө тәжрибәһе менән танышты. Маршруттың тәүге нөктәһе булып ҡаланың төп иҫтәлекле урындарының береһе - 97 метрлыҡ "Байтерек" монументынан "Хан-Шатыр" сауҙа-күңел асыу үҙәгенә тиклемге ара торҙо. Был көндәрҙә бында Арт-фестиваль үтә, уның сиктәрендә донъяның төрлө илдәренән килгән дизайнерҙар һәм скульпторҙар "Нуржол" бульвары буйына экология, ғаилә һәм балалыҡ, йәштәр, ҡалдыҡтарҙы утилләштереү һ.б. темалар буйынса үҙ эштәрен тәҡдим итә.

Ҡала менән танышҡанда Ирек Ялалов Астананың ҡала хужалығында энергияның яңыртыла торған сығанаҡтарын файҙаланыуҙағы ыңғай тәжрибәһен билдәләне. Мәҫәлән, ҡайһы бер йәйәүлеләр үткәүелдәре төнгөһөн ҡояш батареялары һәм ел энергияһы ярҙамында яҡтыртыла. Шулай уҡ ҡояш энергияһы велосипедтарҙы ҡуртымға биреү урындарында, парковкалар ҡоролмаларында йыш ҡулланыла. Ҡаланы төҙөкләндереүгә Астана белгестәренең ҡарашы өфөләрҙеке менән оҡшаш: йәшелләндереүгә, территорияларҙы комплекслы төҙөүгә, светофор хужалыҡтарын, ҡаланы яҡтыртыу системаһын модернизациялауға һ.б. ҙур иғтибар бирелә.

Сәфәр барышында делегация "Highvill Astana" торлаҡ комплексы менән дә танышты. 18-34 ҡатлы 7 бейек йорттан торған был ҙур торлаҡ участкаһы Көньяҡ Корея компанияһы ҡатнашлығында төҙөлә һәм хеҙмәттәшлектең беренсе ҡарлуғаһы булып тора. Төҙөлөш эштәре 2007 йылда башланып, былтыр тамамлана. "Highvill Astana" үҫешкән эске инфраструктураһы менән айырыла: йортта өйгә килтереп биреү системаһы булған супермаркет һәм аптека эшләй, фитнес-клуб, сауна, балаларҙың уйын бүлмәһе, матурлыҡ салоны, медицина үҙәге, кофейня бар. Йорттар үҙ-ара йәйәүлеләр үткәүеле менән тоташҡан. Комплекс территорияһы төҙөкләндерелгән, унда балалар баҡсаһы төҙөлгән. Эске ихатала йәйәүлеләр зонаһы бар, эске һәм тышҡы яҡтыртыу системаһы уйланылған, ямғыр һыуын ағыҙыу канализацияһы ҡоролған, газондар эшләнгән, брусчатка түшәлгән. Комплекстың барлыҡ зоналарында һәм диспетчер бинаһында видеокамералар урынлаштырылған эске мониторинг системаһы именлекте генә тәьмин итеп ҡалмай, йорттоң инженер селтәрҙәрен күҙәтеү, кәрәк икән, халыҡҡа ярҙам күрһәтеү мөмкинлеген бирә. Комплекс менән танышып сыҡҡандан һуң, Ирек Ялалов Кореяның төҙөлөш компанияһын Өфөгә саҡырҙы.

Шулай уҡ, сәфәр барышында делегация "Киләсәк энергияһы" ЕХРО - 2017 Бөтә донъя күргәҙ-

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ОСРАШЫУҘАР ДАУАМ ИТӘ



**Был аҙнала Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡаланың Октябрь районы халҡы менән осрашты. Тап күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшеүҙәр граждандарҙың үҙҙәрен борсоған һорауҙарға шунда уҡ яуап алыуы менән әһәмиәтле.**

Ҡала башлығына Резеда Муравьева Өфө шоссеһындағы юл участкаһын капиталь ремонтлау тураһында һорау бирҙе. Ирек Ишмөхәмәт улы белдереүенсә, бигерәк тә йөк транспорты күп йөрөгәнлектән, юл ныҡ көсөргәнешле һәм асфальт ҡатламы тиҙ ашала. Һеҙөмтәлә район халҡынан юлдың ҡәнәғәтһеҙ торошо тураһында хаттар күп килә. Быйыл ғына бында соҡорҙарҙы ямау эштәре башҡарылған, 1737 квадрат метр майҙанға асфальт-бетон ҡатнашмаһы һалынған. Ә юлды капиталь ремонтлау 2018 йылға планлаштырылған.

Һупайлы бисҭәһендә йәшәүсе Алина Маслюкова Ю. Гагарин урамы, 54 адресы буйынса урынлашҡан йорт ихатаһындағы балалар майҙансығының торошона зарланып, ихатала төҙөкләндереү эштәре башҡарыу кәрәклеген билдәләй. Йортта йәшәүселәр йыйылыш үткәреп, "Заманса ҡала мөхите" программаһында ҡатнашыуға ғариза биргән. Быйыл ошо программаны тормошҡа

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" проекты сиктәрендә Иҫке Шишмә юлын - Өфөнө һәм 26 мең кеше йәшәгән Шишмә ҡасабаһын тоташтырған төбәк трассаһын ремонтлай башланылар. Баш ҡалала эшләгән Шишмә халҡының күбеһе көн һайын ошо юлдан йөрөй. Төҙөкләндереү эштәре 5 саҡрым оҙонлоҡтағы ике участкала алып барыла, заманса техника йәлеп ителгән.

✓Баш ҡалала шулай уҡ ҡала хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы менән ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре берлектә хәрәкәт мөмкинлектәре сикләнгән граждандарҙың автосаларын парковкалау өсөн тәғәйенләнгән урындарҙы тикшереү буйынса рейдтарҙы даими ойоштора. Уның маҡсаты - инвалидтарҙың машиналары өсөн махсус билдәләнгән урындарға парковкаланган өфөләргә бының Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоу ғына түгел, ә әхлаҡһыҙлыҡ булыуын аңлатыу.

✓Хеҙмәт министрлығы рәсәйҙәрҙең 2018 йылда нисек ял итәсәген билдәләне. Йыл дауамында илебеҙ халҡын бер нисә оҙайлы каникул көтә. Беренсенән, киләһе йылда Яңы йыл каникулдары 30 декабрҙән 8 гинуарға тиклем дауам итә. Февраль каникулдары 23-нән 25-нә тиклем, мартта - 8-нән 11-нә ҡәҙәр, майҙа - 29 апрелдән 2 майға тиклем. Еңеү көнөндә - ял бер генә көн, 9 май шаршамбыға тура килә. Июнда өс ял көнө көтөлә - 10-нан 12-нә тиклем, ноябрҙә иһә 3-нән 5-нә ҡәҙәр. 2018 йылда рәсәйҙәр 28 өҫтәмә ял көнө алаҫаҡ. Ысынында иһә был - икенсе отпуск.

✓Башҡортостанда капиталь ремонт өсөн иғәнәләрҙе түләү ябайлашты. Хәҙер милек хужалары капиталь ремонтҡа иғәнә түләү өсөн квитанцияны үҙенең электрон почтаһына алып, уны өйҙән сыҡмайынса түләй ала. Түләү документын алыу ысулын үҙгәртеү өсөн Төбәк операторы офисына йәки "Электрон ҡабул итеү" бүлеге менән файҙаланып, рәсми сайт аша ғариза менән мөрәжәғәт итергә кәрәк. Капиталь ремонтҡа иғәнәне шәхси иҫәптең номерын йә иһә бинаның адресын хәбәр итеп, Һаҡлыҡ банкының теләһә ниндәй бүлексәһендә комиссияһыҙ түләргә була.

✓Ағымдағы йылдың 14 июленән "Өфө" аэропортынан Краснодарға, 15 июлдән иһә Дондағы Ростовҡа тура рейстар асыла. Краснодарға самолеттар аҙнаһына дүрт тапҡыр: дүшәмбе, шаршамбы, йома һәм йәкшәмбе көндәрендә оса. Өфөнән Дондағы Ростовҡа рейстар аҙнаһына өс тапҡыр: шишәмбе, кесаҙна һәм шәмбе көндәрендә башҡарыла.

✓ *Эшлекле сәфәре барышында Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Аҡбуҙат" башҡорт этномәҙәни берекмә активистары һәм Ҡаҙағстан халыҡтары ассамблеяһы секретариаты менән дә осрашырға форсат тапты.*










...мәһендә булды. 10 сентябргә тиклем дауам итәсәк сарала Рәсәйҙән, Үзбәкстандан, Әзербайжандан, Германиянан, Ҡытайҙан, Мысырҙан һәм башҡа дәүләттәрҙән миллиондан ашыу кеше ҡатнашҡан да инде. Өфөләр Рәсәй, Ҡаҙағстан, Германия, Монако һәм башҡаларҙың павильондары менән танышты. Һәр ҡатнашыусы ил торлаҡ-коммуналь хужалығындағы, транспорт мөхитендә яңыртылыусы энергия сығанаҡтарын ҡулланыу өлкәһендәге, ҡалдыҡтарҙы утилләштереүҙе ойоштороу мәсьәләләрендәге, медициналағы һәм башҡа тармаҡтарҙағы яңы эшләнмәләрен күрһәтә. Шулай уҡ, уларҙа планетала экологик именлекте һаҡлау, климаттың үҙгәреүе менән көрәш мәсьәләләре, материалдарҙы өйрәнеү, йыһанды тикшереү, "йәшел" иҡтисад ҡорамалдарын ғәмәлдә ҡулланыу кейстары инициативалары буйынса инновацион системалар күрергә мөмкин.

БДБ-ның баш ҡалалары һәм эре ҡалалары Халыҡ-ара ассамблеяһының XXV юбилей сессияһында уның президенты, Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, Астана ҡалаһы хакимы Асет Исекешев һәм БДБ илдәренең 26 ҡалаһы етәксеһе ҡатнашты. Сессия сиктәрендә Ирек Ишмөхәмәт улы Өфөлә тормошҡа ашырылған уңышлы проекттар: ҡаланың электр селтәре хужалығына "Смарт Грид" концепцияһын индереү, "Хәүефһеҙ ҡала" аппарат-программа комплексының ҡулланылыуы, янғынға ҡаршы муниципаль хеҙмәт эше һ.б. хаҡында һөйләне һәм һығымта яһап, ҡалалар етәкселәрен һанлы технологияларға иғтибар итергә, шулай уҡ Астананың урбанистика, транспорт һәм ҡала хужалығында һанлы технологиялар ҡулланыу тәжрибәһен өйрәнеү өсөн МАГ майҙансығын файҙаланырға саҡырҙы. Ирек Ишмөхәмәт улы билдәләүенсә, бөгөн Астана һанлы иҡтисад мәсьәләләре һәм граждандар йәмғиәте менән электрон порталдар, электрон киң матбуғат саралары аша бәйләнеше буйынса лидерҙар рәтендә тора. XXV юбилей сессияһында Өфөнөң ҡала мөхитенең хәүефһеҙлеге мәсьәләләре буйынса фекер алышыуҙың ғәмәлдәге даими майҙансығы булыуы раҫланһа, Астана МАГ-тың ғәмәлдәге даими халыҡ-ара майҙансығы тип танылды.

Астанала БДБ-ның баш ҡалалары һәм эре ҡалалары Халыҡ-ара ассамблеяһының XXV сессияһында Бишкек ҡалаһы менән Өфө араһында туғандаш мөнәсәбәттәр булдырыу тураһында меморандумға, шулай уҡ Өфө ҡалаһының Совет районы менән Астананың "Сарыарка" районы араһында дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйылды.

- Райондарыбыҙҙың уртаҡлығы бик күп. Берләшеп, тәжрибә уртаҡлашасаҡбыҙ, иң яҡшы өлгөләрҙе үҙебеҙҙә ҡулланасаҡбыҙ, - ти Совет районы хакимиәте башлығы Урал Килсенбаев. - Киләһе йыл районыбыҙға 80 йыл тула, әлбиттә, байрам сараларына "Сарыарка" хакимиәтенән дә дуҫтарыбыҙҙы саҡырҙыҡ.

Ике яҡ та эшлекле һәм мәҙәни бәйләнештәрҙе үҫтерергә, төрлө тармаҡтарҙағы берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырырға ниәтләй. Ике аралағы килешеү мәҙәни, мәғариф, социаль өлкәләрҙәге, территорияларҙы төҙөкләндереү, йәштәр сәйәсәте, спорт һәм башҡа мәсьәләләрҙә һөҙөмтәле хеҙмәттәшлек мөмкинлеген бирәсәк тип күҙаллана.

Шулай уҡ, БДБ-ның баш ҡалалары һәм эре ҡалалары Халыҡ-ара ассамблеяһының XXV юбилей сессияһында БДБ-ның Эшлекле үҙәге генераль секретары Владимир Савченко БДБ ил-ағзаларының иҡтисади берләшеүе үҫешенә ҙур өлөш индергән өсөн Ирек Ялаловҡа һәм Асет Исекешевҡа миҙалдар тапшырҙы.

Әйткәндәй, эшлекле сәфәре барышында Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов "Аҡбуҙат" башҡорт этномәҙәни берекмә активистары һәм Ҡаҙағстан халыҡтары ассамблеяһы секретариаты менән дә осрашырға форсат тапты. Милләттәштәребеҙҙең үтенесе буйынса, Ирек Ишмөхәмәт улы үҙәккә ярҙам итергә вәғәҙә бирҙе һәм тиҙҙән Ҡаҙағстанда эшләүсе башҡорт ойошмаһы милли костюмдарға, милли атрибутикаға эйә буласаҡ.

**Өфө ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәте.**

...ашырыу сиктәрендә был ихатала балалар уйын комплексы урынлаштырыласаҡ, ихата территорияһына асфальт һалынасаҡ, автомобилдәр өсөн парковка урынын булдырыу маҡсатында электр бағаналары күсереләсәк. Ирек Ялалов йортта йәшәүселәрҙе башҡарыласаҡ эштәрҙең сифатын баһалауҙа һәм уны ҡабул итеп алыуҙа әүҙем ҡатнашырға саҡырҙы.

Ринат Солтанов СССР-ҙың 50 йыллығы урамы, 46/1 адресы буйынса урынлашҡан йорт эргәһендәге скверҙы төҙөкләндереү мәсьәләһен күтәрҙе. Тиҙҙән бында ла төҙөкләндереү эштәре башланасаҡ һәм ул июль һуңына тамамланасаҡ. Йәшлек урамындағы тротуарҙы төҙөкләндереү мәсьәләһе менән мөрәжәғәт иткән Таңатар Йосопов та ыңғай яуап алды.

Зинино ауылы халҡы исеменән Ғәйнулла Ғиззәтуллин Милиция урамын ремонтлауҙы һәм төҙөкләндереүҙе тамамларға ярҙам һорап мөрәжәғәт итә. Әлеге ваҡытта бында урамдың яртыһына асфальт түшәлгән.

Һупайлы биҫтәһенән Гөлнара Мәғәсүмова М. Рыльский урамын төҙөкләндереү мәсьәләһен күтәрҙе. Был урамда йәшәүселәрҙең күпселеге йәш ғаиләләр, урам киң булһа ла, саф һауала йөрөү өсөн урындар етмәй. Ирек Ишмөхәмәт улы Рылский урамын төҙөкләндереү эштәренең 2018 - 2022 йылдарға планлаштырылыуын белдерҙе. Ошо уҡ биҫтәлә йәшәүсе Алина Сафина "Кашҡаҙан" паркын реконструкциялау һәм артабан үҫтереү мәсьәләләренә туҡталды. Ирек Ялалов аңлатыуынса, территорияны төҙөкләндереү өс этапта тормошҡа ашырыласаҡ. Беренсеһе быйыл 6 гектарҙа башҡарыласаҡ һәм сәхнә эшләүҙе, газондар яһауҙы, яҡтылыҡ сығанаҡтарын ҡороуҙы һәм пляжды йыһазландырыуҙы күҙаллай. Икенсе этап 5,56 гектарҙа башҡарыласаҡ һәм күңел асыу, спорт зонаһын эшләүҙе, шулай уҡ йәшелләндереүҙе үҙ эсенә аласаҡ. Өсөнсө этапта - 2018-2022 йылдарҙа күл тирәләй 3 гектар майҙан төҙөкләндереләсәк.

## ҠЫҪҠАСА

# ТИКШЕРЕП ТОРҺАҢ...

✓ **Өфө ҡала округы хакимиәте вәкилдәре, белгестәр, журналистар һәм блогерҙар киске ваҡытта "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" проекты сиктәрендә капиталь ремонт барған участкаларға рейд яһаны.** Рейд барышында асыҡланыуынса, заказсы асфальт һалыу технологияларының үтәлешен һәр саҡ контролдә тота, шулай уҡ асфальтты юл лабораторияһында тикшерә. Бындай процедура урам-юл селтәренең һәр 7 мең километрында башҡарыла. ГОСТ талаптарына яуап бирмәгән ҡатлам асыҡланғанда, подряд ойошмаһы хәл-торошто үҙ иҫәбенә ҡабаттан башҡара. Ошондай рейдтар һөҙөмтәһендә ҡала буйынса брак проценты һиҙелерлек кәмегән.

✓ **Башҡортостан Хөкүмәте ҡарары менән иң яҡшы 50 башҡорт һәм рус телдәре уҡытыусыларын 50 мең һум күләмендә аҡсалата дәртләндереү ҡаралған.** Республика комиссияһына төбәктең 46 район-ҡалаһынан 71 уҡытыусының эштәре тәҡдим ителгәйне. Уларҙың портфолиоһы һигеҙ критерий: уҡыу ҡаҙаныштарының ыңғай динамикаһы һәм уҡыуҙан тыш эшмәкәрлектең ыңғай һөҙөмтәләре; заманса белем биреү технологияларын ҡулланыу; педагогик тәжрибәне дөйөмләштереү һәм таратыу; хәҙерге талаптарға яуап биргән кабинеттарҙың булыуы; квалификацияны күтәреү; һөнәри йәһәттән ҡайтанан әҙерлек; профессиональ конкурстарҙа ҡатнашыу (муниципаль, төбәк, бөтә Рәсәй); материалдарҙы ҡуя белеү буйынса баһаланды. 2007-2016 йылдарҙа конкурс буйынса һайлап алыуҙа 500 уҡытыусы еңеү яулаған.

✓ **Өфөлә республиканың иң яҡшы умартасыһын һайланылар.** XVII республика умартасылар конкурсы йомғаҡтары буйынса Ишембай районынан крәҫтиән (фермер) хужалығы башлығы Илгиз Шәңгәрәев иң яҡшыһы тип танылды. Еңеүсе мөмкин булған 70 балдың 69-ын йыйҙы. Ул 2015 йылда Башҡортостандың абсолют чемпионы, хужалығында 300-ҙән ашыу бал ҡорто күсе, солоҡ умарталары, балауыҙ етештереү буйынса цех һәм умартасылыҡ инвентары магазины бар. Икенсе урында - Өфө районынан Сулпан Әғләмова, өсөнсөлә - Ғафуриҙан Рәдиф Халиҡов. Өфө хакимәтенең матбуғат хеҙмәтендә билдәләүҙәренсә, быйыл Башҡортостандың баш ҡалаһы Бөтә Рәсәй бал баш ҡалаһы булыу хоҡуғын яуланы. 15 июлдән 17 авгусҡа тиклем Өфөлә умартасылар араһында федераль кимәлдәге һөнәри оҫталыҡ конкурсы уҙғарыла.

✓ **17 июлдә Өфөлә "Бурыслы" иҫкәртеү саралары старт алды. Улар 27 июлгә тиклем дауам итә.** Юл-патруль хеҙмәте инспекторҙары полицияның башҡа хеҙмәттәре, суд приставтары менән бергә Юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙған өсөн штраф түләмәүселәрҙе асыҡлай. Баш ҡала Дәүләт автоинспекцияһының матбуғат хеҙмәтендә административ штрафты ҡарар үҙ көсөнә ингәндән һуң 60 көн эсендә түләргә кәрәклеген иҫкә төшөрҙөләр. Түләү ваҡыты уҙған водителдәр административ яуаплылыҡҡа тарттырылыуы ихтимал. Статьяның санкцияһы 15 тәүлеккә тиклем ҡулға алыуҙы йәки икеләтә штраф һалыуҙы күҙ уңында тота.

## Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тире ҡоро булһа

❖ Тән тиреһе ныҡ ҡоро булһа, 1 стакан глицеринды ҡайнар һыу ағышына тотоп, ваннаға ҡойорға һәм шунда ҡойонорға. Ваннанан һуң һабынһыҙ ғына тиҙ-тиҙ генә душ инергә. Тәндә йоҡа ғына глицерин ҡатламы ҡалырға тейеш. Глицеринды дарыуханан һатып алырға.

### Бәшмәк сире

❖ 10 грамм сирень сәскәһен 70 %-лы 100 мл спиртҡа һалып, 10-15 көн ҡараңғы урында тоторға, гел һелкетеп торорға. Шул төнәтмәне зарарланған урындарға һөртөргә.

### Тәмәкесе "дарыу"ы

❖ 100 грамм игене һуғылмаған һоло һаламын 500-700 мл һыуҙа ярты сәғәт ҡайнатырға һәм шул һыуҙы көнөнә 3 мәртәбә, ашарҙан 20-30 минут алда яртышар стакан эсергә. Һыуҙы иртәнсәк яһап, кискә тиклем эсеп бөтөрөргә. Ауыҙҙан тәмәке еҫен дә бөтөрә.

❖ Кишер кешенең тиреһен матурайта. Кишер һуты ҡан тамырҙарын йыуа, бауыр, ашҡаҙан эшмәкәрлеген яҡшырта, тырнаҡ, сәсте нығыта, күреүҙе һәйбәтәйтә. Кишер тәмәке төтөнөндәге канцерогендың тәьҫирен кәметә. Тәмәкесегә йәшелсәләр, арыш икмәге, ярмалар файҙалы, улар йөрәкте һаҡлай.

### Баш әйләнһә

❖ Аҡыл хеҙмәтендә эшләгәндәрҙең башы әйләнһә, фосфорға бай ризыҡ ашарға кәрәк: балыҡ, йомортҡа һарыһы, борсаҡ, редис, сыр, ҡыяр.

❖ Башың әйләнеү сәбәбен белмәһәң, 100 грамм дингеҙ кәбеҫтәһе порошогын көндә төшкө аш алдынан йотоп ебәрергә кәрәк.

### Тары бутҡаһы

❖ Тары бутҡаһы - йөрәк ауырыулы кешеләр өсөн иң файҙалы дарыу. Сөнки тары калий элементына бай, ә ул йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта. Дауаланғанда тары бутҡаһын һыуҙа бешерергә кәрәк.

### Сиҡаҡлау

❖ Күп көлһәң, ауыҙ гел асыҡ йөрөһә, сиҡаҡлау яфалай. Был мәлдә телгә һеркәле гәрсис ҡатнашмаһын һөртөргә һәм 4 минуттан ауыҙҙы сайҡатырға кәрәк.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ **"Байыҡ"ҡа килгән малай-ҡыҙҙарҙың хәҙерҙән үк бер һөнәре бар, тип иҫәпләргә мөмкин. Сөнки улар башҡарыуындағы бейеүҙәр сәхнә түрендә күреп өйрәнгән профессиональ бейеүселәрҙең сығыштарынан һис тә ҡалышмай.**



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Ислам динен таратыуҙа тәүге аҙымдар

Тәүге сығышының уңышһыҙ тамамланыуы Мөхәммәт бәйғәмбәрҙе туктатмай. Халыҡ алдында вәғәзләүен дауам итә ул.

Тәүге осорҙа Мәккә халҡы мосолмандарға ҡаршы көс ҡулланмай, бары тик уларҙан көлә, бәхәсләшә, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙән берәй мөғжизә яһауҙы талап итә.

- Бәйғәмбәрһең икән, берәйһен терелт. Ҡөрәйштең үҙен терелтһәң, бигерәк тә һәйбәт булыр. Һин өйрәткән Алла хәҡиҡәтен Ҡөрәйш иҫбатлаһа, беҙ уға ышаныр инек, - тиҙәр.

Икенселәре Мәккә ҡалаһын төрлө яҡлап ҡысырыҡлап ултырған тауҙарҙы ситкәрәк этәреп ҡуйыуҙы талап итә. Өсөнсөләре - Алла Мәккә уртаһында һинә ҙур йорт төҙөп, эсен алтын-көмөш менән тултырһа ғына Ислам динен ҡабул итербеҙ, ти.

Мөхәммәт бәйғәмбәр уларға:

– Алла тарафынан минең аша ебәрелгән берҙән-бер мөғжизә - Ҡөрьән. Башҡа төрлө мөғжизәләр һорап, Аллаға мөрәжәғәт итә алмайым, - тип яуаплай.

Ләкин мөғжизә башҡарыуҙы һорап, Аллаға мөрәжәғәт итеүҙе дошмандар ғына түгел, мосолмандар үҙҙәре лә талап итә башлай.

- Һауалағы болоттар ергә төшһөн дә, беҙҙән көлөүселәрҙең ауыҙҙарын ҡаплаһын, - тигән тәкдим индерә улар.

Мөхәммәт был тәкдимдән дә баш тарта.

Мөғжизә башҡарыу Берҙән-бер Алланың барлығына, Ислам юлының иман юлы булыуына дәлил түгел, тип аңлата ул. Сөнки мөғжизәләрҙе сихыр менән дә, фәрештәләр йәки яуыз рухтар, йә инде башҡа төрлө көстәр ярҙамында ла башҡарып була. Һәм, тарихтан күренеүенсә, мөғжизә менән генә халыҡты иман юлына күндереп булмай. Бәйғәмбәрҙәрҙең ҡайһы берҙәре халыҡты күндереү өсөн Аллаға мөрәжәғәт итеп мөғжизә булдырған. Ләкин уларҙы ҡайһы бер халыҡтар сихырсы тип ҡабул иткән. Алла Үҙенең мәрхәмәтлеге арҡаһында мөғжизәләргә һаҡ. Сөнки бәйғәмбәрҙәр аша һүҙ менән өгөтләнеп тә ышанмаған кешеләрҙе өмөт бар әле. Исламды әле ҡабул итмәһәләр, һуңыраҡ ҡабул итерҙәр. Үҙҙәренән булмаһа, балалары йә ейәндәре иманлы булыуы ихтимал.

Алла тарафынан ебәрелгән мөғжизә иһә, Уның шул ерҙә йәшәгән халыҡҡа туранан-тура мөрәжәғәте була. Бындай мөрәжәғәтте кире ҡағыусыларҙы Алла ярлыҡай алмай. Ундайҙар тотошлай юҡ ителә. Үҙҙәре генә түгел, ҡатындары ла, балалары ла, хеҙмәтселәре лә, хатта ҡолдары ла. Салих бәйғәмбәр аша мөғжизә күрһәтелгәндән һуң да Алланы инҡар иткән ҫәмүд халҡы, Һуд бәйғәмбәр аша күрһәтелгән мөғжизәнән һуң иман юлынан баш тартҡан ғәд халҡы һәм башҡа ҡайһы бер халыҡтар шул арҡала юҡ ителгән. Шуға ла халыҡҡа иман юлын мөғжизә менән түгел, ә һүҙ көсө һәм Ҡөрьән менән аңлатырға кәрәк. Мөхәммәттең бәйғәмбәр булыуына күпселектең әлегә ышанмауына аптырарға ярамай. Сөнки быға тиклем ебәрелгән бәйғәмбәрҙәргә лә шунда уҡ ышана һалып бармағандар.

Мөхәммәтте ҡайһы берәүҙәр алдауҙа ғәйепләй. Тик, әйтергә кәрәк, ундайҙар күп булмай. Мөхәммәттең ҡалала иң намыҫлы кешеләрҙең береһе булыуы Мәккә халҡының күбеһендә шик тыуҙырмай. Шуға ла кешеләр ул ауырыуға һабышҡан, тигән фекергә килә. Күптәр уға дауаланыу өсөн аҡса тәкдим итә.

Ҡөрәйш ырыуы кешеләре Мөхәммәтте ата-бабалар диненә хыянат итеүҙә ғәйепләй. Мөхәммәт иһә уларға былай тип аңлата. Кибланы - Ҡәғбә бинаһын Ибраһим бәйғәмбәр үҙенең улы Исмәғил менән бергә Берҙән-бер Алла хөрмәтенә төҙөй. Сөнки ғәрәптәрҙең иң боронғо, иң саф дине - Ислам була. Аҙаҡтан ғәрәптәр үҙҙәре үк ата-бабаларының саф динен боҙоп, Ҡәғбәгә төрлө илаһтарҙы тултыра башлай. Мөхәммәт бәйғәмбәр иһә ата-бабаларҙың иманын тергеҙеү өсөн ебәрелгән бәйғәмбәр. Ҡәғбә - Берҙән-бер Алланыҡы, башҡа илаһтарға ошо Изге Йортта урын булырға тейеш түгел.

Мөхәммәттең был дәлилдәре, халыҡ алдындағы сығыштары үҙ емешен бирә - бер йыл эсендә мосолмандарҙың һаны ике тапҡырға арта.

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!

# БАЛА САҠТАН БЕЙЕГӘНДЕҢ...

## баш юғары, һыны тура, йөрәге ярһыу





**(Башы 1-се биттә).**

"Байыҡ" республика телевизион конкурсында ҡатнашыусы балалар йыл да тамашасыларҙы рухлы, профессиональ сығыштары менән ҡыуандыра. Туғыҙ йыл элек халыҡ-ара фестиваль кимәленә үҫкән "Байыҡ" башҡорт халыҡ бейеүен һаҡлап ҡалыу, бейеү сәнғәтенә һөйөү тәрбиәләү, балаларҙың талантарын үҫтереү йәһәтенән бик әһәмиәтле сара булыуын был йыл да иҫбат итә килә. Баҫҡан ерендә осҡон сәсрәтеп торған малайҙар һәм һығылма билле ҡыҙҙар беҙ, бейеүҙең һәр хәрәкәтен еренә еткереп башҡарыуын яҡшы беләбеҙ. Бында башҡорт бейеүен башҡарыусы балалар Башҡортостандан ғына түгел, бөтә Рәсәйҙән һәм хатта сит илдәрҙән килеп, үҙ оҫталығын һынай. Быйыл да Мәскәү, Сургут, Пермь ҡалаларынан, Германияның Ингельхайм ҡалаһынан туған халҡының бейеү сәнғәтенә битараф булмаған балалар ҡатнашты конкурста. Ойоштороусылар әйтеүенсә, Ғафури, Күгәрсен, Әбйәлил, Салауат, Мәсетле, Миәкә, Краснокама райондарынан конкурсҡа ғариза биргән маһир бейеүселәр күп булған. Енеүсе булырға дәғүә итеүсе коллективтар, яңғыҙ башҡарыусылар "Ватан" этнопаркы биләмәһендә урынлаштырылған сәхнә артында шау-гөр килде. Берәүҙәр үҙ сығышын көтә, икенселәр шул арала тағы бер тапҡыр бейеү хәрәкәттәрен ҡабатлай, яңы дуҫтар табып аралаша, фотоға төшөүселәрҙе күҙәтергә була ине. Бейеү хәрәкәттәрен ҡабатларға әҙерләнеп, эйелеп-бөгөлгән, торған көйөнсә шпагат яһаған ике ҡыҙ шунда уҡ иғтибарҙы йәлеп итте. Баҡтиһәң, Германиянан килгән ун йәшлек Дилә һәм туғыҙ йәшлек Дания Циммермандар "Бөрйән ҡыҙҙары" бейеүен башҡарырға әҙерләнә икән. Ҡыҙҙар матур итеп башҡортса һаулыҡ һораштылар ҙа, күнекмәләрен дауам итергә булдылар.

- Былтыр йәйге ялдарға ҡайтҡанда Сибай музыка мәктәбенә барып, хореограф табып, ҡыҙҙарыма "Бөрйән ҡыҙҙары" бейеүен өйрәткәйнек, - тип һүҙ ҡушты әсәләре Гөлназ Циммерманн. - Шул бейеү менән Кёльн, Мюнхен ҡалаларында үткән конкурстарҙа призлы урындар яуланыҡ һәм "Байыҡ"та ла ҡатнашып ҡарарға булдыҡ. Дилә менән Дания икеһе лә балет түңәрәгенә йөрөй, бейергә бик яраталар. Әле лә бында сығыш яһаған тиҫтерҙәрен күҙәтеп, тағы ла башҡортса бейеүҙәр өйрәнеп ҡайтайыҡ, тип торалар. Уларҙың теләге минең хыялдарыма ауаздаш, башҡорт халҡының мәҙәниәтенә ылыҡтырып, үҙебеҙҙең рухи ҡиммәттәрҙе аңдарына һалып үҫтереү зарурлығын тоям.

"Байыҡ" республика телевизион конкурсында ҡатнашҡан һәр баланың ата-әсәһе тап ошолай фекер йөрөтә. Кемдән барып һораһаң да, сәнғәт аша ул һәм ҡыҙҙарында рух, милли үҙаң тәрбиәләү тураһында һүҙ ҡата. Ә балалар башҡорт бейеүен ябай ғына бер сәбәптән - күңелдәренә яҡҡаны өсөн, бейергә теләгәнгә өсөн өйрәнеүҙәрен йәшермәй. "Байыҡ" конкурсында беренсе тапҡыр ҡатнашам, тәүҙә ҡыҙыҡ тойола ине, сәхнәлә сығыш яһағандан һуң тулҡынландырҙы әле, - ти Сургут ҡалаһынан ҡатнашыусы Фәнзил Шәйәхмәтов. - Сургутта беҙҙең башҡорт бейеү түңәрәген Риаз Байзигитов һәм Эльвира Мортазина етәкләй, егерменән ашыу бала шөғөлләнәбеҙ. Ғаиләлә бөтәһе лә бейеүсе, шуға мин дә түңәрәккә йөрөй башланым. Киләсәктә һөнәрем бейеүгә бәйле булмаһа ла, әлеге өйрәнгәндәрем кәрәк булыр, тип уйлайым".

Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ шул, ә "Байыҡ" республика телевизион конкурсына килгән малай-ҡыҙҙарҙың хәҙерҙән үк бер һөнәре бар, тип иҫәпләргә мөмкин. Сөнки улар башҡарыуындағы бейеүҙәр сәхнә түрендә күреп өйрәнгән профессиональ бейеүселәрҙең сығыштарынан һис тә ҡалышмай. Шулай булыр ҙа, сөнки йәш бейеүселәрҙе юғары оҫталыҡҡа ынтылған, маҡсатлы хореографтар етәкләй. Башҡорт бейеүҙәрен башҡарыусы балалар араһында "Байыҡ" республика телевизион конкурсында һәр баланың талантын үҫтереүгә күп көс һалған, рухтарын тәрбиәләгән педагогтар ҙа жюри иғтибарынан ситтә ҡалманы. Был юлы "Иң яҡшы хореограф-бейеү һалыусы" номинацияһында Өфө районынан "Дарман" ансамбле етәксеһе Роберт Хәмиҙуллин, "Иң яҡшы репетитор" номинацияһында Ишембай ҡалаһынан Артур Мөхәмәтйәнов, "Иң яҡшы ансамбль етәксеһе" номинацияһында Күгәрсендән "Гөрләүек" ансамбле етәксеһе Илгиз Ниғәмәтуллин билдәләнде.

- Дүрт йыл элек Шамонин ауылында "Дарман" ансамбленә балаларҙы туплап алғас та "Байыҡ" конкурсына алты малай менән килгәйнек, финалға үтә алманыҡ. Хәҙер дүрт йыл эшләйбеҙ, "Йыйын" бейеүе менән бәләкәстәр һәм "Яугирҙар" бейеүе менән ҙурҙар төркөмдәрен килтерҙек. Конкурс һөҙөмтәһе ниндәй генә булмаһын, балаларҙы сәмләндереү, дәртләндереү, тиҫтерҙәренә ҡарап өйрәнһендәр өсөн алып киләбеҙ. Беҙгә, ансамбль етәкселәренә, коллегалар араһында тәжрибә уртаҡлашыу, кәңәшләшеү, көслө коллективтарҙың эшен күреү йәһәтенән файҙалы, - тине "Дарман" ансамбле етәксеһе Роберт Хәмиҙуллин.

Башҡорт бейеүен башҡарыусы балалар араһында "Байыҡ" республика телевизион конкурсында йылдағыса туғыҙ гран-при хужаһы билдәләнде. Яңғыҙ башҡарыусы өс йәштән туғыҙ йәшкә тиклемгеләр араһында "Саптар" бейеүен башҡарыуы өсөн Ишембай ҡалаһынан Камил Мөхәмәтйәнов, ун йәштән ун биш йәшкә тиклемгеләр араһында "Оҙон сәс" бейеүе менән Баймаҡ районынан Айгөл Кинйәбулатова һәм "Һунарсы" бейеүе менән Учалы районынан Азамат Тажетдинов еңеүсе тип табылды. Тулы булған ансамблдәр араһында Ғафури районынан "Төлкәс", Күгәрсен районынан "Гөрләүек", Өфө районынан "Дарман" бейеү ансамблдәре гран-при яуланы. Бәләкәй тулы булмаған ансамблдәр категорияһында Өфө ҡалаһынан "Гүзәл-данс" бейеү студияһының өлкәндәр төркөмө, Әбйәлил районынан "Алтынай" ансамбле һәм ошо уҡ районның Буранғол ауылынан Айгизә Вәлиева, Гөлнур Вәлиева, Илзиә Килдейәрова, Гөлзиә Килдейәрова гран-приға эйә булды. "Байыҡ" республика телевизион конкурсы еңеүселәре ноутбук, кесә телефондары һәм башҡа ҡиммәтле бүләктәр алып ҡыуанды, бер ҡатнашыусы ла ойоштороусыларҙың иғтибарынан ситтә ҡалманы. Конкурста "Еңмештәр" бейеүен башҡарған Әбйәлил районы Буранғол ауылы ҡыҙҙары менән әңгәмәләшкәндә, шаяртып: "Кеҫә телефоны алғас, уйын уйнап тик ултырһағыҙ инде",- тигәс, бер тауыштан: "Юҡ, беҙгә бит бейеү түңәрәгенә йөрөргә кәрәк, беҙгә һәр ваҡыт хәрәкәт кәрәк!" - тип яуаплағайнылар. Шатлыҡтарынан бер урында орсоҡ кеүек әйләнеп торған был балалар ысынлап та әйҙә түҙеп ултыра алмаҫ, сөнки уларҙың үк яуаплылыҡ тоя белә бит улар...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт халҡында ямғыр яуыуы бәрәкәт, уңыш символы булып тора. Шуға ла башҡорт бейеүен башҡарыусы балалар араһында "Байыҡ" республика телевизион конкурсы үткән көндә Өфөлә көслө ямғыр яуыуы һис тә күңелде ҡырманы. Балаларҙың ихлас сығыштарын тәүге тапҡыр ҡарарға йыйылған баш ҡала халҡы ҡулсатырҙар аҫтына йәшеренеп тамаша ҡылды. Ергә төшкән бәрәкәтле ямғыр тамсылары таралған кеүек, туған халҡының рухиәтен күңелдәренә һеңдергән, милли сәнғәтенә ҡарата йөрәгендә һөйөү йөрөткән, тырыш һәм батыр малай-ҡыҙҙар башҡорт халҡы йәшәгән төбәктәр буйлап таралышты. Был балалар һәм уларҙа башҡорт бейеүенә ҡарата һөйөү тәрбиәләгән педагогтар, иң мөһиме, был сараның төп ойоштороусыһы Рита Өмөтбаева һәм уның хеҙмәттәштәре бөгөн атҡарған эштәре киләсәктә лә юғары баһаланырына, халыҡ өсөн әһәмиәтен юғалтмаҫына иманыбыҙ камил.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

***✓ Петроградҡа килеү менән Х. Әмиров, тәү сиратта, башҡорт ғәскәрҙәрендәге сәйәси комиссарҙар составына иғтибар йүнәлтә. Ғәскәрҙәрҙе Башҡорт хөкүмәтенең сәйәсәтен алып барырҙай кадрҙар менән тулыландырыу кәрәклеген аңлай.***



УЛАР АВТОНОМИЯ ЯУЛАНЫ!

# ХӘЛИМ ӘМИРОВ

**Башҡорт милли хәрәкәте етәксеһе Зәки Вәлиди менән иңгә-иң терәп, Башҡортостан мөхтәриәтен булдырыуҙа фиҙакәр хеҙмәт күрһәткән шәхестәрҙең күбеһе 30-сы йылдарҙа Сталин репрессияһы ҡорбаны булып, уларҙың яҡты исемдәре нисәмә тиҫтә йылдарға онотолоуға дусар булды. Ошондай шәхестәрҙең береһе Хәлим Насретдин улы Әмиров тураһында һүҙебеҙҙе дауам итәбеҙ.**

Бәләбәй ҡалаһында торған Айырым Башҡорт бригадаһы частары һәм тағы бер кавалерия полкы, әҙерлеге булмауға ҡарамаҫтан, Петроградҡа оҙатыла. Шулай уҡ бында Көньяҡ фронттан Башҡорт кавалерия дивизияһы һәм уның 1-се, 2-се полктары штабтары килә. Башҡортостандан килгән яңы һалдаттар иҫәбенә бригада һәм дивизия частары ойошторолорға тейеш була. Был мөһим эшкә етәкселек итеү бурысы тағын да Хәлим Әмировҡа тапшырыла. Ул Башҡорт республикаһының башҡорт ғәскәрҙәрендәге махсус вәкәләтле вәкиле (особоуполномоченный) сифатында киң хоҡуҡтар менән Петроградҡа ебәрелә. 10 меңдән ашыу яугирҙан торған Башҡорт ғәскәрҙәре төркөмөнә идара итеү еңелдән булмай. Петроградҡа килеү менән Х. Әмиров, тәү сиратта, башҡорт ғәскәрҙәрендәге сәйәси комиссарҙар составына иғтибар йүнәлтә. Ғәскәрҙәрҙе Башҡорт хөкүмәтенең сәйәсәтен алып барырҙай кадрҙар менән тулыландырыу кәрәклеген аңлай. Сөнки башҡорт милләтенән булмаған комиссарҙар ғәскәрҙәргә зыян ғына килтерә. Улар Башҡортостан автономияһына ҡаршы агитация алып бара. Мәҫәлән, Башревком рәйесе Харис Йомағолов Башҡорт дивизияһы комиссары Нуриәғзәм Таһировҡа былай тип яҙа: *"Сообщи всем-всем красноармейцам-башкирам! Пусть неподдаются провокации! По некоторым сведениям наших красноармейцев в Белебее настраивали против нас, т.е. Ревкома и Б.С.Р. и против Советов, так прими меры, чтобы рассеять лживые, провокационные слухи красноармейцев".*

Шуға күрә лә Хәлим Әмиров башҡорт ғәскәрҙәрендәге сит милләт комиссарҙары урынына башҡорттарҙы тәғәйенләргә тигән мәсьәләне күтәрә. Бының өсөн ул Мәскәүҙә Свердлов исемендәге Коммунистик университетта уҡыған башҡорт курсанттарын Петроградҡа ебәреүҙе һорай. Ошо айҡанлы Мәскәүҙә, ВЦИК янындағы Башҡорт республикаһы вәкиле Әбдрәшит Бикбауов 1919 йылдың 29 октябрендә Башҡортостандың Хәрби эштәр буйынса комиссариатына былай тип хәбәр итә: *"Настоящим сообщаю требование особоуполномоченного по делам башкирских частей в Петрограде т. Амирова о замене вверенных ему башкирских частях ответственных работников небашкир башкирами-курсантами, необходимой для создания могущественной башкирской армии и для ее воспитания в зависимости (с учетом) бытовых и исторических особенностей нашего народа, а также подтверждаю его настойчивую просьбу об откомандировании в Петроград московских курсантов тт. Магасумова, Баталова, Абсалямова, Ишкаева и Дюкасова на полковые комиссарские должности и еще десять человек на менее ответственные должности...".* Ә. Бикбауов та Хәлим Әмировтың фекерен ҡеүәтләй: *"Побывав в Петрограде, лично убедился, что удовлетворение просьбы Амирова крайне необходимо"*, - тип тамамлай ул үҙенең телеграммаһын.

Нуриәғзәм Таһиров һәм Хәлим Әмировтың тырышлығы менән Мәскәүҙә уҡып йөрөгән башҡорт эшмәкәрҙәре: Ғабдулла Ибраһимов Башҡорт уҡсы бригадаһының комиссары итеп, Һиҙиәт Сәғәҙиев Башҡорт кавалерия дивизияһы сәйәси бүлеге мөдире итеп, Хәйҙәр Лотфуллин "Салауат" гәзитенә эшкә тәғәйенләнә.

Хәлим Әмиров Петроградта ғәскәрҙәр араһында Башҡорт автономияһы етәкселегенең сәйәсәтен алып барыусы, Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте мәнфәғәтен алға һөргән, пропагандалаған эшмәкәрҙәрҙең береһе булған. Быны Башҡортостан Республикаһының йәмәғәт ойошмалары архивында бик ҡыҙыҡлы һәм ҡиммәтле документ - "Бәхет көнө" тип аталған йыйынтыҡ тағы бер тапҡыр иҫбатлап тора. "Бәхет көнө" йыйынтығы Башҡорт хөкүмәте һәм ғәскәрҙәренең советтар яғына сығыуына бер йыл тулыу айҡанлы 1920 йылдың февралендә Петроградта баҫылған. Унда Башҡорт автономияһы етәксеһе Әхмәтзәки Вәлиди, Башҡорт уҡсы бригадаһы комиссары Ғабдулла Ибраһимов мәҡәләләре һәм Башревком вәкиле Хәлим Әмировтың "Башҡорт хәрәкәте" исемле доклады урын алған. Был доклады менән Әмиров Петроградта башҡорт ғәскәрҙәренең 1-се коммунистик конференцияһында сығыш яһаған. Юғары трибунаға сығып, Хәлим Әмиров Башҡортостан автономияһы өсөн көрәштең тарихын бәйән итә, уның маҡсаттарын һалдаттарға еткерә.



*"Бәхет көнө" йыйынтығының беренсе бите.*

Юденич армияһы тар-мар ителгәндән һуң, Башҡорт кавалерия дивизияһы Новгород губернаһына, ә Башҡорт уҡсы бригадаһы полктары Финляндия сигенә күсерелә. Шуның менән Хәлим Әмировтың Петроградтағы эшмәкәрлеге лә тамамлана. Ул 1920 йылдың февралендә Башҡортостанға ҡайтып, элекке вазифаһына - мәғариф комиссариаты коллегияһына тәғәйенләнә. Әммә фронттан алыҫ ятҡан Башҡортостанда ла сәйәси хәл бигүк тыныстан булмай. Автономия өсөн көрәш дауам итә. Йәш Башҡорт республикаһына күрше губерна властары теше-тырнағы менән ҡаршылыҡ күрһәтә. Автономияны нисек тә булһа тарҡатырға, юҡ итергә тырыша урындағы большевиктар.

1920 йылдың мартында Башҡортостан автономияһына ҡаршы кешеләрҙән торған Үҫәргән кантоны РКП(б) комитеты (Ырымбур губкомының йәшерен бойороғо буйынса), Башревкомдың рөхсәтенән тыш, кантондың Советтар съезын үткәреп, яңынан кантревком һайлай. Съезд тураһында башҡорт ауылдарына әйтелмәй, делегаттар күпселек урыҫ ауылдарынан йыйыла. Әҙселекте тәшкил иткән башҡорт делегаттарын ҡорал менән ҡурҡытып, съезда Башҡортостанға ҡаршы ҡарарҙар ҡабул ителә, Башревкомға буйһонмаҫҡа, тигән сығыштар яңғырай. Кантон башҡарма комитетына автономияға ҡаршы кешеләр һайлана. Кантон үҙәге Ейәнсура ауылынан Чеботаревка исемле урыҫ ауылына күсерелә. Бер һүҙ менән әйткәндә, Үҫәргән кантонында власть фетнәселәр ҡулына күсә.

Башревком Үҫәргән кантонындағы ваҡиғалар тураһында ишетеү менән Хәлим Әмиров, Сөләймән Ишмырҙин һәм Ибраһим Исхаҡовтарҙан торған махсус комиссия булдыра. Әхмәтзәки Вәлиди комиссияның рәйесе итеп Х. Әмировты тәғәйенләй. Башревком комиссияһы һалдаттар менән Үҫәргән кантонына килеп төшә. Килеү менән Хәлим Әмиров тиҙ арала кантонда тәртип урынлаштыра, Башҡортостан автономияһы власын тергеҙә. Башревкомға буйһонмаған яңы кантревкомдың һәм канткомдың ағзаларын ҡулға ала. Фетнәсе коммунистарҙың берәүһе Ырымбурға ҡасып ҡотола. *"Башревком выслал в Усерганский кантон - Чеботаревку комиссию во главе с Амировым и двумя отрядами, первый в сто человек занял Чеботаревку, второй отряд, количество коего не выяснено, расположился в районе Чеботаревки. Комиссией арестованы коммунисты: Атанов, Ивашкин, Брозинский, Похлебаев и другие; разоружен военкомат; распущены коммунистические партии вплоть до ячеек..."*, - тип, Ленин менән Дзержинскийға ошаҡлай Рәсәй транспорт ЧК-һы рәйесе Данилевский. Хәлим Әмировтың Үҫәргән кантоны коммунистарының "арт һабаҡтарын уҡытыуын" ВЦИК-тың Башревком янындағы вәкиле Ф. Самойлов аҙаҡ *"Последний крупный "подвиг" валидовцев"*, тип баһалай.

25 март Башревком Үҫәргән кантонына етәкселекте Х. Әмировтың үҙенә тапшыра, уны кантревком рәйесе итеп тәғәйенләй. Әммә уның Үҫәргән кантонындағы коммунистарҙы ҡулға алыуы, РКП(б) ойошмаһын ҡыуып таратыуы Башобкомға оҡшамай. Май айында обком Әмировтың эшен тикшереү буйынса конфликт комиссияһы ойоштора. 16 майҙа комиссия Үҫәргән кантоны коммунистарын аҡлап сығыш яһай, Әмировты бер йылға партиянан сығарырға ҡарар ҡыла. 18 майҙа үткән Башобком пленумы уны бер йылға бөтә яуаплы вазифаларҙан ситләтергә тәҡдим итә. Ләкин Башревком коммунистарҙың ҡарарына әллә ни ҡолаҡ һалып бармай. Әмировты Башглавпродукт рәйесе вазифаһына тәғәйенләй. 1921 йылдың авгусынан ул Башобкомдың Башҡортостан Ревтрибуналы янындағы Дәүләт ғәйепләүсеһе (Гособвинитель) урынбаҫары булып эшләй, һуңынан Төркөстанда Башҡортостан вәкиллеген етәкләй.

Артабан башҡорт милли хәрәкәт эшмәкәрҙәренең күбеһе дәүләт эшенән ситләтелә, ә инде 30-сы йылдар башында уларҙы эҙәрлекләү, ҡулға алыуҙар башлана. Был осорҙа Хәлим Әмиров Өфө моторҙар эшләү заводында (хәҙерге УМПО) плановик булып эшләй. 1936 йылдың 23 октябрендә ҡулға алынып, өс йылға иркенән мәхрүм ителә. Бынан һуң Хәлим Насретдин улы Әмировтың эҙҙәре юғала. Сталин лагерҙарынан ҡайта алмағындыр, күрәһең. 1989 йылдың 12 ноябрендә реабилитацияланғанлығы билдәле.

Башҡортостан дәүләтселегенә нигеҙ һалыусы Әхмәтзәки Вәлиди менән бер рәттән, уның көрәштәштәрен дә онотмаһаҡ ине. Шуларҙың береһе Хәлим Әмиров та халыҡ хәтерендә лайыҡлы урын алырға тейеш.

**Азат ЯРМУЛЛИН, тарихсы.**

**(Аҙағы. Башы 27-28-се һандарҙа).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Йәдкәр БӘШИРОВ

## БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

### Һары ҡыпсаҡтар - половецтар

Изяслав Давыдович Киев тәхетенә көнләшеп ҡарай. Власть яратыусы Долгорукий төндә күңел аса һәм үлеп ҡала. Киев халҡы Изяслав Давыдовичҡа, баш ҡалаға килеп хакимлыҡты үҙ ҡулына алыуын һорап, илсе ебәрә. Изяслав Давыдович яғында 20 меңдән ашыу ҡыпсаҡ яугиры тора. Уның яҙмышы ҡыпсаҡтарға бәйле була. Ул ҡыпсаҡтар менән Деснаға килеп Смоленск өлкәһен туҙҙырған өсөн Святослав яҡлыларҙан үс ала. Ҡыпсаҡтар уларҙың 10 мең самаһы яугирын әсир итә. Урыҫ кенәздәренең ҡыпсаҡтарға буйһоноулы булыуын күргән урыҫ кенәздәре бергә тупланырға ҡарар итә. Уларҙы бергә Мстислав кенәз (1167-1169) йыя һәм мөрәжәғәт итә.

Был саҡта Игорь Святославович ҡыпсаҡ ханы Ҡонсаҡта әсирлектә йәшәй, уға хеҙмәтселәр, священниктар беркетелә. Игорь ҡарсыға менән һунарға йөрөй. Бер төндә ул, һаҡсылар ҡымыҙ эсеп иҫереп йоҡлаған арала, Лавер тигән ҡыпсаҡ менән Русҡа ҡаса. Уның ҡыпсаҡтарҙа тороп ҡалған улы Владимир Ҡонсаҡтың ҡыҙына өйләнә.

"Ҡырағай половецтар" һәм башҡа ҡыпсаҡ урҙалары менән (клобуктарҙан, төрөктәрҙән, коуевтарҙан тыш) урыҫтар теләп туғанлашҡан. Святополк, ҡыпсаҡ ханы - буласаҡ ҡайныһы менән бәрелештә ныҡ ҡыйратылғандан һуң, уның ҡыҙына өйләнә. Һары ҡыпсаҡтарҙың бер өлөшө Мономах менән бәрелешкәндән һуң XI быуат аҙағында көньяҡ-көнбайышҡа, ҡомандар биләмәһенә күсенә.

Дәште Ҡыпсаҡтағы тыныс тормош монголдар һөжүменән һуң тамамлана. 1223 йылда Калка янындағы һуғышта монголдар ҡыпсаҡтарҙың Тоҡсаба ҡәбиләһе һәм урыҫтарҙың ғәскәрен ҡыйрата. Ҡомандар донъя буйлап тарала, бер өлөшө тарихи ватандары булған Башҡорт иленә ҡайта. Башҡорт ырыуҙары араһында уларҙың боронғо атамалары һаҡланып ҡала, әйтәйек: ҡыба, ҡыбау, ә ҡубан йә ҡоман түгел, тип яҙа ғалимдар Р.Р. Аҫылғужин, М.Т. Сабитов, Ю.М. Йосопов. Хәҙерге ваҡытта Силәбе өлкәһенең Әшә, Минйәр, Ҡатау-Ивановск ҡалалары ултырған ерҙәр ҡыбау башҡорттарыныҡы һанала.

Тикшереүҙәр ҡоман, ҡыбау атамаларының Дәште Ҡыпсаҡтың көнбайыш ҡәбиләләре өсөн дөйөм атама булыуын раҫлай. Был раҫлауҙың мөһимлеге ҡай-ҡимаҡтар менән һары ҡыпсаҡтарҙың айырылып тороуы хаҡында һөйләй. Сөнки урыҫ телендәге "половцы" һүҙе асыҡ һары һалам төҫөн аңлата, "половец" атамаһы шунан килә. Ҡыпсаҡтар араһында аҡ сәслеләре лә булғандыр, күрәһең. Әммә ҡимаҡ-ҡыпсаҡтарҙың төп өлөшө ҡара сәсле һәм һоро күҙле булған. Башҡорт ғалимдары "половцы" һүҙе иҫке славян телендәге "полова"нан (һаламдан) алынған, тип иҫәпләй. "Половой", тимәк һары йәки аҡ, тимәк "половцы" "блондин" тигән мәғәнәне бирә. Төрки телдәрҙә "ҡоба" ерән ат төҫөн белдерә, башҡорттар "ҡоба"ны һыйыр малының төҫөн билдәләгәндә лә ҡуллана.

**(Дауамы бар).**

# ДӨРӨҪ ЮЛДАН

## республикала милли кино

*✓ Кинорежиссураны һөнәр итеп һайлаған саҡта минең менән республикала кино сәнғәтен үҫтереү тигән теләк идара иткәндер. Ижадсы булараҡ үҙеңде табыу теләге һуңғараҡ килә һәм был һөнәр һинең өсөн тотош бер фәлсәфәгә әүерелә.*

**Башҡортостандың кино сәнғәте тамашасылар араһында һәр ваҡыт бәхәсле фекерҙәр уята. Шулай ҙа беҙ хәҙер башҡорт киноһы бармы, юҡмы, тигән мәңгелек һорауға яуап эҙләүҙән юғарырыҡ кимәлгә күстек, шикелле. Быйыл ғына башҡорт режиссерҙары республика кинотеатрҙары экрандарына ике фильм сығарҙы һәм уларҙың тулы залдар йыя алыуы был йүнәлештә ҙур уңыш булды. Милли киноның кимәлен ниндәй картиналар билдәләй? Кинематографияның киң массалы сәнғәт төрө булып китеүенә нимәләр ҡамасаулай? Заманыбыҙҙың билдәле кинорежиссерҙарының береһе, 12-нән ашыу тулы метрлы картина авторы, Ш. Бабич исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Булат Тимер улы ЙОСОПОВ менән ошо юҫыҡтағы һорауҙарға яуап эҙләйбеҙ.**

**Артист булырға, ғәҙәттә, хыялланалар. Ә режиссер булыу яҙмышың икәнен нисек аңларға? Ғөмүмән, кинорежиссура ул һөнәрме?**

- Кино сәнғәтендә эшләүемә хәҙер 21 йыл, 1996 йылда С. Герасимов исемендәге Бөтөн Рәсәй кинематография институтын тамамлағайным. Кинорежиссураны һөнәр тип тә атауы ауыр, сөнки теге йәки был һөнәр һине матди яҡтан тәьмин итеүсе шөғөл дә. Ә сәнғәт өлкәһендә йышыраҡ рухи төшөнсәләр менән эш итергә тура килә. Шулай ҙа кинорежиссура минең өсөн, һис шикһеҙ, һөнәр. 2009 йылда үҙемдең киностудиямды асып, эшҡыуар булараҡ ниндәйҙер кимәлдә үҙаллы юлға баҫҡанмын.

11-12 йәштәр тирәһе булғандыр, көндөҙ телевизорҙан башҡортса фильмдар күрһәткәндәрен, атайымдан, беҙҙә кино төшөрәләрме, тип һорағаным хәтерҙә. Юҡ, тип яуапланы ул. "Нисек улар башҡортса матур итеп һөйләшәләр һуң?" тип аптыраным мин. Баҡтиһәң, был башҡорт теленә дубляж - тәржемә ителгән фильмдар булған икән. Шунда атайым илдә автономиялы һәм союздаш республикалар барлығын, һуңғыларының статусына яраҡлы үҙҙәренең милли киностудиялары булыуын һәм милли кинолар төшөрә алыуын аңлатты. Башҡорт мәҙәниәте мөхитендә, башҡорт зыялылары араһында тәрбиәләнгән кеше булараҡ, миңә был хәҡиҡәтте ҡабул итеүе ауыр булды, хатта бер аҙ үҙебеҙҙе ҡыйырһытылған итеп тойҙом да шикелле. 1990 йылда Башҡортостан киностудияһы асылғас, ошо тойғо мине кинорежиссер һөнәрен яҙмышым итеп ҡабул итергә һәм ВГИК-ты һайларға этәрҙе. Ул заманда кино төшөрөүе ҡатмарлы процесс ине. Кино төшөрә торған таҫма иҫ киткес ҡиммәтле, уның һүрәтен сығарыу өсөн Мәскәүгә, тауыш яҙҙырыу өсөн Екатеринбургҡа бара инек. Павильон, тон студияһы кеүек технологик базабыҙ, сценарий яҙыусыларыбыҙ юҡ ине. Ә уйын кинематографияһы - ул технологиялар, йәғни, декорациялар, костюм тегеү, каскадер цехтары һ.б. Был "Мерседес" автомобилен колхоз баҫыуында йыйыуға тиң ине. Нисек итеп кино төшөргәнбеҙҙер, хәҙер ошоға аптырайым. 2009-2010 йылдарҙы кино төшөрөү өлкәһендә һынылыш мәле тип иҫәпләйем, сөнки цифрлы технологиялар килде. Бөгөн фотоаппаратҡа кино төшөрөргә була. Йәш быуын кинорежиссерҙарына, быны улар үҙҙәре аңлап етмәһә лә, еңелерәк хәҙер. Кинорежиссураны һөнәр итеп һайлаған саҡта минең менән республикала кино сәнғәтен үҫтереү тигән теләк идара иткәндер. Ижадсы булараҡ эҙләнеү, үҙеңде табыу теләге һуңғараҡ килә һәм был һөнәр һинең өсөн тотош бер фәлсәфәгә әүерелә. Мин һайлаған юлымдан тайпылмауым менән бәхетлемен. Һуңғы, ярайһы уңышлы проекттар был йүнәлештә дөрөҫ юлдан барыуымдың дәлиле, тип иҫәпләйем.

**Һуңғы проекттар, тигәндә ниндәй фильмдарҙы күҙ уңында тотаһығыҙ?**

-"Визит", "13-сө раунд", "Кредит", "Наган" һәм, әлбиттә, "Бабич" фильмдарын, йәғни, үҙемдең киномәктәбемде асып, эшҡыуар булып китеп, ижади биографиямда икенсе һулыш асылғас эшләгән бөтөн проекттарымды. Аҙағына тиклем еткерелгән һәр проект - үҙе ҙур уңыш, сөнки һин унан үҙең өсөн күп нәмә алаһың. "Бабич" фильмында ла етешһеҙлектәр бар, әммә ул да минең өсөн ниндәйҙер кимәлдә еңеү. Тамашасыларҙың был фильмды күргәндән һуң ыңғай тойғохистәрен асыҡтан-асыҡ белдереүенә лә шатланам. Дөрөҫөн әйткәндә, мин ҙур уңыштарға өйрәнмәгәнмен.

Киномәктәпте асыр алдынан мин бер йыл дауамында "Нисек итеп үҙеңдең киноңды төшөрөргә?" тигән китап яҙҙым, бөгөн үҙемдең уҡытыу методикаһы, белемде һынау ысулдары бар. Киномәктәпте асыуҙың беренсе сәбәбе - йәшәү өсөн матди мөмкинлектәр табыу кәрәк ине. Икенсенән, республикала миңә заказдар булмаясағын да аңлай инем, шуға ла ижади яҡтан үҫеү өсөн дә үҙемә-үҙем шарттар булдырырға тейеш инем. Башҡаларға белем биреп, үҙең дә камиллашаһың. Һуңынан мин "Визит" сценарийын яҙҙым, ул уҡыу пособиеһы булып тора. Миндә белем алған 165 режиссер "Визит"ты төшөргәндә ҡатнашты. Бөгөнгө көндә "Тере таҫма" тип аталған шәхси киностудиямдың павильоны, тон студияһы, ут яҡтыртыу ҡорамалдары, камералары, матди базаһы, даими штаты бар. Бөтөн был технологиялар - киномәктәптәге эш һөҙөмтәһе, ул процесты аңларға ярҙам итә. Технологиялар бар икән, проекттарҙың сығымдары ла түбәнәйә. Бөтөн донъяла технологиялар артынан һунар итеү юҡҡа ғына түгел бит ул.

**Башҡортостандың 100 йыллығына арналған булыуы менән дә, Бабичтың шәхесе менән бәйле булғанлыҡтан да, башҡорт тамашасыһының "Бабич" фильмына ҡарата ошондай ыңғай мөнәсәбәттә буласағын көткәйнек тә. Был фильмдың башҡа халыҡтарға үҙебеҙҙе танытыу кеүегерәк маҡсаттары бар инеме?**

- Был кино ниндәйҙер датаға арнап төшөрөлмәне, бары тик тарихи, мөмкинлектәр йәһәтенән ошо осорға тура килде. Миңә яҙыусы Ғәзим Шафиҡовтың "Крючья под ребро" тигән китабы оҡшай ине. Ошо дәүер, шулай уҡ Бабичтың шәхесе менән 2003 йылдар тирәһенән алып ҡыҙыҡһынам. Ғәзим ағай менән дә был турала күп һөйләштек. Ул мәлдә бындай кино төшөрөп булмай ине, әммә хыял бар ине. Сөнки, әйтеүемсә, технологиялар юҡ ине. Мең һалдатты бөгөн дә кейендереп бөтөп булмай, әммә заманса технологиялар менән кадрҙа мең һалдат яһай алаһың. Компьютерҙа шартлау, осоштар эшләп була. Был йәһәттән совет кинорежиссерҙары көнләшер ине беҙҙән.

Һуңынан мин Өфө дәүләт сәнғәт институтында Таңсулпан Бабичева менән Гөлсәсәк Саламатованың БАССР-ға нигеҙ һалыусылар хаҡындағы "10 июль. Көн һәм быуат" спектаклен күрҙем һәм режиссер булараҡ был идеяның ниндәй формала булырға тейешлеген аңланым. Фильмды төшөргәндә иң мөһиме ошо дәүерҙе, уның шәхестәрен күрһәтеү ине. Әгәр ҙә беҙ республикабыҙҙы кемдәр бар иткәнен белмәйбеҙ икән, уны бөгөн беҙгә һаҡлап ҡалыуы ауыр буласаҡ. Башҡортостан буш урында барлыҡҡа килмәгән. Башҡортостан СССР-ҙа тәүге милли республика, ул федерализмға нигеҙ һалыусы. Кемдер тәүҙә аңында, беҙгә айырым республика кәрәк, тигән ҡарар ҡабул иткән һәм был фекерҙе күтәреп алыусылар ҙа уйлап сығарылған персонаждар түгел, ә реаль шәхестәр. Уларҙы белмәү - ҡайҙа йәшәүебеҙҙе аңламауға тиң. Улар тере кешеләр булған, улар ҙа көлгән, илаған, яратҡан, хәүефләнгән, ҡыйыу булған. Картина аң кимәлендә тамашасыларға яҡын, сөнки ул беҙҙе башланғысыбыҙға алып ҡайта. Беҙ уларға республикабыҙ өсөн бурыслы.

Ә башҡа милләттәр был кинонан ниндәйҙер фәһем алырға тейеш тә түгел. Тәү сиратта, кемдер түгел, ә үҙебеҙгә кемлегебеҙҙе аңлау зарур. Башҡалар өсөн башҡа кино төшөрөүселәр бар, мине республика халҡы - айырыуса көнбайыш, төньяҡ-көнбайыш башҡорттары яҙмышы күберәк борсой. Үҙем өсөн уларҙың ихтыяжын өҫтөнөрәк ҡуям, шуға ла мин республика халҡы өсөн төшөрҙөм был киноны.

Ни өсөн фильмда мөхәббәт һыҙығын үҫтермәнегеҙ, тип тә күп һорайҙар. Бабич бер ғүмере эсендә ике ғүмер йәшәгән кеше. Ул шағир ҙа, сәйәси эшмәкәр ҙә. Бөгөнгө заманда был ике бөйөк бурысты үҙендә уңышлы берләштергән шәхестәр һирәк. Бабичтың сәскәле яланда яратҡан ҡыҙын етәкләп йүгереп йөрөүе уны яңы яҡтан асмаҫ та ине. Ә бына төштәре, ижады, башҡа шәхестәр менән мөнәсәбәте, башҡорт халҡы һайлау алдында торғанда кисергән ғазаптары миңә - 43 йәшлек режиссерға мөһимерәк тойолдо. Һәм кинола был тарихтың дауамы булырға тейеш.

**"Бабич" фильмында бер быуат элек йәшәгән шәхестәребеҙҙе бөгөнгө беҙгә яҡшы таныш актерҙарыбыҙ йөҙөндә күреү уны тағы ла тамашасыға яҡыныраҡ итте кеүек…**

- Кинола төшә алған актерҙарыбыҙ күп түгел, әммә улар бар. Театрҙарҙа йәш, матур, һәләтле, иң мөһиме, рухы, эске көсө булған актерҙар эшләп йөрөй. Бабич ролен башҡарыусы Илгиз Таһиров роль өсөн өлгөрөп килде проектҡа, уға нимәнелер аңлатырға ла кәрәкмәне. Уларҙың һәр береһенең кинола төшөү өсөн эске мөмкинлектәре ҙур, улар менән йышыраҡ эшләргә кәрәк. "Бабич"ты төшөрөүҙә яҡын дуҫтар менән ваҡыт үткәреүгә тиңләр инем. Тап ошо йәштәр башҡорт мәҙәниәтенең киләсәге. Ғөмүмән, республикабыҙҙа һәләтле кешеләр күп, улар бында үҙҙәрен аса алмайынса, Мәскәүгә китә. Был тенденция, бер яҡтан, яҡшы, сөнки улар һөнәри йәһәттән тәжрибә туплай, икенсе яҡтан, насар, сөнки эшләй башлаһаң, белгестәр етмәй. Мәскәүҙә операторың менән һүҙгә килешһәң, урынына икенсе оператор алып була. Бында был мөмкин түгел, эш тә туҡтаясаҡ. Беҙҙә эш күберәк шәхси мөнәсәбәттәргә ҡоролған, ә Мәскәүҙә - аҡсаға. Республикала кино сәнғәте менән шөғөлләнгән кешеләр өсөн был һөнәр түгел кеүек тойолоп китә шуға, был йәшәү рәүеше. Мин дә Мәскәүҙән аҡса эшләргә түгел, кино төшөрөргә ҡайттым. Һәр хәлдә, беҙҙә һәләттәр күп һәм уларҙы эш менән тәьмин итеү йәһәтенән нимәлер уйларға кәрәк. Һәр һөнәр эйәһе эш юҡлыҡтан күңел төшөнкөлөгөнә бирелә.

**Бөгөн башҡорт киноһында яңы фильмдар, яңы исемдәр барлыҡҡа килә башланы. Режиссер һәм педагог булараҡ, уларға тәнҡит күҙлегенән ҡарайһығыҙмы, әллә беҙгә әлегә башҡорт киноһы булғаны өсөн генә лә ҡыуанырға кәрәкме?**

- Беҙҙә йәш, һәләтле режиссерҙар күп, киләһе йылдарҙа Башҡортостан, башҡорт киноһы торошон тап улар билдәләйәсәк. Уларға үҫергә мөмкинлек бирергә кәрәк, ә мөмкинлектәр беҙҙә, шөкөр, бар. Кино төрлө булырға, күп массаларҙы йәлеп итергә тейеш - быға мин шат ҡына. Үҙем дә киномәктәптә кинорежиссура серҙәренә өйрәтәм. Әлегә 165 кино һөйөүсе уҡып сыҡты, улар бөгөн төрлө фестивалдәрҙә призлар яулай. 1992 йылда билдәле тележурналист Луиза Фархшатова: "Булат Йосопов, һеҙ республикала уйын фильмдарын төшөрөүсе беренсе режиссермы?" - тип һорағайны. Мин үҙемде беренсе тип иҫәпләмәйем, беренсе булһам, миңә тиклем бер башҡорт фильмы ла булмаҫ ине. 81-се булһам да үҙемде бәхетле иҫәпләр инем. Бөгөн режиссерҙарыбыҙ күп, улар араһында үҙемдең дә булыуыма шатмын. Республика кинематографының проблемалары бар, әлбиттә, әйтәйек, үҙебеҙҙең кинопрокат булмауы бәкәлгә һуға. Кинотеатрҙарҙың репертуарын Йошкар-Ола, Силәбе, Екатеринбург, Мәскәү, Санкт-Петербург төҙөй. Үҙебеҙҙең киностудия Баймаҡ һәм Октябрьскийҙағы кинотеатрға ғына яҙа. Йәғни, үҙ йортоңа тәҙрә аша ингән кеүек була. Кинотеатрҙарҙы финансларға мөмкинлеге булмағас, дәүләт үҙ активын эшҡыуарҙарға һатып бөттө. Улары, үҙ сиратында, репертуарҙы сит ил кинолары менән тултыра. Шул уҡ ваҡытта, бик уңышлы проекттар булыуын күреп, кинотеатрҙар милли кинематографҡа йөҙө менән борола башланы бөгөн. Беҙгә хәҙер берләшергә лә, улар менән аралашыуҙы көсәйтеп, улар аша үҙ мәҙәниәтебеҙҙе алға этәрергә кәрәк.

**Һәр фильм мотлаҡ касса йыйырға тейешме?**

- Рәсәйҙәге дөйөм хәлгә күҙ һалһаҡ, шуны күрәбеҙ. 1991 йылда Советтар Союзы һәм уның менән бергә совет кинематографияһы тарҡалғас (ә ул донъяла иң яҡшыларҙан булды), кино төшөрөүселәр коммерция рельстарына күсергә тейеш ине. Коммерция рельсы, тимәк, һайлау. Йә совет кинематографын артабан үҫтереү, үҙ Гайдайҙарыбыҙҙы, Шукшиндарыбыҙҙы, Бондарчуктарыбыҙҙы булдырыу. Йәки бизнес-

***✓ Атайымдың башҡорт мәҙәниәте, шиғриәт менән шөғөлләнгәнен аңлай, халҡы өсөн хәүефләнгәнен күрә инем. Башҡорт халҡына ҡарата әйтелгән ниндәйҙер кире фекерҙәрҙе үҙенә әйтелгән кеүек ауыр ҡабул итер ине.***

# БУЛАТ ЙОСОПОВ: БАРАМ: сәнғәтен үҫтереү кәрәк!

*Башҡортостан СССР-ҙа тәүге милли республика, ул федерализмға нигеҙ һалыусы. Кемдер тәүҙә аңында, беҙгә айырым республика кәрәк, тигән ҡарар ҡабул иткән һәм был фекерҙе күтәреп алыусылар ҙа уйлап сығарылған персонаждар түгел, ә реаль шәхестәр. Уларҙы белмәү - ҡайҙа йәшәүебеҙҙе аңламауға тиң.*



тың Америка системаһы өлгөһө буйынса үҫешеү. Был ике система ла һайланмай, йәғни, совет кино мәктәбе лә, бизнестың Америка принцибы ла Рәсәй киноһында үҙләшеп китә алмай. Рәсәй кинематографистары 90-сы йылдарҙа коммерция фильмдары төшөрөргә өйрәнә алмай. Хәҙер яңы быуын үҫте, улар донъя кимәлендәге уңышлы фильмдарға ҡарап, үҙҙәре өсөн ниндәйҙер һығымта яһайҙыр. Ә әлегә Рәсәй киноһы үҙ сығымын ҡаплай алмай. Рәсәй киноһының дөйөм кассаһы - 10-15 процент ҡына.

Минеңсә, Рәсәй киноһына барыбер һайларға кәрәк - йә совет киноһы йолаларын тергеҙергә, йә уларҙы алып ташлап, беҙ - Америка киноһы, тип иғлан итергә. Ул саҡта бюджеттан китәбеҙ ҙә, тик бизнес менән шөғөлләнә башлайбыҙ. Башҡорт кинематографы Рәсәй ысынбарлығынан сығып үҫешә. Беҙ ҙә шул уҡ һайлау алдында. Тик бизнесҡа китһәң, мәҙәниәт тураһында уйламайһың инде. Ә мәҙәниәтте үҫтерәм тиһәң, аҡса юҡ. Мәҙәниәтте лә, бизнесты ла берләштереп була, тик һуңғы 25 йыл эсендә Америка киноларында тәрбиәләнгән тамашасыны ошо территорияла башҡорт телендәге киноға йәлеп итеүе ауырыраҡ. Сөнки уларҙың да һайлау мөмкинлеге бар - башҡорт киноһын ҡарарғамы, әллә Голливуд киноһынмы. Милли кино - ул насар сифат тигәнде аңлатмай. Быны беҙ 9 млн һумлыҡ грантҡа кино төшөрөп, раҫланыҡ инде. Тамашасы "Форсаж"ға ҡарағанда, башҡорт телендәге киноға өҫтөнлөк бирҙе. Тимәк, Өфө тамашасыһы башҡорт киноһын күргеһе килә. Баймаҡта ла ҡарарға теләйҙәр, тик уларға күрһәтмәйҙәр генә. Хәҙер прокатсылар, дистрибьюторҙар, рекламасылар, партнерҙар менән эште әүҙемләштереү кәрәк. Был, иң тәүҙә, картинаның үҙкиммәтен түбәнәйтеү өсөн мөһим. Ниндәйҙер үҫеш системаһын уйлап табырға кәрәк. Был һорауға еңел генә яуап биреп булмай. Кемдер мин һайлаған юл буйлап бара ала - киномәктәп менән аҡса эшләйем һәм ул аҡсаға мәҙәни проекттар төшөрәм, сөнки минең өсөн яратҡан эшем менән булышыу мөһим.

Әйткәндәй, кинематограф Францияла ла, Англияла ла субсидиялана. Әгәр ҙә теге йәки был дәүләттең территорияһында үҙ телендәге киноһы юҡ икән, ул уның территорияһы булыуҙан туҡтай. Дәүләт шуны аңларға тейеш, мәҙәниәт - ул дәүләт йүнәлешенең төп нигеҙе. Глобалләшеү һәйбәт күренеш түгеллеген Европа төшөндө инде бөгөн. Беҙҙең республика ла шуға инанһын ине: үҙбилдәләнеште һаҡлап ҡалыу - шәхси рухи хәүефһеҙлек мәсьәләһе ул. Гранттарға эшләнгән һәр проекттың нигеҙендә ошо хәҡиҡәт ятырға тейеш.

**Совет режиссерҙары бөгөнгө технологияларға ҡарап көнләшер ине, тинек. Ә улар бөгөнгө геройҙарға һоҡланыр инеме? Ни тиһәң дә, совет киноһы геройы өлгөһөндә тотош быуындар тәрбиәләнде бит?**

- Юҡ, тип уйлайым. "Высоцкий. Спасибо, что живой" киноһын күреп, "Ул минең иң яратҡан йырсым ине, ә һеҙ унан кире герой яһағанһығыҙ", - тип күршем минең йөҙөмдә бөтөн кинорежиссерҙарға дәғүә белдергәйне. Минең дә был киноны күреп, кәйефем боҙолдо: күпме бөйөк йырҙар яҙған, күпме ролдәр башҡарған Высоцкийҙы бысраҡ күлдәктәге наркоман итеп күрһәтәләр. Ниндәй маҡсатта - аңламаҫһың. Замандаштарыбыҙ - ауылдарҙа емерелгән хужалыҡтарҙы тергеҙеүселәр, уҡытыусылар, йәшәү бүләк иткән табиптар, енәйәтселәрҙән һаҡлаусы полиция хеҙмәткәрҙәре герой була алмаймы ни? Кинематограф һәр ваҡыт тамашасыла ыңғай тойғолар ҡалдырырға тейеш. Мәҫәлән, Бабич минең өсөн идеаль герой - ул үҙе өсөн түгел, башҡалар өсөн йәшәй. "Урал батыр" эпосында ла күрәбеҙ быны, башҡорт өсөн төп йәшәйеш асылы ла ошонда. Совет фильмдарында ла бар ине был: кеше алмай, бирә - яҡшылыҡты, изгелекте. Бөгөнгө геройҙар тик үҙен ҡайғырта, урлай, үлтерә. Тағы ҡабатлайым: кинематограф - ул шундай ҡорал, уның ярҙамында һин тамашасыға тәьҫир итергә тейешһең. Ул кино ҡараһын да, геройҙан өлгө алып, матур итеп йәшәргә дәртләнһен, эшен яҡшы итеп башҡарһын, балаларын изгелектә тәрбиәләһен. Кино һәр ваҡыт идеологик йәһәттән тәрбиәләүсе ҡорал булды, ә бөгөн был да юҡҡа сыға. Мин совет киноһы вәкиле, мин Рәсәй кинорежиссеры түгел. Дөрөҫөрәге, мин кометаның ҡойроғо ғына, ә комета күптән осоп киткән. Экрандарға яҡшы геройҙарҙы ҡайтарырғамы, юҡмы, тип һорайһығыҙ икән, мотлаҡ ҡайтарырға кәрәк, тип яуаплайым. Башҡалар был йәһәттән нимә уйлайҙыр, белмәйем.

**Милли киноның үҫеш кимәлен тулы метрлы фильмдар билдәләйме?**

- Республикала милли кино тигән төшөнсә бик шартлы. Бына һинд кинолары шунда уҡ танылып тора, уны йырҙары, бейеүҙәре билдәләй. Француз киноһын да танылар. Бына был башҡорт киноһы тип әйтерлек үҙ кинотелебеҙ ҙә, үҙ формабыҙ ҙа юҡ әлегә. Уларҙы эҙләү бара. Тамашасы беҙҙең киноларҙы күреп, башҡорттар шулай итеп төшөрә ул, тип әйтерлек булырға тейеш ул үҙенсәлек. Беҙ, кинорежиссерҙар, әлегә милли телдә заманса Америка йәки Рәсәй киноһы төшөрәбеҙ. Йәғни, мәҙәни киңлектә "башҡорт киноһы" тигән айырым төшөнсә юҡ. Беҙҙә башҡорт телендә кино төшөргән кинематографистар ғына бар. Бына был үҙенсәлегебеҙҙе табыу ҙа бурыс, тәнҡитселәр күберәк яҙһа, аңлатһа, был турала бәхәстәр булһа, яҡшы булыр ине. Бының өсөн эксперименттар үткәрергә, форма эҙләргә кәрәк. Бер нәмә асыҡ: милли кино икән, ул милли йолаларға, милли драматургияға, милли үҙенсәлектәргә нигеҙләнергә тейеш. Үҙ мәҙәниәтебеҙҙе аңлап, уны кинотел менән берләштереп, стиль барлыҡҡа килтерә алған режиссер табылһа, шул саҡта милли кино ярҙамында бизнес эшләргә лә була.

Ә фильм 3 минутлыҡмы, 1,5 сәғәтлекме - мөһим түгел. Тулы метрлы картина 50-60 сменала төшөрөлә, шуға ла ул ҡиммәтле. Ҡыҫҡа метр өсөн 3-5 көн етә. Уның менән фестивалдәргә эләгеп була, уға дәғүәләр ҙә әҙерәк була, сөнки ҡыҫҡа метрҙы бер кем дә шул уҡ "Форсаж" менән сағыштырмай. Шул уҡ ваҡытта, кино төшөрәһең икән, һин шунда уҡ кем менәндер конкуренцияға инәһең. Күрше залда барған "Форсаж" һиңә конкурент. Беҙ баштан уҡ ошо шарттарға ҡуйылғанбыҙ, бына шуға ла кинематографистар гел тетрәнеүҙәр араһында эшләй. Ошоларҙы күҙ уңында тотоп, саҡ ҡына әүҙемерәк булырға һәм йәштәребеҙгә ярҙам итергә кәрәк, шул саҡта улар башҡорт киноһы тигән төшөнсәне булдырасаҡ.

**Атайығыҙ, Башҡортостандың халыҡ шағиры Тимер Йосопов Һеҙҙең һөнәрегеҙгә нисек ҡарай ине?**

- Мин ярайһы ирекле үҫтем, атайым аҡыллы һүҙҙәр менән тәрбиәләргә яратмай ине. Минең кино сәнғәте кеүек еңел булмаған юл һайлауыма ла ҡаршы килмәне. Хатта, кәрәк саҡта, мөмкин тиклем, матди яҡтан да ярҙам итергә тырыша ине. Гел минең өсөн борсолғанын тоя инем. "Сөмбөлдөң етенсе йәйе" өсөн "Сталкер" Халыҡ-ара фестивалендә Кино белгестәре һәм тәнҡитселәре гильдияһы призына лайыҡ булғас, ҡыуанғайны ла. Атайымдың үлеме минең өсөн оло юғалтыу булды.

Беҙҙең өйҙә берәү ҙә буш ултырманы. Атай менән әсәй эшләне, апайым менән мин уҡыныҡ. Атайымдың башҡорт мәҙәниәте, шиғриәт менән шөғөлләнгәнен аңлай, халҡы өсөн хәүефләнгәнен күрә инем. Башҡорт халҡына ҡарата әйтелгән ниндәйҙер кире фекерҙәрҙе үҙенә әйтелгән кеүек ауыр ҡабул итер ине. Бер кем дә, бер ҡасан да көсләп таҡмаһа ла, ошо тойғо минең үҙемдә лә бар, ул миңә атайымдан күскән. Башҡорт телендә насар һөйләшәһең, тип әйтә ине, тик был миңә башҡорт халҡы өсөн эштәр эшләргә ҡамасауламай. Ҡалала үҫһәм дә, башҡорт телен мин кинола һаҡлайым. Киноларҙы ла гел башҡортса төшөрөргә тырышам. Үҙем атай булараҡ, улымдың сәнғәт юлын һайлап ҡуйыуынан бер аҙ хәүефләнәм. Ул әсәһенә (Башҡортостандың халыҡ артисы Рушанна Бабич - Ред.) нығыраҡ оҡшаған, ә Рушанна һәр нәмәне уйлап, үлсәп эшләй. Улымдың шулай тыныс, ирен сите менән генә йылмайып, һәр нәмәгә ышанмайыраҡ ҡарауы оҡшай, шуға ла, ниндәй юл һайлаһа ла, юғалып ҡалмаҫ, тием.

Атайымдың күңеле шул тиклем саф ине, ул кемделер яңылыш рәнйетеп ҡуйыуҙан һаҡлана ине. Хәҙерге заманда быңдай булыуы еңел түгел, был һәр кешенең үҙенең эске һайлауы. Ҙур проекттар эшләгәндә миңә меңәрләгән кеше менән эшмәкәрлек итергә тура килә һәм мин дә кемделер үпкәләтеп ҡуйыуҙан ҡурҡам, атайымдан ошо сифат күскән. Кәрәк булһа, үҙемде яҡлай алам. Конфликттар бит кешене кисәге көндә тота. Күңелең тыныс булһын тиһәң, бер кем менән дә талашма, ярамаған эш эшләмә, кәрәкмәгәнен алма. Дөрөҫ йәшәү нигеҙе ошо ябай хәҡиҡәттә. Үҙемде алдамайым, кеше фекеренә буйһонмайым, быны бөтәһе лә белә. Минең менән килешеүе ауыр, ләкин килешәһегеҙ икән, мин яҡшы дуҫ була беләм. Үҙемдең яҡындарымды - әсәйемде, ҡатынымды, улымды, апайымды бәхетле итергә тырышам, тик йәмғиәт минең турала нимә әйтер тип аптыранмайым. Былар мине ижадта ирекле итә лә инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ижадсы азат булырға тейештер ул. Булат Йосопов кеүек. Хыялдарына тоғролоғо, кешелеклелеге, ижадына, шәхесенә ҡағылған һүҙҙәргә иғтибар итмәүе азат итә уны. Һәм ижадсы бер ҡасан да үҙ юлынан тайпылмаҫҡа тейеш. Булат Йосопов кеүек.**

**Әлеге көндә режиссер "Беренсе Республика" тип аталған яңы художестволы фильм проектына тотондо. Ул "Бабич" фильмының логик дауамы буласаҡ. Был фильмдың 2018 йылда Башҡортостандың 100 йыллығын байрам иткән мәлдә экрандарға сығыуы көтөлә. Ә башҡорт киноһы, уның үҫеш кимәле хаҡында һәр кем үҙ фекерендә ҡалһын, әйҙә. Иң мөһиме, башҡорт киноһы ниндәй булырға тейешлеген аңлаған шәхестәребеҙ бар, уларға беҙ өмөттәр бағлайбыҙ.**

**Ләйсән НАФИҠОВА әңгәмәләште.**

✓ *Уның "Урал тауышы" дүрт айҙан һуң республиканың "Совет Башҡортостаны" гәзите биттәрендә ташҡа баҫылып сығып, донъя шаулатты, мин белгән ағай-эне уны йотлоғоп уҡыны, бугай, шул хаҡта һүҙ күп булды.*



# УРАЛ ТАУЫШЫ

**Ошо тылсымлы һүҙҙәрҙе аҡ ҡағыҙға төшөрөүем менән үк ҡәләмдәшем Абдулхаҡ ағай Игебаев һыны күҙ алдыма килде.**

Уны белеүем күреүемдән байтаҡҡа элегерәк, үткән быуаттың илленсе йылдарында, Ырымбур өлкәһенең Һунарсы ауылына Өфөнән яҙа-йоҙа килеп еткән "Әҙәби Башҡортостан" журналының әҙәби тәнҡит бүлеге аша булды. Унда, иҫемдә ҡалыуынса, халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең, самаһыҙ сапсыныусы ҡәләмдәштәренә өндәшеп, "Башҡа эшегеҙ булмаһа, Абдулхаҡ Игебаевты әрләгеҙ", тигәнерәк әсе телле мәҡәләһе ташҡа баҫылғайны. Аңлауымса, матбуғатта бер-бер артлы сыҡҡан мәҡәләләрҙә йәш шағирҙың, еңеләйтеп әйткәндә, үтә ябай яҙыуын тәнҡитләгәндәр, оло шағирыбыҙ иһә, ябайлыҡта - даһилыҡ, тип, уларҙы пыр туҙҙырған. Алыҫтан килгән ошо ауаз күңелемдә тәрән уйылып, тәнҡитләнеүсе егеткә ҡарата һүрелмәҫлек ҡыҙыҡһыныу уятты. Абдулхаҡ Игебаев иһә һоҡланғыс оҙон ижади тормошо дәүерендә ысынлап та даһилыҡ кимәленә өлгәшеп, Башҡортостан Республикаһының иң юғары дәүләт бүләктәрен алды, әҙәбиәтебеҙҙә тик үҙенә генә хас нурлы эҙ ҡалдырып, иң ҙур баһа - Халыҡ шағиры дәрәжәһендә баҡыйлыҡына күсте...

Ун өс йыл уҙғас ҡына, 1958 йылдың йәйендә, уның менән Өфөлә йөҙмә-йөҙ осраштыҡ. "Һәнәк" журналынан күсеп, яңы ғына асылған "Башҡортостан ҡыҙы" журналында эшләп йөрөгән сағым; редакция йомошо менән үҙ ғүмеремдә беренсе тапҡыр Бөрйән районына барып, атаҡлы Шүлгәнташ мәмерйәһендә алыҫ-алыҫ бабаларҙың ҡаяға төшөргән ҡан төҫөндәге һүрәттәрен күреп, тәрән рухи тетрәнештәр кисергәйнем; ҡалаға ҡайтҡас та оҙаҡ ваҡыт иҫемә килә алмай ҡаңғырып йөрөнөм. Ата-бабаларым, халҡым, Башҡортостаным һәм салдарҙан-сал тарихыбыҙ тураһында уйланып, "Минең шәжәрәм" исемле поэмамды бер һулыштан яҙғайным. Яҡынлап килгән оло байрам айҡанлы, "Бөйөк Октябрь революцияһының данлы 50 йыллығына" тигән арнау беркетеп, "Ағиҙел" журналына илттем. Редакция әһелдәренән тыш, Яҙыусылар берлеге рәйесе Хәким Ғиләжев менән сәркәтибе Вәзих Исхаҡов, партбюро етәксеһе Фәйнан Әмири ҙә ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡып, поэманы алдағы йылдың ноябрь һанында журнал уҡыусыларына еткерергә, тигән фекергә килгәндәр. Үҙемде саҡыртып алып, әҫәрҙе бер аҙ ҡыҫҡартырға, бер аҙ шымартырға ҡуштылар. Йәйәт кенә барыһын үтәп, ҡулъяҙманы алып барғанымда "сюрприз" көтә ине: бақтиһәң, редакцияға билдәле шағир Абдулхаҡ Игебаев минеке кеүек үк темаға яҙылған "Урал тауышы" тигән поэма килтергән. Йәнгә һалҡын йүгерҙе: тимәк, был бәйгелә минеке уҙмаясаҡ...

Редакцияла мин фәкирегеҙгә уны-быны белгертмәй генә күмәкләп йыйылыштылар ҙа, килтергәнемде үҙемдән ҡысҡырып уҡыттырып, өндәшмәйенсә тыңлағас, коридорға сығып көтөп торорға бойорҙолар. Тимәк, фекер алышасаҡтар, яҙмышым ҡыл осонда!

Ҡыҫҡаһы, фекерҙәр бәрелешкән. Беҙмән табағы "Урал тауышы" яғына нығыраҡ ауышҡас, Хәким ағай һалған гер баҫа төшкән: "Ике поэма ла һәйбәт, көн ҡаҙағына ҡаға, ҙур тәжрибәле шағир Абдулхаҡтыҡы, бәлки, үтемлерәктер ҙә. Ләкин ул шымарған автор, бында булмаһа, икенсе урында баҫтырыр, - тигән ул. - Абдулхаҡ ҡустыны күҙ алдында тотанаҡлап үҫтерҙек, килһә йыл мәркәз ҡалабыҙ Мәскәүгә уҡырға ла ебәрәбеҙ, шуға күрә ул аңлар: Йыһат Солтанов әле генә бураҙна араһынан килеп, ҡатыны, өс балаһы, әсәһе менән ҡала ерлегендә саҡ-саҡ эләгеп тора; әммә ул бөрөләнгән талант эйәһе, артабанғы асылышына булышлыҡ итергә кәрәк. Абдулхаҡ ҡусты менән үҙем һөйләштем, ризалашты - ҡулъяҙмаһын алып китергә тейеш... "



*Баҫып торалар (уңдан һулға): Абдулхаҡ Игебаев, Йыһат Солтанов, Шакир Янбаев һәм алда Шәриф Биҡҡол, Ғәлимйән Латип (Татарстандан), Рәйес Низамов.*

Бүлмәгә ҡабат саҡыртылып, түбәмде күккә тейерҙәй итеп осондорттолар, Вәзих Исхаҡов тигәндәре яурыныма дуҫтарса ҡулын һалып: "Ну, брат, дәүләтебеҙҙең Ғәлимов Сәләм исемендәге бүләге һиңә обеспечен - беркетергә хөләндән түшенә тишек тишә тор", - тип шаяртты (миңә бер ҡасан да ундай тишек тишергә кәрәкмәне).

Шул арала редакцияға йыуантыҡ урта буйлы, ташып барған көслө хистәренәнмелер ҡыҙара бүрткән түңәрәк йөҙлө һәм, ул замандың минең һымаҡтарынан айырмалы буларак, энәнән-ептән яңы костюмлы, ҡупшы һалам эшләпәле уҙаман килеп керҙе лә, һис бер һүҙ ҙә өндәшмәй, бөхтә папкалы ҡулъяҙмаһын өҫтәлдән эләктереп, елтерәп сығып та китте - Абдулхаҡ Игебаевты беренсе күреүем ошо булды.

Уның "Урал тауышы" дүрт айҙан һуң ("Минең шәжәрәм"дән күпкә элек) республиканың "Совет Башҡортостаны" гәзите биттәрендә ташҡа баҫылып сығып, донъя шаулатты, мин белгән ағай-эне уны йотлоғоп уҡыны бугай, шул хаҡта һүҙ күп булды. Әҫәр юғары патриотик пафосы, халыҡсан ябай теле менән иғтибарҙы ныҡ тартты. Әйтерһең дә, сал Уралыбыҙ күп быуатлыҡ йоҡоһонан уянған да баһадирҙарса тороп кирелә; халҡыбыҙҙың данлы-ҡанлы үткәне, сыуаҡ көнлө бөгөнгөһө, киләсәккә ышаныслы ынтылышы сағыу сәскәләр, йылғалар, урмандарҙың теле аша донъяға фаш ителә; бында бөтә нәмә йәнле һәм йырлы: Ҡояш, аҡҡош, ҡайын, үләндәр, ысыҡ тамсылары, тупраҡ-таштар, имән, бөркөт - һәр береһе үҙ үҙе тауышы һәм аҡыл менән көйләй, ә үҙәктә симфонияның лейтмотивы рәүешендә Урал бөркөтө саңҡый - йөмғеһе бер орантауышҡа әйләнеп, шағир йөрәгенән дәртле урғыла. Ҡәләмдәштең рухиәтендә үҙемә ишлек табып, үҙен яҡындан күреп фекер алышырға итһәм дә, форсаты сыҡмай ҡалды - уның инде Мәскәүҙә Максим Горький исемендәге Әҙәби институттың ике йыллыҡ юғары курстарында уҡый башлауын ишеттем. Шул ике йыл араһында ул байтаҡ әҫәрҙәр яҙҙы һәм республика матбуғатында балҡытты; ярһыу рухлы шиғриәте мәркәздә лә яңы үрҙәргә артылып, "Оран һала Ер-әсә" тигән патетик поэмаһы урыҫ теленә тәржемәлә КПСС Үҙәк Комитетының төп органы "Правда" гәзитендә баҫылып сыҡты, был иһә башҡорт совет әҙәбиәтендә әлегәсә халыҡ шағиры Мостай Кәрим ишеләр генә яулай алған үр ине.

Дан-шөһрәттең Аҡбуҙына атланған шағирыбыҙ 1971 йылда уҡыуын тамамлап, Өфөгә ҡайтып төштө лә, ал-ял белмәй, "Ағиҙел" журналының шиғриәт бүлеген етәкләргә тотондо, ул саҡ мин дә редакцияла әҙәби хеҙмәткәр вазифаһын башҡара -әҙәби тәнҡит һәм публицистика бүлеген алып бара инем. "Мәскәүский" яңы фасонлы кейенгән, мыҡты буй-һынынан дәрт-көҙөтө тиртеп торған уҙаманды редакция йәмәғәте дөйөм ихласлыҡ менән ҡаршыланы, ул иһә һәр беребеҙ менән егеттәрсә ҡаты ҡул ҡыҫып күреште. "Ағиҙел"селәр ул ваҡытта йәмғеһе бер бүлмәгә тыңҡысланған: ишектән ингәс һул яҡ стена буйында бер-береһенә терәтелгән өҫтәлдәр артында етәксе түрәләребеҙ - шиғриәт бүлеге, проза бүлеге мөдирҙәре һәм баш мөхәррир үҙе сукайып ултыра; уларҙың күҙ алдындағы уң яҡ буйҙың түр башында яуаплы сәркәтип ("штаб начальнигы"), унан ҡала, шулай уҡ терәлешеп, ике әҙәби хеҙмәткәр һәм корректор биләмәләре. Шул буйҙағы беҙҙәр, йәғни ябай "йөк аттары", ҡаршы яҡтың даими һизгер ҡарашын, күҙәтеүен иңебеҙҙә ныҡ тойоп, сәғәтенән-сәғәтенәсә өндәшмәй һәм баш ҡалҡытмай, алдыбыҙҙағы яҙыулы ҡағыҙ биттәренә теклергәнбеҙ; рәсмилек хөкөм һөрә, шуға күрә ул осорҙа "Мәскәү уҙаманы" менән минең арала тығыҙ аралашыу булманы, тип әйтерлек.

Бына бер заман өйөбөҙҙә һис кенә лә көтөлмәгән иләмһеҙ ваҡиға тыуҙы: "мәскәүский" ағайыбыҙ, бертала егелеп эшләгәс кенә, аңлайышһыҙ нимәләгер юлығып, эш урыны етемһерәп буш торҙо. Түрәләрҙең серле ҡараштарынан, быш-быш һөйләшеүҙәренән арабыҙға "йәшел йылан" (хәмер) кергәнлеген һиҙендек. Был сир яңылыҡ түгел, шул арҡала ҡорҙаштарыбыҙ йә йығылып аяҡ-ҡулын һындыра, йә айныҡтысханаға эләгеп, эшенән ҡыуыла ла ғаилә фажиғәләре йәнде телә. Әйтергә кәрәк, партия һәм матбуғат органдары, шул иҫәптән танылған әҙиптәр быға ҡаршы ныҡ көрәштә. Хәтерләйем, 1959 йылда бугай, "Совет Башҡортостаны" гәзитендә шағир Абдулхаҡ Игебаевтың тап шул "йылан"ды ләғнәтләмәй ифрат үткер һәм талантлы "Тәүбәгә ҡайтыу" поэмаһын уҡыныҡ, унда Нурихан исемле бер замандаштың асы хәмер юлындағы аяныслы күрмәше, ниһәйәт, аҡыл ултырып тәүбәгә ҡайтыуы бәйән ителә ине. Әммә йырҙың йыртығы юҡ, тигәндәй, баяғы көндә вахтер-милиционерҙан телефон шылтырағас, аҫҡы ҡатҡа йүгереп төштөк һәм... "Тәүбәгә ҡайтыу" поэмаһының авторын унда тап баяғы Нурихан хәлендә күрҙек...

Бер-ике көндән һуң ағай әүәлгесә ыҫпай хәленә ҡайтып, елтерәп килеп етте, дөйөм ғәфү үтенеп, шул шаҡшыны инде бер ҡасан да, бер ҡасан да ауыҙға алмаясағын белдерҙе; һәм әйтергә кәрәк, ошо изге нәҙерен ир ғүмеренең ахырынаса үтәне. Оҙаҡ йылдар бергә эшләү дәүерендә миңә уның менән оло-оло байрамдарҙа ҡатнашырға, төрлө сәфәрҙәрҙә булырға һәм күңелле мәжлестәрҙең түрендә бокал тоторға, уның әйткән шиғри тостарын тыңлап зауыҡланырға насип итте, әммә һәр саҡ бокалын тулы килеш кире ултырып ине - был иһә ирҙең ир булып ҡалыуына, рухи баҙыҡлығына яҡшы ишара, башҡаларға өлгө булырҙай сифат. Сөнки күптәрҙең, эскерһеҙ ант итеп тә, хатта тәненә "үлемесле код" ҡаҙатып та, ҡабат эскегә һабышҡанын, һәҙәмтәлә был донъянан иртә киткәнен беләм. Үҙемдең дә аҡыл юйған хәтәр саҡтар аҙ булманы, ҡайһыларыһы иҫкә төшһә, сәстәр үрә торорлоҡ...

Һикһәненсе йылдар башында баш ҡалабыҙҙа тәҙәлеп бөткән республика Матбуғат йортона күсенеп, майҙандарыбыҙ бер ни тиклем артҡас ҡына, оҙаҡ йылдар буйына икебеҙ бер бүлмәлә ҡаршы-ҡаршы ултырып эшләнек һәм уйҙарҙың берҙәйлеген, күңелдәрҙең яҡынлығын кисерҙек. Икебеҙ ике бүлекте етәкләнек тә, фекерҙәребеҙ тап килә, сетерекле ҡулъяҙмалар хаҡында ла йыш ҡына кәңәшләшәбеҙ. Яңы заманда еңел-елпегә әүерелә барған башҡорт драматургияһы йәнебеҙҙе берҙәй өйкәгәнлектәнме, ҡулалмаш пьеса яҙырға ла ине иҫәп, тик был ниәтебеҙ татлы хыял ғына булып ҡалды...

Телефон аппараттарыбыҙ йәнәш тоташтырылған, икеһе нәҡ бер юлы шылтырай ҙа трубканы кем өлгөрҙө шул ала, ләкин иң күп мөрәжәғәттәр күршем өлөшөнә төшкәнлектән, мин башлап үрелмәҫкә күнектем, ағайым да шуны ғына һағалап көткәндәй ине. Кем генә юҡ йомарт хисле шағирҙың күңел йылыһын тойорға теләүселәрҙән! Бәхетлеһе лә, бәхетһеҙе лә серҙәрен уртаҡлаша. Биргән нәсихәттәренән төшөндөм: күптәр уға тормошонон, яҙмышының ауыр мәлдәрендә һыктап өндәшә, ул һәр береһен аңлай, ҡайғыһын йә шатлығын уртаҡлаша, яҡшы кәңәштәре менән йыуата. "Һин, ағай кеше, Максим Горькийҙың "Тормош төбөндә" драмаһындағы "Лука-утешитель" һымаҡ, бер кемгә лә оторо бәрелмәйһең, йүпләп ебәрәһең!" - тип шаяртып алған саҡтарым да булды, әммә серҙәшем өндәшмәй генә тыңлай ҙа йылмайып ҡына ҡуя ине...

Эш көнө башландымы, эргәнгә шағирҙар һәм йырсылар, һәүәҫкәр композиторҙар, ғилем эйәләре бер-бер артлы эркелә, оҙон-оҙаҡ серләшеп, ҡәнәғәтлек табалар, һәр кемдең тик үҙенә хас ҡылыры. Яҡташы шағир Сәләх ағай Кулибай, мәҫәлән, ҡыҙмасаланған саҡтарында пәйҙә булып, теш араһынан ниндәйҙер ҡош тауышынмы, ел һыҙғырыуынмы өҙөк-өҙөк шыйылдатып, ара-тирә үҙе генә белгән кемделер "сволош" тип битәрләп килеп керер ҙә, яҡташы ҡаршыһына ултырып, өҫтәлдәге асмалы календарь битенә йәшел ҡәләм осонан япраҡһыҙ-емешһеҙ алмағасты һүрәтләр, ә быныһы ишараны төшөнөп, кеҫәһенән биш һумлыҡ сығарып бирер; алмағассы ҡәнәғәт тамаҡ ҡырып, календарҙың алдағы көндәре битенең береһенә йәшел алма һүрәте төшөрөп сығып китер - үтес тап шул көндә ҡайтарыласаҡ, тимәк (һүҙендә торор ине). Көнөндә үтәй алмаһа ла килеп етә, ҡасан үтәрен белгертеп, календарь битендә ҡыҙарып бешкән алма һүрәтен ҡалдыра. Ҡайһы берҙә ул өҫтәлгә һалған бишлеген (үтес ҡайтарылды!) шунда уҡ кире алып, яңы биткә яңы алма һүрәтләй ҙә, сутылдаған ҡәнәғәт ҡош тауышы һыҙғырып сығып китә...

Ә бер көндә элекке данлы кавалерист Яҡуп Ҡолмой ағай күҙгә күренмәҫ яланғас ҡылысын башы осонда сорғотоп, ярһыу ат тояҡтары дөпөлдәүенә хас ҡаты баҫа бейеп килеп инеп, шаҡ ҡатырҙы; "ҡылыс" һабын ҡыҫып тотҡан яҫы тарамыш услы ҡулынан сихри ҡөҙрәт бөркөлдөртөп, бүлмәне бер-ике әйләнгәс, күҙҙәренән йәш килеп, ҡустыһын барып ҡосаҡланы; тулҡынланыуҙан ҡыҙара бүртенгән ҡустыһы гәййәр яугирҙе яғымлы тынысландырып, фатирына тиклем оҙатып ҡуйҙы. Ҡырҡ йоҙаҡҡа бикләнгән йомоҡ йәндәрҙе лә ул үҙенең йомарт күңел яҡтыһы менән асты, бындай тылсымлы яҡтыға эйә булған йәнә лә бер ҡорҙашым - Рәми Ғарипов бар ине. Икеһе лә инде мәңгелеккә илендә; гүр ҡараңғы, тиһәләр ҙә, уларҙыҡы яҡтылыр. Журналистар Мостай Кәримдең, кешеләрҙе мин ике төркөмгә бүләм: яҡшылары Ер шарының Ҡояш яҡтыртҡан яртыһы яғында йәшәй, ямандары - ҡараңғы яҡ яр-

тыһында, тигәнерәк ҡанатлы әйтемен ҡабатларға ярата. Миңә ҡалһа, шағир Абдулхаҡ Игебаевтың күңеле Ер шарының ике яғын да иңләй, тигеҙ яҡтырта - уның бер бите Ай, бер бите Ҡояш ине...

Күпме генә бирелеп һәм тырышып эшләһәк тә, хеҙмәттәшлек итеүебеҙҙең һуңғы тиҫтә йыллығында "Ағиҙел"дә атмосфера тынсыуланып, ни өсөндөр икебеҙгә генә баҫым, ҡаҙалыуҙар көсәйҙе. Хәйер, сәбәбен дә беләбеҙ: мине ниндәйҙер "милләтселек" мисәүенә таҡһалар, ә уның эш урынына эйәләнергә яҫҡыныусылар бар ине. Беҙ баҫмаға әҙерләгән материалдар "өҫкө иләк"тә йыш ҡына сәбәпһеҙ тотҡарланып, арҡыс-торҡос һыҙылып кире ҡайтарыла, бүлектәр эшләп еткермәй, кадрҙарҙы яңыртырға кәрәк, тигән хөсөт ҡуйыра, ләкин тота һалып ҡына беҙҙе ҡыуып ебәрергә ышаныслы дәлил юҡ. Өҙләкһеҙ ыжып өйкәлеүҙән нервылар ян керешеләй тартыла, арҡа буйҙарым семерҙәп һыҙлай, ҡан баҫымы артҡан ағай ҡыҙара-бүртенеп ултыра. Бер аҙ арынып өсөн, йәйен-ҡышын эштән һуң ҡаланың оҙон проспекты буйлап йәйәү ҡайтабыҙ, саф һауа ла һулана, төрлө уйҙар ҙа уйлана. Ҡышҡыһын ҡыйыныраҡ: шыма күк боҙло тротуарҙан тая-тая барабыҙ. Ул саҡтағы етәкселек әһелдәре - партияның райком, горком, обком түрәләре генә күҙ ҡыҙҙыртып кейгән "заграничный" ысын күн аяҡ кейемле юлдашым бик бирешмәй, мин иһә Эстәрлетамаҡтың яһалма күн, резина табан ботинкаларында аҙым һайын тип әйтерлек лап-лоп йығылам, хәтәр тәңгәлдәрҙә ағайым йәһәт ҡултыҡлап ала. Әммә иҫебеҙ китмәй, юл буйынса әҙәби әҫәрҙәр тураһында һөйләшеп, киләсәккә төрлө ижади пландар ҡороп мауығабыҙ. Айыҡ аҡыл менән ҡуш йөрөгәс ни, мине шайтан да ҡотортмай, "йәшел йылан" да саҡмай... "Спортивная" туҡталышына еткәс, юлдашым һулға борола; беләм, Зорге урамы сатындағы ҙур магазиндан үҙенә тигән (һатыусы ҡыҙҙар әҙерләп ҡуйыр ине) ике шешә дефицит кефирҙы ҡыҫтырып, ғүмерлек һөйөклөләре - хәләл ефете Маһиҙәһе, берҙән-бер ҡыҙы Фәниәһе көткән йылы фатирына етешер. Шуныһы ҡыҙыҡ: аҙыҡ-түлек тауарҙарына ҡытлыҡ кисергән шул осорҙа, йылмайып бер генә һүҙ өндәшһә, таныш түгел һатыусы ла уға яҡты йөҙ күрһәтер, теләгәнен табып бирер ине.

Мин бәндәгеҙ, редакциялағы баяғы ҡырыҫ ҡыҫымдарға түҙә алмай, пенсия йәшемәсә яңынан алты йыл эшләргә кәрәкһә лә, "үҙем теләп" ғариза яҙып, эшемдән киттем, ағайым бирешмәне, эшләне лә эшләне...

"Ағиҙел"дән шулай табан тайҙырғас, ҡыуылып китте - көнө бөттө, типмелер инде, һирәк кенә дуҫтарымдың ҡайһы берҙәре үҙемде танымаҫ булды, онотто, әммә Абдулхаҡ Игебаевтың миңә ҡарата хәстәрлеге, күңел йылыһы кәмемәне, һыуынманы. Етмеш биш йәшлек юбилейым килеп еткәс, ғәҙәттә, ундай даталарҙы киң билдәләүсән матбуғат саралары Йыһат Солтанов хаҡында яҡшынан-ямандан һүҙ ҡуҙғатмай, үле тынлыҡ һаҡланғанда, берҙән-бер Абдулхаҡ Игебаев бөтә күңел йылыһын һалып күләмле мәҡәлә яҙҙы, тейешле әһелдәр менән уртаҡ тел табып, татар телле "Ҡызыл таң" гәзитендә минең дә донъяла барлығымды белдерҙе.

Бына хәҙер уның үҙе тураһындағы тәүге һәм һуңғы мәҡәләмә нөктә ҡуйырға ултырам. Талант эйәһенең Урал улына хас түңәрәк яҡты йөҙө лә, сағыу хисле шиғырҙар, поэмалар, ҡобайырҙар булып күкрәгенән нурлы донъяға урғылған ысын Урал тауышы ла, хәтеремдә бермәбер йәшенләнеп, йәнемде йыһан яҡтылығы ғаләменә осорта, йәнә үҙен был донъяма ҡайтартып, үткәндәрҙе тергеҙә. Шаулы шиғри бәйгеләрҙең сәхнәләрендә ялҡындай дөрләп янған, залдан көслө алҡыштарға, сәскәләргә күмелгән ошо Урал тауышлы шағирыбыҙ ҡатарында һис тә уға тиңе юҡ, ә ташҡа баҫылғандарының ил күңеленә үтемлелеге ҡәләм тибрәтеүселәргә үрнәк ине. Был феномендың сере, минеңсә, уның барлыҡ әҫәрҙәренең халыҡ ижады ерлегенә тәбиғи тамырланып, еребеҙҙең аһәңе, Урал моңо дәрәжәһенә етеп өлгәшеүендә. Йәғни, шағирәнә теле - милли йырҙарыбыҙҙың, эпостарыбыҙҙың, әкиәттәребеҙҙең ябай теле, тимәк, үлемһеҙлек теле. Үҙе иҫән сағында уҡ моңло йырға әйләнгән, халыҡ мауығып йырлаған һәм тыңлаған шиғырҙарының һаны буйынса ғына ла уға еткән шағир бик һирәк. Башҡорт халҡы барҙа ул да гел йәшәр, бейек ҡыйырлаған Урал бөркөтөнөң саңҡыуы һис һүрелмәҫ.

**Йыһат СОЛТАНОВ.**

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# БЫЛ ЮЛЫ МӘРГӘНДӘР...

## Учалы ерендә көс һынашты

**Халҡыбыҙҙың ваҡыт ағымында, быуаттар төпкөлөндә юғалтып ҡалдырған рухи ҡиммәттәре бөгөн тергеҙелеү юлында. Шундайҙарҙың береһе традицион яндан уҡ атыуҙыр. Һуңғы арала был спорт төрө әүҙемләшә, киңерәк даирәне ялмай бара. Бынан ике-өс йыл элек кенә күптәр традицион яндан уҡ атыуҙы балалар уйыны һымағыраҡ ҡына ҡабул итһә, хәҙер килеп беҙҙә Халыҡ-ара мәргәнлек бәйгеләре ойоштороло башланы. Шундай сара ошо көндәрҙә Учалы районында үтте. Фестивалде Учалы районы хакимиәте, район мәҙәниәт бүлеге һәм республика "Мәргән уҡсы" ойошмаһы ойошторҙо.**

Учалының тәбиғәте үҙенсәлекле инде, тауҙары ла, ҡалын булмаған урмандары ла, ялан-ҡырҙары ла, күлйылғалары ла күҙ алдында. Ҡайҙа ҡараһаң да, хозурлыҡтан күҙҙәр һөйөнә. Юлда осраған Байрамғол, Ҡаҙаҡкол, Наурыҙ, Ғәҙелша ауылдары төҙөк, күркәм, урамдарҙа йәнлелек, йылға буйҙарын бала-саға, ҡошҡорт сыбарлаған, кисен эркелеп көтөү ҡайта. "Халыҡ малды арыу тота икән, тимәк, иркен, мул йәшәйҙәр", тип һөйөнөп күҙәтеп үттек көтөү ҡайтыуын. Бер аҙ алғараҡ китеп әйтеп үтәйем, ошо күренештәрҙе беҙ генә түгел, бәйгегә килгән ҡунаҡтар ҙа аңғарған. Ҡырғыҙстандан килгән уҡсы Кубон Томотаев та: "Башҡорттарҙың йәшәйеше лә, ер-һыуы ла күркәм, иркен икән", - тип һоҡланыуын белдерҙе.

Учалының Наурыҙ ауыл биләмәһендәге Ғәҙелша ауылы янында өс көн рәттән барған "Ай, Уралым, Уралым" этно-фестивале сиктәрендә бер нисә ярыш төрө күҙалланғайны. Унда "Урал батыр вариҫтары" этно конкурсы, "Сал Ирәмәл ауазы" этно коллективтар бәйгеһе, "Мәргән уҡсы" традицион яндан уҡ атыу буйынса II Халыҡ-ара фестивале һәм "Семәр" тип исемләнгән милли кейем тегеүсе оҫталар ярышы инде. Әйткәндәй, бөтә был бәйгеләрҙә ҡатнашыусыларҙың кейгән кейемдәре лә тап боронғо башҡорттарҙыҡына ярашлы булып, шул өлгөләрҙә эшләнергә тейешлеге лә шарт итеп ҡуйылғайны. Ошоға ярашлы, әллә күпме һоҡланғыс кейем өлгөләре күрҙек, таныштыҡ, хатта һатып алыу мөмкинлеге лә булды.

"Мәргән уҡсы"ла йәмғеһе 74 мәргән ҡатнашты, улар иҫәбендә Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Белорусь республикаларынан, Силәбе, Ырымбур өлкәләренән һәм Мәскәү ҡалаһынан килгән бәйгеселәр ҙә бар ине. Ярыш беренсе көндә республика кимәлендә уҙғарылһа, икенсе көн Халыҡ-ара кимәлдә ойошторолдо. Оҫталар уҡты төрлө оҙонлоҡтағы дистанцияла һәм төрлө алымдар ҡулланып атышып көс һынашты. Һәм иң ғорурландырғаны: республика кимәлендәгендә лә, "Евразия кубогы"на барған айҡашта ла еңеүселәр үҙебеҙҙең егеттәр булды. Был ике еңеүсе-мәргән Бөрйән районынан Салауат һәм Сынбулат Юлбирҙиндар ине. Сәмсел һәм ныҡыш ир-егеттәрҙең был спорт төрөнә тәрән ихтирам менән ҡарауы үҙенекен итте, әлегә улар алдына сыға алыусы юҡ.



"Мәргән Уҡсы" II Республика турниры еңеүсеһе Салауат Юлбирҙин.



"Евразия Кубогы" I Халыҡ-ара турниры еңеүсеһе Сынбулат Юлбирҙин.

Турнирҙа ҡатнашыуға Силәбе ҡалаһынан билдәле өҙләүсе Тюргэн Кам да килгәйне. Ул көндөҙ барыһы менән бер рәттән йөрөп уҡ атышһа, ярышһа, кисен өҙләүҙең үҙенсәлекле башҡарыу оҫталығы менән һоҡландырҙы. Әйткәндәй, ике кис рәттән, көнө буйы ярышып арыуҙарына ҡарамаҫтан, бәйгеселәр этно төркөмдәр концертын ҡарап кинәнде, бейене. Көндөҙөн Учалы ағинәйҙәре ойошторған сауҙала милли биҙәүестәр һатып алды, ҡымыҙ, буҙа, айран кеүек аш-һыуҙарынан ауыҙ итте. Сәхнәнән район мәктәптәре, үҙешмәкәр ансамблдәр, мәҙәни ойошмалар тарафынан әҙерләнгән рухлы сығыштар өҙөлмәне.

***Рәис Низаметдинов, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Был бәйге күмәк көс менән ойошторолған сара. Әҙерлек эштәрендә лә күптәр ҡатнашты. Приз фондын Учалы район хакимиәте башлығы Фәрит Фәтих улы Дәүләтгәрәев булдырҙы. Райондың юл төҙөүселәр ойошмаһы етәксеһе Морат Илһамов, урман хужалығы предприятиеһы етәксеһе Айбулат Байғариндар кеме ағасын, кеме эшселәрен, кеме транспортын бирҙе. Яңы Байрамғол, Наурыҙ, Урал ауыл хакимиәттәре бар хәлдәренсә ярҙам ҡулы һуҙҙы. Ҡыуыш, тирмә, һыу, утын, аҙыҡ-түлек мәсьәләләрен дә хәл итештеләр. Бигерәк тә БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Зөһрә Исмәғилеваның булышлығына рәхмәтлебеҙ. Шулай уҡ бөгөнгө һәм башҡа ошондай сараларҙа ла ойоштороу өлкәһендә йән аямай йөрөгән Юлай Ғәлиуллин, Артур Батыршин, Азамат Юлдашбаев, Денис Өмөтбаев, Арслан Бикбай, Илдар Исхаҡов, Рөстәм Тләүбирҙин, Рөстәм Фазлетдинов, Алһыу Кинйәбаеваларҙың исемдәрен оло рәхмәт, оло ғорурлыҡ менән атап китер инем.

Уҡ атыу буйынса иң беренсе турнирҙы былтыр Учалы һабантуйында үткәргәйнек. Бары дүрт ян алып, дүрт егетте өйрәтеп, шул дүртәү араһында ғына барҙы ярыш. Унан Ҡырмыҫҡалы районында "Уйын" сараһы үтте, шунда 5-6 райондан 12 уҡсы йыйып ала алдыҡ. Быйыл Учалы районында ғына 4 турнир үткәрҙек, әлеге мәлдә районыбыҙҙа 60-лап кеше традицион яндан уҡ ата. Иң йәштәре мәктәп балалары, иң олобоҙға 87 йәш.

Илдә көрсөк, эшһеҙлек, халыҡтың ашарына яҙа-йоҙа, ә һеҙҙә көн дә байрам, көн дә туй, тигән һүҙҙәрҙе лә ишетергә тура килә. Ниндәйҙер юҫыҡта дөрөҫ тә һымаҡ. Тик был уйҙар баланды етәкләп ошондай сараға килеү менән юҡҡа сыға бит: "Атай (әсәй), был нимә ул, ә теге апайҙың кейгәне (тағып алғаны) нимә тип атала, был ниндәй ҡорал, теге йыр нимә тураһында?"- тип ҡыҙыҡһына бала, уға үҙ милләтенең үткәне, тарихы ҡыҙыҡлы. Ошондай саралар мәғлүмәти һуғыш барған быуатта, үҙ йәшәйешебеҙҙе, башҡорт рухын, милли шөғөлдәрҙе, кәсептәрҙе киләсәк быуынға тапшырып ҡалдырыуҙың берҙән-бер юлы тип уйлайым мин. Барыһының да балаларын музейҙарға, киноларға йөрөтөрлөк мөмкинлеге лә юҡ. Ә бында бөтә күргәҙмәләр, күренештәр, тамашалар бушлай, кил дә күр, бар ҙа өйрән. Һүрәткә төртөп күрһәткәндән бигерәк, баланың бер тапҡыр ғына булһа ла ысын уҡ-һаҙаҡты ҡулына алып, йә атып ҡарауы, тирмәгә инеп, кейеҙ йылыһын, ҡымыҙ тәмен тойоп сығыуы, минеңсә, үтә ныҡ әһәмиәтле - уның күңеленә рух орлоғо, милләте менән ғорурланыу тойғоһо һалынасаҡ.

***Юлай Ғәлиуллин, "Мәргән уҡсы" ойошмаһы етәксеһе:*** Күптән түгел Ҡаҙағстанда "Дала рухы" тип аталған II Донъя этно-фестивалендә ҡатнашып ҡайтҡайныҡ. Был ҙур сараға айырым хәрби сығыштар әҙерләнек. Һыбай йөрөп башҡара торған трюктарҙы Иглин районы Оло Түләк фермеры Хәсән Идиәтуллиндың базаһында, уның аттары менән өйрәндек. Фестивалдә аттарҙа хәрби күнекмәләр күрһәтеүселәр беҙ - башҡорттар ҙа, венгрҙар ғына булдыҡ. Һыбай бәрелештәрҙе, ҡылыс алышыуҙы, һөңгө һуғышын, сыбыртҡы трюктарын, балта ташлауҙы күрһәтте беҙҙең егеттәр. Шулай уҡ, эйәр өҫтөнән, сабып барған ат аҫтынан атыу һәм джигитовканың күп кенә элементтары менән сығыштар яһалды.

Традицион яндан уҡ атыу беҙҙә яңы башланһа ла, донъя кимәлендә ул күптәнге спорт. Венгрҙар, мәҫәлән, ун биш йыллап ата, поляктар ҙа шул сама. Япондар, корейҙар, украиндар ҙа атыша хатта. Мадьярҙарҙа ошо тәңгәлдәге генә утыҙ өс клуб бар икән. Уларҙың йыйылма командаһында ғына ла бөтә Мадьярстандан һайлап алынған иң оҫта егерме алты кеше килгәйне фестивалгә. Улар ысынлап та хәтәр оҫталар, таһыллылар, теләһә ниндәй атҡа һикереп менеп сабалар ҙа, күҙ йомоп атып та ебәрәләр.

Беҙҙең иң ҙур проблема - ат. Башҡортостанда йылҡы күп, менгеләр юҡ. Бигерәк тә беҙҙең спортҡа ярашлы өйрәтелгән аттар юҡ. Был тәңгәлдә идеялар ҙа, пландар ҙа бар, әммә хөкүмәт тарафынан иғтибар аҙ булыуы ғына эсте бошора.

**(Дауамы 16-сы биттә).**

***✓ Белгестәр фекеренсә, пластик һәм полиэтилентерефталаттан яһалған медицина һауыттары бигерәк тә өлкән йәштәгеләр һәм балалар сәләмәтлегенә хәүефле.***



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ДАРЫУМЫ, АҒЫУМЫ?

■ Яңы Зеландияның Отаго университеты ғалимдары С витаминына бай һәм тотош организмға ыңғай йоғонто яһаусы емеште билдәләгән. Улар әйтеүенсә, тап киви емеше организмды витаминдар менән тулыландыра ала икән. Витаминдар, үҙ сиратында, арыуҙы һәм депрессияны юҡҡа сығара. Тикшеренеүҙәрҙә төрлө йәштәге 50 ир-ат ҡатнаша. Улар көн һайын киви ашарға һәм үҙенең кәйефе-хәле тураһында ентекләп һөйләргә тейеш була. Тикшеренеүҙәр теүәлерәк булһын өсөн, төркөмдө икегә бүләләр. Беренсе төркөмдәгеләр көнөнә - ярты, икенсе төркөмдәгеләр икешәр киви ашай. Икенсе төркөмдәге ир-егеттәрҙең кәйефе лә яҡшыраҡ була, эшкә һәләтлектәре лә арта. Емештең файҙалы матдәләре нервы көсөргәнешенән дә арындыра. Антиоксиданттар һәм башҡа компоненттар аш һеңдереүгә ыңғай йоғонто яһай. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе, профессор Маргарет Виссерс раҫлауынса, С витамины метаболизмды әүҙемләштерә. Көнөнә бер нисә киви ашарға тәҡдим итә улар.

■ Швеция ғалимдары белдереүенсә, йоҡоһоҙ үткәрелгән төн баш мейеһенә насар йоғонто яһай, был хатта баш йәрәхәте алғандағы кеүек эҙемтәләргә эйә. Мәҫәлән, баш мейеһе һелкенгәндә ҡанда химик матдәләр кимәле күтәрелә, йоҡоһоҙ үткәргән төндән һуң ҡанда ошондай уҡ процестар күҙәтелә. Уппсала университеты ғалимдары төндә йоҡламаған бер төркөм кешеләрҙән ҡан анализы ала. Уларҙың ҡанында NSE һәм S-100B матдәләре кимәле күтәрелгән була, улар шулай уҡ баш йәрәхәте - мейе һелкенеүен билдәләүсе күрһәткестәр иҫәпләнә. Элегерәк ғалимдар кеше йоҡлаған саҡта баш мейеһенең көн дауамында йыйылған токсиндарҙан таҙарыныуын асыҡлағайны. Үҙ сиратында, токсиндар алдан телгә алынған матдәләрҙең кимәле күтәрелеүгә лә килтерә, был мейе туҡымаһын юғалтыуға булышлыҡ итә.

■ Һиндостан эксперттары дарыуҙар төрөлгән ҡаптарҙың хәүефһеҙлеге мәсьәләһен күтәрә. Пластик ҡап канцероген тәьҫиргә эйә, тигән һығымтаға килгәйне ғалимдар быға тиклем дә. Бында һүҙ башлыса һыу һәм ризыҡтар һалынған пластик һауыттар тураһында бара ине. Пластик шешәләрҙә дарыуҙар ҙа һатыла. Әлегә Һиндостандың медицина тикшеренеүҙәре буйынса советы был йүнәлештә эш башлаған. Пластик һәм полиэтилентерефталат (PET) һауыттарҙы быялаға алыштырыу кәрәклеге тураһында күптән тәҡдимдәр булғайны. Былтыр ғына Һиндостанда йүтәлгә ҡаршы дарыу һалынған һауыт составында ҡурғаш, һөрмә, диэтилгексилфталат һәм хром табылғайны. Белгестәр фекеренсә, пластик һәм полиэтилентерефталаттан яһалған медицина һауыттары бигерәк тә өлкән йәштәгеләр һәм балалар сәләмәтлегенә хәүефле. Уларҙан бүленеп сыҡҡан зарарлы матдәләр тән температураһын күтәрергә һәләтле. Әммә бының менән бөтөн белгестәр ҙә риза түгел. Анализ дауам итә.

■ Кешенең тән массаһы индексына физик әүҙемлек, ҡулланылған калориялар иҫәбе кеүек факторҙарҙан тыш, уның диңгеҙ кимәленән ниндәй бейеклектә йәшәүе лә йоғонто яһай. Был күрһәткес ни тиклем юғары, кешенең артыҡ ауырлыҡ йыйыу хәүефе лә түбәнерәк. Мэриленда университеты ғалимы Джеймс Восс Колорадо штатында йәшәүсе 400 мең кешене тикшергәндән һуң шундай һығымтаға килгән. Ғалимдар билдәләүенсә, был феномендың сәбәбе булып кешенең буйы, аппетиты, тәүлегенә нисә калорий яндырыуы өсөн яуап биреүсе гормон тора.

*СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ*

**Ҡасан ғына әле һыуҙы фильтр аша үткәреп эсеү тураһында уйлап та ҡарамай инек, хәҙер хатта ауылдарҙа ла һәр өйҙә тиерлек ябай ғына булһа ла фильтр күрергә мөмкин. Хатта, әгәр бөгөн һыуҙы таҙартып эсмәһәң, был бурысты организмың башҡарасаҡ, тип тә ебәрәләр. Шул уҡ ваҡытта организмда, ысынлап та, фильтрҙар бар һәм был ролде лимфалар үтәй. Ошо хаҡта баш ҡаланың 44-се поликлиникаһының юғары категориялы табип-онкологы Гөлнур НИҒМАНОВА менән һөйләшәбеҙ.**

# ОРГАНИЗМДЫҢ ФИЛЬТРЫ БАРМЫ?

**➔ Ни өсөн лимфаларҙы организмдың фильтры тип йөрөтәләр?**

- Беҙҙең организмда лимфа биҙҙәре бик күп һәм улар ҡан тамырҙарын, эске ағзаларҙы вирус агенттары, яман шеш күҙәнәктәре үтеп инеүҙән һаҡлаусы барьер булып тора. Йәғни ошо сит агенттарҙы үткәрмәүсе иләк. Ябай ғына итеп әйткәндә, әгәр сәйҙе бешереп, махсус иләк аша яһаһағыҙ, уның түпрәһе сынаяҡҡа төшмәйәсәк. Организмда ла шулай: зыянлы элементтарҙы лимфа тотоп ҡала һәм улар организмға сыҡмай. Ләкин сәй яһағанда иғтибар итһәгеҙ, ҡайһы берҙә түпрә сынаяҡҡа төшөп китә. Шуның кеүек, ҡайһы бер вирус агенттары, зыянлы күҙәнәктәр ҙә лимфаны үтеп, организмға сығыуы мөмкин. Был ваҡытта инде генерализация барлыҡҡа килә, йәғни инфекция организмға тарала башлай.



**➔ Ә лимфалар ниндәй осраҡта шешә?**

- Ғәҙәттә, инфекция процесы барғанда. Мәҫәлән, фурункул, карбункул, сикоз, йәғни эренле шешектәр сыҡҡанда урындағы лимфа биҙҙәренең ялҡынһыныуы күҙәтелә. Был осраҡта инде мотлаҡ хирургҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ул эренле шеште ярып, уны таҙарта һәм антибиотиктар тәғәйенләй. Дауалау барышында яйлап лимфа үҙенең элекке торошона ҡайта.

Башҡа осраҡтарҙа лимфа биҙҙәре йоғошло ауырыуҙар ваҡытында шешеүе мөмкин. Мәҫәлән, балаларҙа йыш осраған Эпштейн-Барр вирусы йәки инфекцион мононуклеоз сире. Бәләкәй балаларҙың лимфа туҡымалары камил түгел, шуға күрә муйын, умрау һөйәге (ключица), ҡултыҡ аҫты биҙҙәре ҙурая. Дауалағандан һуң да уларҙа һиҙелмәҫлек кенә төйөндәр ҡалыуы мөмкин. ВИЧ-инфекция, туберкулез сирлеләрҙә тотош лимфа биҙҙәре системаһының шешеүе күҙәтелә. Яман шеш менән ауырыусыларҙа лимфалар шешеүе әҙерәк. Шулай ҙа лимфалар буйынса уларҙы ла билдәләргә мөмкин. Мәҫәлән, пациентта ашҡаҙан яман шеше икән, умрау һөйәге йәки ҡултыҡ аҫтындағы лимфа ҙурая.

Ирҙәрҙең енес биҙе (простата), түллек биҙе (яичник) яман шеше ваҡытында аяҡ йыуаная йәки шешенә, сөнки саттағы лимфа биҙе ҙурая һәм тамырҙарҙы ҡыҫа. Ҡағиҙә булараҡ, был процестың генерализацияланыуы, йәғни яман шеш күҙәнәктәренең артабан үтеп, организмға лимфа шыйыҡсаһы аша артабан таралыуы хаҡында һөйләй. Ҡайһы бер осраҡта лимфа биҙҙәренең шешеүе лимфа туҡымаларының онкопатология билдәһе булып тора. Ул неходжкинск лимфомаһы тип аталып, лимфоманың барлыҡ төрҙәрен үҙ эсенә ала. Шулай уҡ Ходжкин лимфомаһы (лимфогранулематоз, Ходжкин сире, гранулёма яман шеше) ла бар. Был ваҡытта инде лимфа биҙҙәренең үҙендә яман шеш процесы бара. Ғөмүмән, лимфа биҙҙәре шешеүенең 80 процентында инфекция "ғәйепле" булһа, ҡалған осраҡтарҙа - онкопатология.

**➔ Һуңғы йылдарҙа, ваҡытында мөрәжәғәт иткәндә, хатта яман шеште лә дауалау мөмкин, тиҙәр. Тимәк, организм биргән сигналдарға иғтибарлы булғанда сирҙәрҙе иртә стадияла иҫкәртергә була. Ә бына теге йәки был лимфаның шешеүен тойғанда, тәү сиратта, ҡайһы табипҡа мөрәжәғәт итеү урынлы?**

- Иң тәүҙә терапевҡа, әлбиттә. Артабан инде ул хирургка, инфекционистҡа, онкологка йүнәлтмә бирәсәк. Анализдарға килгәндә, дөйөм анализға ҡан тапшырырға, флюорография, эске ағзаларҙың ҡыҫҡа тулҡынлы тикшереүе (УЗИ) үтергә кәрәк. Хатта ябай ғына лейкоформула анализы тапшырғанда ла эритроциттарҙың тупланыу тиҙлеге (СОЭ) буйынса ниндәйҙер процесты иҫкәртергә мөмкин. Шуның өсөн, организмығыҙҙа ниндәй генә үҙгәрештәр күрһәгеҙ ҙә, мотлаҡ табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

*НИӘТ ИТ!*

# МАҢЛАЙЫНДА ҺЫРҘАРМЫ?



**Өй шарттарында ла маңлайҙағы һырҙарҙан ҡотолорға була. Тик был кәңәштәрҙе онотҡанда бер түгел, ә даими ҡулланырға кәрәк.**

**1-се ысул.** Халыҡ медицинаһы маңлайҙағы һырҙарҙан ҡотолоу өсөн кокос майы ҡулланып, көн һайын массаж яһарға кәңәш итә. Усҡа ике балғалаҡ май ҡойоп, 5-15 минут буйы тирегә массаж яһарға. Һуңынан алоэ һутына манылған мамыҡ тампон менән һөртөп алырға.

**2-се ысул.** Папайа һәм ананасты тигеҙ күләмдә алырға, иҙергә һәм ике балғалаҡ бал өҫтәп, маңлай тиреһенә йоҡа ғына итеп һөртөргә. 15-25 минуттан йыуып алырға. Һуңынан боҙ менән ышҡырға.

**3-сө ысул.** 1 йомортҡа ағына дәрсен (корица) өҫтәп, маңлай тиреһенә һөртөргә, 15 минуттан еүеш мамыҡ менән һөртөп алырға.

**4-се ысул.** Уртаса ҙурлыҡтағы помидорҙы иҙеп, маңлай тиреһенә һыларға, 15 минуттан йылы һыу менән йыуырға.

**5-се ысул.** Туҡымаға кастор майы һөртөргә һәм маңлайға һалырға. 20 минут тоторға. Аҙнаһына 2 тапҡыр ҡабатларға.

**6-сы ысул.** 1 ҡалаҡ ҡоро сүпрәгә һөт өҫтәргә, 1 балғалаҡ бал ҡушырға, 25 минут йылы урында тоторға. Ошо ваҡыт үткәс, 1 йомортҡа һарыһы, 1 балғалаҡ зәйтүн майы өҫтәргә. Әҙер битлекте маңлай тиреһенә һыларға һәм 40 минут тоторға. 2 ай дауамында көн аша һәр кис яһарға.

Әйткәндәй, биологтар раҫлауынса, ике йыл рәттән һәм унан да күберәк ваҡыт эшләмәгән ир-егеттәр үҙ тиҫтерҙәренә ҡарағанда иртәрәк ҡартая. Быны ДНК молекулаһындағы теломерҙың - хромосоманың осондағы участканың ҡыҫҡарыуы дәлилләй, бер нисә йыл эшләмәүсе ир-егеттәрҙә ул күпкә ҡыҫҡағыраҡ. Ҡыҫҡарған теломер ҡартлыҡтың етеүе тураһында белдерә һәм организм ҡартайыуының сәбәбе булып тора. Лондондың Империя колледжы ғалимы Джессика Бакстон тикшеренеү барышында 1966 йылда тыуған ҡатын-ҡыҙҙар һәм ир-егеттәрҙең 5,5 мең ДНК өлгөһөн тикшергән. Өлгөләр 1993 йылдан башлап 6 йыл айырма менән алынған. Һөҙөмтәлә, күҙәнәк бүленеү өсөн кәрәкле теломерҙар ир-егеттәрҙән алынған өлгөләрҙә ҡыҫҡараҡ булып сыҡҡан. Был кешеләрҙең биографияһы менән танышҡандан һуң, уларҙың ғүмерҙәренең 2-3 йылын эшһеҙ үткәреүҙәре асыҡланған. "Һуңғы йылдарҙа ғалимдар оҙайлы эшһеҙлек һәм насар сәләмәтлек араһында бәйләнеште табырға тырыша ине. Беҙ быны күҙәнәк кимәлендә раҫланыҡ", - ти Бакстон. Иң ҡыҙығы, был яңылыҡ ҡатын-ҡыҙҙарға ҡағылмай. Ғалимдар хәҙер бының сәбәптәрен асыҡларға тырыша.

УЯН, УЙЛАН...

# ИЛ ӨҪТӨНӘ КИЛГӘН БӘЛӘГӘ ҠАРШЫ...

## ил менән бергәләп көрәшәйек!

**(Башы 3-сө биттә).**

Бигерәк тә балалар, үсмерҙәр алкоголизмы үсеүе нығыҡ һиҫкәндерә. Балаларыбыҙ - беҙҙең киләсәгебеҙ, өмөтөбөҙ. Ә теләһә ниндәй алкоголь менән ағыуланған организм сәләмәт тоҡом ҡалдыра аламы? 2013-2014 йылдарҙа Башҡортостанда алкоголь менән ағыуланып, 33 бала донъя менән хушлашҡан: 2013 йылда - 19, 2014 йылда - 14. Ҡот осҡос статистика! Йыл һайын республикала алкоголь һәм уның суррогаттары менән ағыуланып, 13-18 мең самаһы кеше үлә.

Донъя менән хушлашҡан ирҙәрҙең өҫтөн бер өлөшөнөң һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙың 15 процентының үлемендә төп сәбәпсе - алкоголизм. Әгәр был мәғлүмәттәрҙе һандарға күсерһәк, йыл һайын алкоголизмдан илдә 500000 тирәһе кеше үлә. Һуғыштарҙа, эпидемияларҙа ла был тиклем кеше һәләк булмай. Рәсәйҙә үҙ-үҙҙәренә ҡул һалыуҙың 62,1 проценты, үлтереүҙәрҙең - 72,2, панкреатиттан үлемдәрҙең - 60, цирроздан үлемдәрҙең - 67,7, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән донъя менән хушлашыуҙың 23,3 проценты алкоголде саманан тыш ҡулланыуға бәйле.

...Бынан 8 йыл самаһы элек булды был хәл. Төшкө аштан һуң эшкә китеп барам. Күперҙе сыҡҡас, бер кешенең машина туҡтатмаҡ булып ҡул күтәргәне күҙгә ташланды. Үҙенең таланты менән республика киммәлендә абруй яулап, тик данына көсө етмәй, урам берәҙәгенә әйләнеп барған замандашым икән. Ул саҡтағы мөхәрриремдең, шул ниндәй уйҙар менән йөшөп ята икән, күңеленә юл ярып ҡара әле, тигән һүҙҙәре ҡылт итеп иҫкә төштө лә, был форсатты файҙаланайым әле, тип, машинамды туҡтаттым. Йүгереп килеп минең янға инеп ултырҙы. Тик... ҡайҙан ултыртҡан көнгә төштөм... Ниндәй генә еҫтәр килеп бәрелмәне танауға... Ниндәй кеше ине бит, ниндәй көнгә төшкән, тип уйланым да: "Гәзиз (исеме үҙгәртеп алынды), нинә был хәлгә төшөп йөрөйһөң инде?" - тип әйтеп ҡуйҙым. "Ниндәй хәлгә төшкәнмен, хәлем һәйбәт ул минең", - тигән яуап ишетелде. Өҫтөндә таушалып бөткән иҫке, бысраҡ футболка, тубыҡтары сығып, ҡаҡашҡан осһоҙло ғына трико. Ә бит ҡасандыр саң ҡунмаҫ костюм-салбарҙар, йылтырап торған туфлиҙар кейеп, ҡиммәтле хушбуйҙар аңҡытып ҡына йөрөй торғайны. Мөхәрриремдең әйткәнен юллап, әңгәмә ҡора башланым. Һөйләшеүгә әүәлгесә әүәҫ кенә. Тик бер нәмә лә булмаған һымаҡ һөйләшә. "Башспирт" магазины тирәһенә етеп килгәндә юлдашым ҡапыл туҡтатыуҙы үтенде һәм 20 һум аҡса һораны. Һап-һау, айыу тотоп менмәле ирегеттең хәйер һорауы сәмемә тейҙе. "Әгәр аслыҡтан һораһаң, бирер инем, һин бит эсергә һорайһың. Бирмәйем бер тин дә эске өсөн, бар, төш тиҙерәк машинанан. Юғал күҙемдән", - тип ҡыҫҡырғанымды һиҙмәй ҙә ҡалдым. Күндәм генә төштө. Салонда еҫе генә тороп ҡалды. Аҙна-ун көн үттеме-юҡмы, уның үлем хәбәре ишетелде. Сәбәбе лә, диагнозы ла билдәле...

Эйе, Хоҙай был әҙәм балаһына күпте биргән ине. Тик нәфсеһен тыя алманы, ихтыяр көсө булманы. Әҙәм балаһы йыш ҡына барҙың ҡәҙерен белмәй шул, юғалтҡас ҡына аңлай. Хәйер, аңламай яҡты донъя менән хушлашыусылар ҙа осрай...

Эксперттар баһалауынса, ялған араҡы Рәсәй баҙарының өҫтән ике өлөшөн тиерлек тәшкил итә. "Ялған араҡы етештереүселәр үҙҙәрен бик иркен тоя, ә республиканан ситтә етештерелгән спиртлы эсемлекте килтереүселәр халыҡты эскелек һаҙлығына батыра. Ауыл ерендә ҡайҙа ялған араҡы һатылғанын белмәйҙәрме ни? Һәр ауылда тиерлек шундай нөктәләр бар. Барыһы ла белә, әммә өндәшмәйҙәр. Берәүҙәр ҡурҡа, икенселәр аҡса эшләй", - тигәйне бер кәңәшмәлә республика Башлығы Рөстәм Хәмитов. Эйе, ҡурҡыуҙан бигерәк, битарафлыҡ, вайымһыҙлыҡ баҫҡан бөгөн халыҡты. Күрше күршенең нимә ҡыланғанын белмәгән заманда йәшәйбеҙ. Икенсенән, бер-береһе менән тәмһеҙләшкеләре лә килмәй. Ауылдарҙан ярҙам һорап, битараф булмаған кешеләрҙән редакцияға хаттар килгеләй килеүгә. Бына минең алда шундай хаттарҙың сираттағыһы:

"Беҙ һеҙгә үҙебеҙҙең үтенесебеҙҙе белдермәксе булдыҡ. Исем-шәрифтәребеҙҙе ҡуйып тормайбыҙ. Сөнки үсләшеп, донъяларыбыҙға ут төртөп китеүҙәре бар. Ауыл самогонсылары үҙәккә үткәрҙе бит. Былай дауам итһә, бер 5-6 йылдан ауылдың ир-аттары үлеп бөтәсәк. 23 февралдә эсә башлаған ирҙәр бөгөн булһа айныға алмай (март аҙағы). Сөнки бер магазинда фанфурик 40 һум, икенселәрендә 30 һум. Уларҙа, ғөмүмән, спирт менән һыра әҙәлгәне лә юҡ. Өҫтәүенә, самогонсылар көнө-төнө 150 һумға самогон һаталар. Ауылда һуңғы 10 йыл эсәндә 23 кеше эскелек арҡаһында үлде. Уларҙың өсәүһе ҡатын-ҡыҙ, ҡалғандары ирҙәр. Хәйер, эскән ирҙәре үлгәнгә артыҡ ҡайғырмай хәҙер ҡатын-ҡыҙҙар. Сөнки хөкүмәт аҡса бирә".

Мине был хаттағы йәнә "айный алмай йөрөйҙәр" тигән юлдар һиҫкәндерҙе. Ысынлап та, ғәҙәттә, эскән кеше йоҡлап уянғас та айныға, ә һуңғы ваҡытта теләһә нимә эскән кешеләр айҙар буйы айный алмай. Тимәк, алкоголгә бәйлелек тыуҙыра торған берәй матдә ҡушыла инде, тигән уй килә башҡа.

Эш юҡ, шуға эсәбеҙ, ти бәғзеләр. Ғаиләләренә ашарға аҡса тапмаһалар ҙа, эсергә ҡайҙандыр табалар бит әле. Уны бит аҡсаһыҙ бирмәйҙәр. Уйлаһаң, уйылып китмәле, яҙһаң, ярылып ятмалы хәлдәр.

Тәнзилә Дәүләтбирҙинаның яҙғандарын тағы уҡыйым. Уҡыйым да, сараһыҙлыҡтан, тағы уйға ҡалам. Йөрәк сәнсеп-сәнсеп ҡуя. Сөнки был бәлә минең яҡындарымды ла, хөрмәтле гәзит уҡыусы, һинең алыҫ йәки яҡын туғандарыңды ла урап үтмәне, улар араһында ла бөгөн хәмер ҡоло, замана афәте ҡорбаны булып йөрөүселәр бар, ҡыҙғаныусҡа ҡаршы. Әлеңән-әле, шул-шул үлеп ҡалған ти, тигән хәбәр ишетелә. Һәм... шыбырлабыраҡ шуны өҫтәйҙәр: эсеп йөрөгән булған... Рәсми статистика ла ауыҙыҙ. Ул көн һайын тигәндәй үҙгәреп тора. Бына ошо юлдарҙы яҙған ваҡытта йәнә бер шомло хәбәр килде - ҡорбандар тағы ла берәүгә арттан...

Ил өҫтөнә килгән бәлә был. Шуға ил күтәрелергә тейештер. Илебеҙ халҡының Бөйөк Ватан һуғышындағы Еңеүенең 72 йыллығын билдәләнек быйыл. Шөкөр, беҙ ул һуғыш афәттәрен күрмәнек, киләсәктә лә күрергә яҙмаһын. Бөгөнгө ир-аттарҙың бәғзеһе үҙ теләктәре менән хәмергә әсир төшкән. Килер быуындарға ошо алкоголь тигән яуыз дошманды тар-мар итеүҙең 72 йыллығын байрам итергә яҙыр микән? Яҙған хәлдә лә, бөгөнгө "яугирҙәр" араһынан ул ваҡиғала "ветеран" булып ҡатнашыусылар булыры ғына икеле...

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА,**
**Бөрйән районы**
**"Таң" гәзите хәбәрсеһе.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Булғандан ҡыуаныс табығыҙ

Бик йыш иҫке, сатнаған тәрилкәләргә һалып ашайбыҙ, ә яңыларын һәм матурҙарын сервантҡа йәшерәбеҙ. Ни өсөн? Вафат булғандан һуң улар балаларыбыҙға ҡалһын өсөнмө? Матур әйберҙәрең бар икән, уларҙы үҙең ватырға һәм туҙҙырырға тейешһең! Юҡҡа ғына: "Үҙеңде иркәләт, тәнеңде ярат, таҙа йәшә һәм тормош матур, һоҡланғыс буласаҡ", - тимәгәндәр. Был тормошта барыһы ла бәйле. Атлауың - һөйләшеүеңә йоғонто яһай. Кейемең - хәл-торошоңа. Ни тиклем үҙең тураһында нығыраҡ хәстәрлек күрһәң, башҡаларға ла шул тиклем хәстәрлекле буласаҡһың. Мотлаҡ үҙеңде иркәләтергә кәрәк. Әммә үҙеңдең теләктәреңде үтәү менән алдыңа ҡуйған маҡсаттарыңа өлгәшеү араһында ниндәй ураҡлыҡ бар. Туранан-тура! Үҙеңде бай кеше итеп тойоп ҡына байлыҡ тартып килтерергә мөмкин. "Бына уңыш ҡаҙанайым да, бахырҙарса йәшәүҙән туҡтайым", - тип уйлай күптәр. Юҡ, уңыш ҡаҙаныр өсөн хәҙер үк шулай йәшәй башларға, уны бөгөн үк тойорға кәрәк. Ҡыҫҡаһы, байлыҡ аҡса менән баһаланмай, ул - тормош стиле.

### Һеҙҙең менән нимә булыуы түгел, уға мөнәсәбәтегеҙ мөһим

Тарих бәйән итеүенсә, Урта быуаттарҙа ҡурғаштан алтын табыусыларҙы алхимиктар тип атағандар. Беҙҙең барыбыҙға ла, хәл-ваҡиғаларҙың тышҡы сифаттарына иғтибар итмәйенсә, уның төбөнә күҙ һалыу өсөн алхимик булырға кәрәк. Тормошта теләһә ниндәй кире хәл-торошто - самолетҡа һуңлау булһынмы ул, автомобиль һәләкәтеме, талашып айырылышыумы, тупаҫ официант менән һүҙгә килешеүме - үзебеҙҙең файҙаға бороу зарур. Быным ыңғай яҡтары бер нисә:

*Тормош һиңә биргән бөтөн нәмә өсөн нығыраҡ рәхмәтле була башлайһың.

*Тынысыраҡ йәшәйһен.

*Хәҙер тормош үҙе һине тәғәйенләнеш буйынса алып бара, уны ватыҡ автобус кеүек этергә кәрәкмәй!

Әҙәпһеҙҙәр: "Барыһы ла ябай ғына. Мин яҙмыш ҡулында уйынсыҡ булғым килмәй, тормошомдо үҙем ҡорғом килә", - тиер. Һәм хаталаныр. Сөнки тормош менән йәнең тыныс булғанда ғына идара итергә мөмкин. Ә йән тынысылығына тормош беҙгә аҙым һайын ырғытып торған сюрприздарҙы тыныс ҡабул итеп кенә өлгәшергә була.

### Тормошоңда нимәләр улай түгел икәненә ышанһаң, һәләкәттәр туҡтамаясаҡ

Әле генә тормош иптәшегеҙ менән айырылышып, донъя өҫтөгөҙгә ауғандаймы? Шуға ышанаһығыҙ икән, шулай буласаҡ та. Йәки илле йәшегеҙ тулып килә, ә һеҙ ҡыҫҡартыуға эләктегеҙ һәм тормошоғоҙҙоң иң яҡшы йылдары артта ҡалды тип уйлайһығыҙмы? Кире көйләнеш менән алдағы тормошоғоҙҙо яҡшыраҡ итеүгә ынтылышығыҙ булмаясаҡ. Тормошта тик кире яҡтарҙы ғына күреп, автоматик рәүештә башҡа бәләләрҙе лә тартып килтерәһегеҙ. Тормошоғоҙҙағы ваҡиғалар һеҙҙең өмөтөгөҙгә тап килеп тормошҡа ашасаҡ. Хәл-торошҡа мөнәсәбәтегеҙҙе үҙгәртеп, бөтөнләй башҡа кешеләрҙе һәм бөтөнләй башҡа мөмкинлектәрҙе тартып килтерәсәкһегеҙ. Ҡыҫҡаһы: тормошобоҙҙағы һәләкәттәр - улар һәләкәт түгел, ә беҙҙең уға ҡарата булған мөнәсәбәтебеҙҙең үҙгәреүен теләгән хәл-торош ҡына.

**Эндрю Мэтьюз**

ҠОЛАҠ ҺАЛ!

# ҮҘЕҢДЕ ЙӘЛЛӘТМӘ...



**Уңыштарҙы ла, уңышһыҙлыктарҙы ла кеше үҙе булдыра. Александр Левитастың уңышһыҙ кешеләрҙең ете гәҙәте тураһындағы ошо фекерҙәрен уҡы ла, уйлан...**

● Уңышһыҙ кеше үҙен гел йәлләй. Йә төпкөлдә йәшәй, йә ир булып тыумаған, йә белемде яңылыш һайлаған, йә уны ата-әсәһе яратмай, йә кәүҙәһе һомғол түгел... Ҡыҫҡаһы, үҙен йәлләү өсөн уға һәр ваҡыт сәбәп бар һәм ул уңышһыҙ булыуының сәбәбе тап шунда икәненә ышана.

● Уңышһыҙ кеше бер туҡтауһыҙ мыжый һәм зарлана. Уның тормошонда барыһы ла насар, яҡты киләсәккә лә өмөт юҡ.

● Ул үҙен башҡалар менән сағыштыра. Үҙенде үҙең менән генә сағыштырырға мөмкин, мәҫәлән, былтырғыға ҡарағанда бөгөнгө һин барыбер башҡараҡ.

● Ул аҡсаны табыуға ҡарағанда күберәк тотона. Сығымдарын иҫәпләмәй, кредитка аҡса ала, туғандар, дуҫтарҙан бер туҡтауһыҙ аҡса теләнселәй, иренең йәки ҡатынының елкәһендә ултыра.

● Һаран. Ул магазиндарҙа ташлама эҙләй, осһоҙораҡ варианттарҙы һайлай. Былдай кешенең бизнесы булған хәлдә лә, һаранлыҡ уға үҫешергә мөмкинлек бирмәйәсәк.

● Ул тиҙ генә файҙа алырға теләй. Киләсәктә яҡшы булһын өсөн бөгөн тырыша белмәй.

● Үҙенә оҡшамаған эш менән була. Әлбиттә, беҙгә күп нәмә оҡшамай, мәҫәлән, һәр көн иртә тороу күптәргә оҡшамай. Әммә уңышһыҙ кеше глобаль кимәлдә үҙенә оҡшамаған нәмәләр менән була - яратмаған эшендә эшләй, үҙенә оҡшамаған өлкәлә эшҡыуарлыҡ менән булыша. Шуға ла башҡарған эшенән шатлыҡ та кисермәй.

● Ул үҙе ваҡытының ҡәҙерен белмәй.



## 24 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 03.55 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Давай поженимся!" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вангелия". 5-я и 6-я серии. Драматический сериал (12+).
23.35 "Версаль. Новый сезон". 1-я и 2-я серии. Исторический сериал (18+).
01.45, 03.05 "Ослепленный желаниями". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
10.00 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "По горячим следам". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Нелюдь". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Преступление". 1-4-я серии. Детективный сериал (16+).
00.50 "Поиски улик". 1-я и 2-я серии. Детективный сериал (16+).
02.35 "Наследники". Криминальный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Одиссея". Сериал (16+).**
**11.00 Новости недели.**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00, 23.30 "Автограф" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Наши годы" (12+).**
**18.15 "Орнамент".**
**19.15 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Бай" (12+).**
**20.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**22.00 Первые открытые юношеские игры боевых искусств ПФО (6+).**
**23.00 "Бай баҡса" (12+).**
**24.00 "Влюбись в меня, если осмелишься". Худ. фильм (12+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 25 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 03.45 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
21.30 "Время".
21.30 "Вангелия". 7-я и 8-я серии. Драматический сериал (16+).
23.35 "Версаль. Новый сезон". 3-я и 4-я серии. Исторический сериал (18+).
01.40, 03.05 "Большая белая надежда". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
10.00 "О самом главном" (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "По горячим следам". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Четыре женщины". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести. Местное время".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Преступление". 5-8-я серии. Детективный сериал (12+).
00.50 "Поиски улик". 3-я и 4-я серии (12+).
02.35 "Наследники". Криминальный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Одиссея". Сериал (16+).**
**11.00 "Следопыт" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму" (6+).**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ".**
**15.45 "Бауырһаҡ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Дознание" (16+).**
**18.15 "Орнамент".**
**19.15 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Нэзер" (12+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Слепота". Худ. фильм (16+).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 26 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.05 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вангелия". 9-я и 10-я серии. Драматический сериал (12+).
23.35 "Версаль". 5-я и 6-я серии (18+).
01.40, 03.05 "Вождь краснокожих и другие". Худ. фильм.

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
10.00 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "По горячим следам". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Родительский день". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Преступление". Детективный сериал (12+).
00.50 "Поиски улик". 5-я и 6-я серии (12+).
02.35 "Наследники". Криминальный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Одиссея". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Тәмле" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**17.15 "Дорожный патруль" (16+).**
**17.45 "Олег Меньшиков. Время, когда ты можешь все!" (12+).**
**19.15 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Минуты поэзии" (12+).**
**20.30 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Ангел-А". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.15 "Бәхетнамә" (12+).**

## 27 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.10, 04.05 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15, 17.00 "Время покажет" (16+).
15.00 "Новости" (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.405 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Вангелия". 11-я и 12-я, заключительная, серии. Драматический сериал (12+).
23.30 "Версаль. Новый сезон". 7-я и 8-я серии. Исторический сериал (18+).
01.35, 03.05 "Смертельное падение". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "По горячим следам". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Реликт". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир" (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Преступление". Детективный сериал (16+).
00.50 "Поиски улик". 7-я и 8-я серии (12+).
02.35 "Наследники". Криминальный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Одиссея". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета - Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.00 "Бай баҡса" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45, 19.00, 21.00 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Неизвестный Башкортостан" (12+0.**
**15.15 "ДОСААФ: испытано на себе" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Фанташ" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.45 "Клио" (12+).**
**19.15 "Птица счастья". Сериал (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк".**
**20.15 "Башҡорттар" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Вдребезги". Худ. фильм (16+).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 28 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.25 "Модный приговор".
12.15 "Наедине со всеми" (16+).
13.20, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "На самом деле" (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.35 "Победитель".
23.00 "Версаль". 9-я и 10-я серии. Исторический сериал (18+).
01.10 "Библия". Историческая драма (12+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
11.55 "По горячим следам". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.40 "Вести-Башкортостан".
14.55 "Тайны следствия". "Панацея". Детективный сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.20 "Вести-Башкортостан".
17.40 "Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
18.50 "60 минут". Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести".
20.45 "Вести-Башкортостан".
21.00 "Преступление". 17-20-я, заключительные серии. Детективный сериал (16+).
00.50 "Поиски улик". 7-я и 8-я серии (12+).
02.35 "Наследники". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "В.С.Возлюбленная солдата" (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Н. Гаитбаев. "Сумерки" (12+).**
**13.30 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.00 "Хазина" (6+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-саға" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Перекличка" (6+).**
**16.15 "Преград.net" (6+).**
**16.45 "Путешествие в Булгар" (12+).**
**17.45 "Современник" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Алтын тирмә".**
**19.45 "Сәңгелдәк".**
**20.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Моя планета - Башкортостан" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Песня года" (12+).**
**23.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**24.00 "Право на убийство". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.30 В. Бурнаш. "Кадриль" (12+).**

## 29 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Россия от края до края".
06.00 Новости.
06.45 "Трембита". Худ. фильм.
08.30 "Смешарики. Новые приключения".
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости.
10.15 "Айвазовский. На гребне волны" (12+).
11.20 "Смак" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Идеальный ремонт".
13.15 "Трын-трава". Комедия.
15.00, 05.05 "Наедине со всеми" (16+).
16.55 "Ванга" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.20 "МаксимМаксим" (16+).
19.20 "Кто хочет стать миллионером?"
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "КВН". Премьер-лига (16+).
00.30 "Президент Линкольн: охотник на вампиров". Триллер (16+).
02.30 "Верные ходы". Худ. фильм (16+).
04.15 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.00 "Без следа". Сериал (12+).
07.10 "Живые истории".
08.00 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.20 "Сто к одному". Телеигра.
10.10 "Пятеро на одного". Развлекательно-интеллектуальное шоу.
11.00 "Вести".
11.30 "Вести-Башкортостан".
11.40, 14.20 "У реки два берега". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
14.00, 20.00 "Вести".
20.50 "Неваляшка". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
00.45 "Танцуют все!". Развлекательное шоу.
02.40 "Марш Турецкого-3". Сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30, 20.15, 22.30, 02.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Астерикс против Цезаря" (6+).**
**09.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**10.00 "У дачи" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "Клио" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**13.00 "Бай баҡса" (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2017" (12+).**
**17.00 "Вечный зов родной земли" (12+).**
**17.45 Футбол. Чемпионат России среди клубов Премьер-лиги. ФК "Урал" (Екатеринбург) - ФК "Уфа" (Уфа).**
**20.45 "Замандаш" (6+).**
**21.00 "Полезные новости" (12+).**
**21.15 "Неизвестный Башкортостан" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2017" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Желтоухий". Худ. фильм (16+).**

## 30 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Командир счастливой "Щуки". Худ. фильм (12+).
06.00 Новости.
08.00 "Цари океанов" (12+).
09.00 День Военно-морского флота РФ. Праздничный канал.
12.00 Торжественный парад ко Дню Военно-морского флота РФ. По окончании парада - Новости.
13.30 "Битва за Севастополь". 4 серии. Военно-драматический сериал (12+).
17.15, 18.15 Юбилейный концерт Николая Расторгуева.
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.20, 21.30 "Три аккорда" (16+).
21.00 "Время".
22.00 "Клуб Веселых и Находчивых". Летний кубок во Владивостоке (16+).
00.30 "Немножко женаты". Комедия (16+).
02.50 "Три балбеса". Худ. фильм (12+).
04.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Без следа". Сериал (12+).
07.00 "Мультутро". "Маша и Медведь".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.40 "Смехопанорама Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта". Музыкальная программа.
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
11.20 "Вести - Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
13.00, 14.20 "Пенелопа". 8 серий. Мелодраматический сериал (12+).
14.00 "Вести".
20.00 "Вести". Итоговая программа.
21.45 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.15 "Эдита Пьеха. Русский акцент" (12+).
01.15 "Девочка". Драма (16+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Мультипотам" (0+).**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай".**
**10.00 "Физра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Байтус" (6+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар".**
**11.15 "Два соседа" (12+).**
**11.45 "Алтын тирмә".**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (6+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.00 "Млечный путь" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00 "Приключения Бэйли: потерянный щенок". Худ. фильм (12+).**
**18.30 "Дознание" (16+).**
**18.55 Хоккей. Кубок ХК "Салават Юлаев". "Мамонты Югры" (Ханты-Мансийск) - "Толпар" (Уфа).**
**21.30 Новости недели.**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Вечер.com" (12+).**
**23.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**00.15 "Страна приливов". Худ. фильм (18+).**
**02.30 М.Горький. "Дачники" (12+).**

✓ Аҡ әйберҙәрҙе күп йыуһаң, улар һарғая башлай. Шуға ла уларҙы йыуған саҡта кер порошогына нашатыр спирты өҫтәргә була. Бер нисә тапҡыр ошолай йыуғандан һуң иҫке әйберҙәр ҙә яңырып ҡалыр.



## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

### Әрләмә шайтан таяҡты - дауалай ул аяҡты

Шайтан таяғын һис һанға һуҡмайҙар, ә ул һыҙлаған тубыҡты дауалай. Бер нисә төп шайтан таяғының ер өҫтөндәге өлөшөн киҫеп алырға, алдан әҙерләнгән тоҡҡамы, тоҡсайғамы турап тултырырға һәм ялғашҡа һалырға. Шартлап ҡайнап торған һыуҙы өҫтөнә ҡойорға ла ябырға. Бешермәслек булғас, тубыкланып ултырырға. Мунса һайын бешереп йыуынһаң да файҙаһы тейә.

### Ҡан таҙалау

Унын бик ябай ысулдары бар, шуларҙы һеҙгә тәҡдим итәм: 1) ике лимон һәм ике әфлисунды иҙеп, ике ҡалаҡ бал ҡушып болғатырға. Бер тәүлек бүлмә температураһында тотҡас, һыуытҡысҡа ҡуйырға. Сәй эскән һайын 1-2 балғалаҡ ҡабырға. Был ысул ҡан баҫымын рәтләй, инсульт, инфарктты киҫәтә, уны булдырмаҫҡа ярҙам итә; 2) ярты литр ҡайнаған һөткә биш шаҡмаҡ шәкәр, ярты лимон һутын ҡушырға һәм әҙерәк әсегәс, эсергә. Дауаланған саҡта балыҡ, ит, йомортҡа ашамайынса, һөт менән генә туҡланып торорғоҙ. Эсмәгеҙ, тартмағыҙ, үләндәр менән генә дауаланығыҙ.

### Аҡ ҡайын, шифалы ҡайын

Күп кешеләә тимерәү юҡтан ғына килеп сыға. Былдай саҡта: 1) ҡайынды ботаҡ-япраҡтары менән бергә ҡайнатып сығарырға һәм шунда ҡулдарҙы 20-30 минут тығып торорға, һыу ни тиклем эҫе булһа, шунса шифалы. Ҡулдарҙы был һыуҙан алғас, йыумаҫҡа, шул көйө кипһендәр. Йыбанмайынса, көнөнә бер нисә тапҡыр эшләргә була. Ҡайын һыуы менән тотош йыуынһаң да файҙалы; 2) кәбеҫтә япрағын алма һеркәһендә тотоп, һуты сыҡҡансы йомшартырға һәм тимерәүле урынға ябып бәйләргә; 3) ололар өсөн: бер стакан балан һутына йөҙ грамм бал һәм бер литр һалҡын һыу ҡушып болғарға ла, көнөнә ярты стакан эсергә.

### Һалҡын тейеп, баш ауырыһа

Ни ғәжәп, хәҙер бөтә әҙәм йыл буйы яланбаш йөрөй. Башты ҡояш яндыра, һалҡын тундыра. Һалҡын тейгәндә баш зәңкеп-зәңкеп ауырта, ул саҡта: 1) лимон менән маңлай һәм сикәләрҙе ышҡырға, әгәр температура булһа, лимонды йылытырға; 2) дәрсенде (корица) ҡайнар һыу менән болғап, әҙ генә шәкәр ҡушып эсергә. Башың түҙеп торғоһоҙ итеп ауыртһа, дәрсенде ҡалаҡ осо менән түгел, күберәк ҡушып болғарға кәрәк.

### Тештәр һыҙлаһа

Ҡышҡа ҡарағанда, йәй тештәр йыш һәм ныгыраҡ һыҙлаусан. Ул саҡта: 1) имән ҡайырыһының һәм юл япрағының төнәтмәһе менән ауыҙҙы сайҡарға; 2) соҡорланған теш һыҙлаһа, уға атҡолаҡ үләнен өҙөп ҡуйырға; 3) ярты һуғанды нәҙек кенә итеп киҫкеләп, марляға төрөп, һыҙлаған тешкә ҡаршы яҡ ҡолаҡ тишегенә тығырға.

### Яман шештән ҡурҡһаң...

● Кәбеҫтә менән шалҡан яман шештең үҫеүен туҡтата. Үкенес, ниңәләр хәҙер шалҡан сәсмәйбеҙ. ● Томат - ул ир-ат йәшелсәһе: простата яман шешенән һаҡлай, тик ир-ат томатты ашай һалып бармай. ● Яңы һығылған сөгөлдөр һуты ашҡаҙан, эсәк, бауыр, бөйөрҙәге яман шеште иҫкәртә, йүнәлтә. ● Яман шештән һаҡланғығыҙ килһә, балыҡ, бигерәк тә диңгеҙ балығын ашағыҙ, улар ҡатын-ҡыҙҙы күкрәктәге яман шештән һаҡлай. ● Туң майҙы күп ашау яман шешкә килтереүе ихтимал. ● Бер үк майҙа аҙыҡты бер нисә рәт ҡыҙҙырмағыҙ һәм бешермәгеҙ: унда барлыҡҡа килгән ыҫмала яман шеш булдыра. ● Күберәк майһыҙ һөт ризығы, майһыҙ эремсек ҡулланығыҙ. ● Күгәргән ризыҡтарҙы ташлағыҙ, таҙа ерен дә киҫеп алмағыҙ, сөнки күгәргән аҙыҡ унға яҡын төрлө ағыу сығара һәм бауырҙа яман шеш тыуҙыра.

### Тәмәкеселәргә кәңәш

Урамға сыҡһаң да, телевизор тоҡандырһаң да, ир-ат та, ҡатын-ҡыҙ ҙа тәмәке борхота. Берәйһе кәңәшемә ҡолаҡ һалмаҫмы, тип яҙам. Сей муйыл ботағынан "шырпы"лар яһап алырға һәм тартҡы килһә, шуны сәйнәргә генә кәрәк. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң тартыуҙы ташлайһың да ҡуяһың.

### Аяҡ-ҡул һыҙлаһа

Быяла банкаға бәпембә сәскәһен, бөрөләрен тултырып, өҫтөнә спирт ҡояһың һәм 30 көнгә ултыртып ҡуяһың. Шунан ошо төнәтмә менән һыҙлаған урыныңды ыуаһың. Бик уңайлы ысул, төнәтмә боҙолмай ҙа, ә бәпембә көҙгә тиклем сәскә ата.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

*ИҪКӘРТӘБЕҘ!*

# СЕРӘКӘЙҘӘН ҺАҠЛАНМАҺАҢ ДА... баланды һаҡла!



**Йыл һайын йәйгеһен дауаханаларға тәҙрәнән ҡолап төшкән балалар килтерелә. Улар себен-серәкәйҙән һаҡлаусы сеткалар ҡуйылған тәҙрәләрҙән ҡолай.**

Ни өсөн былдай сеткалар хәүефле? Беренсенән, улар мотлаҡ сертификация үтмәй, тимәк, технологияларҙы боҙоп эшләнеүе лә ихтимал. Икенсенән, хатта иң ныҡлы сетка ла ауырлығы 10-15 килолыҡ баланы күтәрә алмай.

Москит сеткаһын дөрөҫ нығытыу зарур. Ул 4 урындан нығытылырға тейеш. Москит сеткаһы рамлы, рулонлы һәм асылмалы була. Рамлыһының ғына каркасы ҡаты. Бынан тыш, сеткаларҙы миҙгел үткәндән һуң алып, йыуырға һәм һаҡлауға ҡуйырға кәрәк. Түбән температура һөҙөмтәһендә пластик муртая, саҡ ҡына баҫым булғанда ла һына, тимәк, хәүеф арта. Бала ауырлығын күтәреү тураһында әйтеп тә тороу кәрәкмәй.

Бик йыш тәҙрәнән 1 йәштән (атлай башлаған сағы) 7 йәшкә тиклемге балалар ҡолай. Шуға күрә, өйҙә бәләкәй балалар булғанда, тәҙрәләрҙе бикләргә йәки вертикаль елләтеүҙе генә ҡулланырға кәрәк. Баланың хәүефһеҙлеген һаҡлау өсөн тәҙрәгә блокираторҙар ҡуйыу яҡшы, бала тәҙрәне үҙаллы аса алмаясаҡ.

Әгәр тәҙрә бала уйнаған бүлмәлә икән, уны бер ваҡытта ла шар асырға, баланы аҙ ғына ваҡытҡа ла яңғыҙ ҡалдырырға ярамай. Шулай уҡ, уға тәҙрә тупһаһына үҙаллы менергә, унда уйнарға, тәҙрә тупһаһынан тышты ҡүҙәтергә рөхсәт итмәгеҙ. Балаға москит сеткаһының уны бер нисек тә ҡолауҙан һаҡламауын, уға таянырға ярамағанлығын аңлатығыҙ.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Июль (Зөлҡәғиҙә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (1) дүшәмбе | 3:44 | 5:14 | 13:30 | 19:59 | 21:29 | 22:59 |
| 25 (2) шишәмбе | 3:46 | 5:16 | 13:30 | 19:58 | 21:28 | 22:58 |
| 26 (3) шаршамбы | 3:48 | 5:18 | 13:30 | 19:56 | 21:26 | 22:56 |
| 27 (4) кесе йома | 3:49 | 5:19 | 13:30 | 19:54 | 21:24 | 22:54 |
| 28 (5) йома | 3:51 | 5:21 | 13:30 | 19:53 | 21:23 | 22:53 |
| 29 (6) шәмбе | 3:53 | 5:23 | 13:30 | 19:51 | 21:21 | 22:51 |
| 30 (7) йәкшәмбе | 3:54 | 5:24 | 13:30 | 19:49 | 21:19 | 22:49 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

Сибай концерт-театр берекмәһе коллективы БР-ҙың атҡаҙанған артисы Марс Салауат улы Итбаевтың һөйөклө әсәһе

**ИТБАЕВА Фәүзиә Абдулла ҡыҙының**

вафат булып ҡалыуы сәбәпле, мәрхүмәнең тормош иптәшенең, балаларының һәм туғандарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлаша. Хоҙай барығыҙға ла сабырлыҡ бирһен!

* * *

Ер йөҙөндәге иң изге, иң аҡ күңелле Кеше, иренә иң аҡыллы, иң сабыр ҡатын, балаларына иң яҡшы әсәй булған

**Фәүзиә Абдулла ҡыҙы Итбаева**

баҡыйлыҡҡа күсте. Иренең һәм улдарының, башҡа яҡындарының ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

**Ғаилә дуҫтары.**

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп китҡән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын мәрхүмәнең.**

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

"Киске Өфө" гәзите редакцияһы коллективы ағзалары демография мәсьәләләрен хәл итеүҙә шулай уҡ туранан-тура ҡатнаша, тип ғорурлыҡ менән белдерәбеҙ.

Ошо көндәрҙә генә журналисыбыҙ **Гөлнәзирә Зәйнуллина** ике ҡыҙына иш итеп, **өсөнсөгә ул тыуҙырҙы.**

Баш бухгалтерыбыҙ **Регина Ғәләүетдинованың** улына иш булып, **ҡыҙы тыуҙы.**

Компьютерсы-программалаусы **Гүзәл Сәғитова** иһә барыһынан да уҙҙырҙы: ике улына, бер ҡыҙына иш итеп, **дүртенсегә тағы бер ул тапты.**

Эштә лә һынатмаған, үҙҙәренең донъялағы төп ҡатын-ҡыҙ бурысын аткарыуҙа ла уңғанлыҡ, фиҙаҡәрлек күрһәткән ҡыҙҙарыбыҙҙы һәм уларҙың тормош иптәштәрен - кейәүҙәребеҙҙе ҡотлайбыҙ. Ғаилә бәхетенә төрөнөп, балаларығыҙҙы үҙегеҙгә лайыҡлы алмаш итеп үҫтереп, атай-әсәйҙәрегеҙҙе, туғандарығыҙҙы ҡыуандырып йәшәгеҙ, тағы ла ишәйегеҙ, тип теләйбеҙ.

* * *

Июль айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Әбйәлил районы** Атауҙы ауылынан Мәҙинә Ғәбитова, Аҫҡар ауылынан Нәгимә Илһамова, Ишкол ауылынан Гөлсәсәк Вәлиева, Байым ауылынан Урал Яҡупов, **Аҫҡын районы** Урмияҙ ауылынан Маргарита Әсхәтова, Аҫҡын ауылынан Наилә Имаева, Өфө ҡалаһынан Айгөл Ишемғолова, Рита Яҙыҡбаева, **Ғафури районы** Красноусол ауылынан Фәнисә Ишбулдина, **Балаҡатай районы** Яныбай ауылынан Рәфиә Ҡиәметдинова, **Октябрьский ҡалаһынан** Миҙхәт Шәрипов, **Белорет районы** Ҡаһарман ауылынан Нәфисә Шакирова, Нажиә Байымова, **Көйөргәҙе районы** Иҫке Мораптал ауылынан Зинәт Юлбаев, **Белорет ҡалаһынан** Зөлфиә Йомағужина, **Мәләүез районы** Иштуған ауылынан Ғәйнетдин Камалетдинов, **Учалы ҡалаһынан** Сәриә Әминева, Флүрә Ноғоманова, **Бөрйән районы** Ҡурғашлы ауылынан Рәмзиә Шәрәфетдинова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Ныҡлы сәләмәтлек, ғаилә именлеге, рух ныҡлығы, күңел күтәренкелеге теләйбеҙ. Йылдар дауамында һыналған дуҫлығыбыҙ артабан да дауам итер тип ышанабыҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# КЕР ЙЫУҒАНДА ҠУЛЛАН

**Йыуған керҙең таҙалығын, аҡлығын беҙ төрлө порошоктар һәм "Белизна" кеүек ағартҡыстар менән тәьмин итеп өйрәнгәнбеҙ, әлбиттә. Ләкин икенсе саралар ҙа барлығын беләһегеҙме?**

● Мәсәлән, 2 ҡалаҡ гәрсис порошогын 1 литр ҡайнар һыуға иҙәбеҙ һәм тонғанс ултыртып торабыҙ. Һәҙәбеҙ һәм кәрәгенсә һыу өҫтәйбеҙ. Аш бүлмәһендә тотонған таҫтамалдарҙы төнгөләккә ошо һыуҙа сылатабыҙ. Иртәгәһенә ғәҙәттәгесә йыуабыҙ. Таҫтамалдар - ағарып, ә һүрәттәре тағы ла сағыуланып ҡаласаҡ.

● Аҡ әйберҙәрҙе күп йыуһаң, улар һарғая башлай. Шуға ла уларҙы йыуған саҡта кер порошогына нашатыр спирты өҫтәргә була. Бер нисә тапҡыр ошолай йыуғандан һуң иҫке әйберҙәр ҙә яңырып ҡалыр.

● Ебәк, йөн әйберҙәрҙе 10 литр һыуға 50 грамм кер порошогы, 6 ҡалаҡ тоҙ, 1-әр ҡалаҡ нашатыр спирты һәм 3 процентлы водород перекисы ҡатнашмаһында 5 сәғәт сылатығыҙ, һуңынан йыуығыҙ.

● Йылы һыуға 2 ҡалаҡ бор кислотаһы өҫтәп, ойоҡтарҙы йыуһағыҙ, бәшмәк сирҙәренән профилактика булыр. Шул рәүешле башҡа кейемдәрҙе ағартырға ла була.

МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ

# БЫЛ ЮЛЫ МӘРГӘНДӘР...

## Учалы ерендә көс һынашты

**(Башы 11-се биттә).**

***Нурия Ихсанова, Силәбе ҡалаһы "Уралым" телетапшырыуы һәм гәзитенең баш мөхәррире:*** Силәбенән ундан ашыу кеше тотош бер делегация булып килдек, шуларҙың дүртәүһе традицион яндан уҡ ата. Мәргәндәребеҙҙең иң йөшө мәктәп уҡыусыһы, Ҡоншаҡ районынан Данил Хәснуллин. Уның атаһы ла, олатаһы ла традицион йәйәнән уҡ атыу менән шөғөлләнгән. Егетебеҙ уҡйәйәне үҙе эшләй ҙә.

Әле ошондай сараны Силәбе ерендә лә үткәрергә ине, тип ҡыҙығып торабыҙ. Беҙҙең бит Һары мәргән тигән билдәле шәхесебеҙ ҙә булған, мәҫәлән, турнирҙы уның исеменә арнарға була. Традицион яндан уҡ атыу бөгөн этник стилдәге модалы бер күренеш, тип тә әйтер инем. Йәштәрҙе ул ошо ағы менән дә ҡыҙыҡһындырмай ҡалмайҙыр. Бигерәк тә унда ҡыҙҙарҙың да, егеттәрҙең дә ҡатнаша, өйрәнә алыуы отошло. Әле үҙем дә тотоноп ҡарағайным, арҡаға, беләктәргә ярайһы ғына көс төшә икән. Йәғни, умыртҡа һөйәгенә, яурынбаштарға, елкәгә, ҡулдарға, күҙҙәргә яҡшы күнекмә. Быларға сәм ҡомары уятыуын да, сәхрәләр хозурлығын да өҫтәһәң, фитнес залдарын ары торһон!

***Ғәйниә Асуат, Ҡаҙағстан, Атырау ҡалаһы, бәйгелә ҡатнашыусы:*** Астана ҡалаһында психологҡа уҡып йөрөйөм. Традицион яндан уҡ атыу минең күңел өсөн ылығып киткән шөғөлөм. Башта атайым ылыҡҡайны был шөғөлгә, яйлап уға мин дә эйәрҙем. Был минең тәүге фестивалем, шулай уҡ Башҡортостанда ла тәүге тапҡырмын. Хистәремде әйтеп кенә аңлатып булмаҫ, бындай бай тәбиғәтте минең күргәнем дә булманы. Бәйгелә артыҡ уңыштарға өлгәшә алмаһам да, килгәнем, ҡатнашҡаным, яңы дуҫтар тапҡаным өсөн сикһеҙ шатмын. Был спорт төрө Ҡаҙағстанда ла яңы ғына үҫеш юлына баҫты, киләсәктә беҙ, төрки халыҡтары, ошондай бәйгеләрҙе бергәләп тә уҙғарырбыҙ, тип ышанам.

***Зәйет Шәкиров, Учалы районы Ҡолош ауылы, бәйгелә ҡатнашыусы, 87 йәш:*** Уҡ-ян менән беҙ бала саҡтан таныш. Малай ваҡыттағы уйындың бер төрө инде ул. Ҡартайғас, был шөғөл менән балалар ҡыҙыҡһындырҙы. Уларҙың атышҡанын ҡарап йөрөп, үҙем дә тотоноп киттем. Бер нәмәһе лә ауыр түгел, тоттом да аттым да ҡуйҙым. Үәт, шулай!

Ярышта беренсе тапҡыр ҡатнашам. Алла бирһә, көс булһа, артабан да йөрөрмөн әле бәйгеләргә. Оло-ларға ошондай шөғөл файҙалы ла, әүрәткес тә. Быға-са йәйәү йөрөүгә өҫтөнлөк бирә инем. Ҡолоштан утыҙ саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Мәскәү ауылына ошо йәйҙә генә лә биш тапҡыр йәйәү барып ҡайттым. Хәҙер бына уҡ атыу ҙа өҫтәлде ҡыҙыҡһыныуҙарыма. Ҡартлыҡҡа енел генә бирешмәҫкә иҫәп.

***Азат Ғарипов, Башҡорт дәүләт университетының Учалы вәкиллеге хеҙмәткәре:*** Фестивалдең бер өлөшө булып "Семәр" милли кейем тегеүселәр конкурсы торҙо. Талаптар буйынса, ҡатнашыусылар үҙҙәре теккән кейемдәр менән йә коллективтар өсөн башҡарған ижади эштәре менән килергә тейеш ине. Ундан ашыу бик үҙенсәлекле проект булды. Онотолған, күреп өйрәнелмәгән милли кейем өлгөләрен эҙләп табып, уларҙы шул заман материалдары нигеҙендә тергеҙеп алып килгән оҫталар. Бигерәк тә төньяҡ-көнбайыш башҡорттары кейемен күрһәтеүсе өлгөләр оҡшаны. Боронғо һүрәттәргә, фотоларға ҡарап, кейемдәргә ерлек орнаменттарына тиклем дөрөҫ итеп ултыртылғайны. Быларҙан тыш, боронғолоҡ өлгөләрен заманса кейемдәргә күсереп ижад итеүселәр ҙә табылды. Хатта элекке формаларҙы яңы материалдарҙа тегеүселәр ҙә бар ине. Әлбиттә, быларҙың барыһы ла яҡшы, әммә бөтөн ошо эштәргә тотонор алдынан оҫталарға милли кейемдәр тарихын ентекле өйрәнергә кәңәш итер инем. Сөнки бөгөн ошо кейемдәр аша бирелгән мәғлүмәт киләсәккә китәсәк һәм яңылыш булғанда, яңылыш булып күсәсәк. Мәҫәлән, хәҙер ағинәйҙәребеҙ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары кейеменең айырылғыһыҙ өлөшө булған яға (селтәр, һаҡал), ҡашмауҙарҙы тергеҙеү менән әүҙем шөғөлләнә, Учалыла, Әбйәлилдә хатта айырым конкурс та ойошторолдо. Әммә ҡыҙыл сепрәккә төрлө төймә-мәрйен, биҙәүестәр тағып, заманлаштырам, еңелләштерәм, тип, был биҙәүестәрҙең ысын өлгөләренән ситләшеүҙәр күбәйеп бара. Беҙ быға юл ҡуйырға тейеш түгелбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Фестиваль көндәрендә бер төркөм белгестәр уҡ-һаҙаҡ менән ҡыҙыҡһыныусыларҙың ихтыяжын ҡәнәғәтләндереп торҙо. Теләгәндәр килеп уҡ-яндарҙы тотоп, атып ҡарай алды. Был урында мәңге сират булды. Сөнки теләүселәрҙең иҫәбе-һаны юҡ ине. Күптәр сәмләнеп ҡыҙышып китеп: "Мин дә ян алмаһаммы! Икенсе бәйгелә ҡатнашмаһаммы!" - тип ысҡындырҙы. Шундайҙарға ҡарап, киләһе бәйгеләрҙә ҡатнашыусылар һаны тағы ла күберәк булырына шик ҡалмай.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**



АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙӘШ ЕГЕТТЕ ХУРЛАМА:

## уҡыһа, илгә баш булыр

Ғәҙелһеҙлек алға сыҡҡанда, дөрөҫлөк артҡа сигә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Тәүҙә һеҙ эсемлек талап итәһегеҙ, һуңынан эсемлек эсемлекте талап итә, шунан эсемлек һеҙҙе талап итә...

**(Синклер Льюис).**

Берәй кемгә яҡшы вазифа биргән һайын, мотлаҡ рәүештә туҡһан туғыҙ кәйефһеҙ һәм бер рәхмәтһеҙ кешегә юлығам.

**(Людовик XIV).**

Шәкәр һәм емеш-еләк өҫтәһәң, хатта хыялдан да варенье яһап була.

**(Станислав Лец).**

Йәмғиәт нисек фекерләй, уның менән шулай идара итәләр. Йәмғиәт ахмаҡ һүҙ һөйләй икән, министрҙар ҙа ахмаҡтарса эш итә.

**(Вольтер).**

Был актрисаның карьераһы... режиссер тормошонда уйнаған роленән башланды.

**(Габриэль Гауб).**

Әгәр ҙә өләсәй һәм олатай ейәнейәнсәрҙәре тәрбиәһенә ҡыҫылыуҙы мотлаҡ тип иҫәпләй икән, тимәк, улар үҙ балаларының тәрбиәһендә әллә ни уңышҡа өлгәшмәгән.

**(Роберт Лембке).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ваҡыт аҡһаҡал үҙенең уҡыусыларын саҡырып ала ла, уларға аҡ ҡағыҙ бите күрһәтә һәм:**

**- Әйтегеҙ әле, ошо ҡағыҙ битендә ни күрәһегеҙ? - тип һорай.**

**- Нөктә күрәм... - ти бер уҡыусыһы.**

**- Ҡара нөктә күрәм, - ти икенсеһе.**

**- Ҙур ғына ҡара нөктә күрәм... - ти өсөнсө уҡыусыһы.**

**Шул саҡ аҡһаҡал ситкә китә лә, бер мөйөшкә ултырып, тынып ҡала. Уның һүҙһеҙ генә илауын һиҙеп ҡалған уҡыусылары аптырауҙан өнһөҙ ҡала. Шулай ҙа берәүһе батырсылыҡ итеп:**

**- Һеҙ ни өсөн илайһығыҙ? - тип һорай.**

**- Миңә шул тиклем ҡыйын, сөнки минең уҡыусыларым был ҡағыҙ битендә бары тик ҡара нөктәне генә абайланы, ә ап-аҡ ҡағыҙ битен күрмәне... - тип яуаплай аҡһаҡал.**

**...Беҙ йыш ҡына кеше тураһында уның бәләкәй генә сифаттары йә ҡылыҡтары буйынса фекер йөрөтәбеҙ шул, ә уның асылда ниндәй баһаға эйә булыуы тураһында уйламайбыҙ".**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәррирәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 21 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тираҙы - 4677
Заказ - 1468/07